# СИЛӘБЕ БАШҠОРТТАРЫНЫҢ ӘҘӘБИӘТ АНТОЛОГИЯҺЫ

# СИЛӘБЕ БАШҠОРТТАРЫНЫҢ ӘҘӘБИӘТ АНТОЛОГИЯҺЫ

Зәйнәб Биишева исемендәге "КИТАП" нәшриәте

ӨФӨ · 2011

УДК 821.512.141:398
ББК 82 (2 Рос=Баш)
С 43

Силәбе башҡорттарының әҙәбиәт антологияһы:
С 43 фольклор, проза, поэзия. — Өфө: Китап, 2011. — 168 бит.

ISBN 978-5-295-05166-1

Был китапта Силәбе еренән сыҡҡан әҙип һәм ғалимдарҙың ижад өлгөләре, хәҙерге осорҙағы әҙәби тормошҡа байҡау, шулай уҡ ошо тарафтарҙа халыҡтан яҙып алынған боронғо ҡобайырҙар, йырҙар, мәҡәл-әйтемдәр бергә тупланды. Уларҙы бер йыйынтыҡ — антология тип атарға булдыҡ.

УДК 821.512.141:398
ТП–154/2011 ББК 82 (2 Рос=Баш)

ISBN 978-5-295-05166-1 © Төҙөүсеһе Мортазин Ҡ. Д., 2011

# Силәбенең тынмаҫ моңдары

Һуңғы ваҡытта айырым төбәктәрҙең тарихын ентекле өйрәнеү, шул ерлектә ижад ителгән рухи ҡиммәттәрҙе бер урынға туплау һәм ундағы арҙаҡлы шәхестәрҙе барлау эштәре йәнләнде. Әнүәр Әсфәндиәровтың «Ауылдар тарихы» хаҡындағы хеҙмәттәре, Фәнүзә Нәҙершинаның «Рухи хазиналар», Әлим Зариповтың «Әй Яйыҡ йорт, Яйыҡ йорт», Рәүеф Насировтың «Ете һыу башы», Рәүеф Шәһиев төҙөгән «Учалы — алтын бишегем» исемле район энциклопедияһы шуға асыҡ дәлил. Был хеҙмәттәр тыуған яҡ тарихын өйрәнеүҙә мөһим сығанаҡ, яуаплы һәм изге эштәрҙең матур башланғысы булды.

Билдәле булыуынса, әүәлдән тыуған яҡ материалы белем һәм тәрбиә сығанағы булған. Һәр төбәктең данлы батырҙары, абыҙҙары, сәсәндәре, ҡурайсылары, йырсылары легендаларҙа, йыр-риүәйәттәрҙә мәңгеләштерелеп, халыҡтың ғорурлығына әүерелгән. Хәҙерге мәғариф өлкәһендә тыуған яҡты өйрәнеүгә ҙур иғтибар бирелә, уҡытыу концепцияһының бер йүнәлеше булып нығынды. Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Ишмөхәмәт Шарапов: «Борон-борондан башҡорт халҡы йәш быуынға белем һәм тәрбиә биреүҙә тыуған төбәк материалдарын бик уңышлы файҙаланған. Хатта мәҙрәсәләр булмаған осорҙа ла ололар һүҙе һәм тыуған төбәк үҙенә күрә белем һәм тәрбиә биреүсе мәктәпкә әүерелгән»[1], — тип яҙҙы. Силәбе башҡорттарының

---

[1] *Шарапов И.* Тыуған төбәк — белем һәм тәрбиә сығанағы // Башҡортостан уҡытыусыһы, 2003, № 6. 33-сө бит.

рухи донъяһын йыйыу, туплау һәм өйрәнеү көн талабы булып ҡала.

Силәбе ере — боронғо башҡорт ере. Ғалимдар раҫлауынса, халҡыбыҙ был төбәктә боронғо Төрки ҡағанаты (VI—VIII быуаттар) осоронан алып йәшәй. Был фактты ата-бабаларыбыҙ ҡушҡан ер-һыу, урын атамалары иҫбатлай. Тағанай, Илмән тауҙары, Торғаяҡ, Киҙәгәс, Арғужа, Ҡалды, Тәхәлем, Өйәлге, Маян күлдәре, Мейәс, Тинес, Ҡараһыу йылғалары һаман байтаҡ серҙәр һаҡлай. Халыҡ уларҙың исемдәре менән бәйле әҫәрҙәр ижад иткән. Шундай гүзәл тыуған яҡтың быуаттар буйына тупланған рухи ҡиммәттәрен белеү — тарихи хәтерҙе яңыртыу ул.

Силәбе башҡорттары фольклорына иғтибар электән йәшәй. Тыуған яҡты өйрәнеүселәр, ғалимдар һәм яҙыусыларҙың тикшеренеү үҙәгендә булды. XIX быуатта П. Кудряшев, А. Бессонов, Д. Зеленин кеүек урыҫ ғалимдары иғтибар итә. XX быуаттың тәүге яртыһында Фәтхелҡадир Сөләймәнов, Барый Әлмөхәмәтов, Әхнәф Харисов кеүек ғалимдар халыҡ ижадын йыйыу менән шөғөлләнә. 1936 йылда «Сүкем батыр» ҡобайыры табыла. 1938 йылда Ғәлимов Сәләм әсәһенән «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» иртәген яҙып ала. 60-сы йылдарҙа Силәбе яҡтарына махсус ғилми экспедиция ойошторола. Кирәй Мәргән «Йыр дәфтәре» (1964) китабындағы фольклорист яҙмаларында шул хаҡта асыҡ яҙып ҡалдырған. Салауат Галин, Ниғәмәт Шоңҡаров, Әхмәт Сөләймәнов кеүек фольклорсы ғалимдар силәбеләрҙең рухи донъяһын тергеҙеүгә ҙур өлөш индерә. «Башҡорт халыҡ ижады» томдарында Силәбе ерлегендә йыйып алынған рухи ҡиммәттәр ҙур ғына урын биләй.

XX быуат аҙағында Силәбе башҡорттарының рухи донъяһына иғтибар һүрелмәй. Башланған эштәр артабан үҫтерелә. Хөрмәт Бикҡоловтың «Силәбе моңдары» (1989) исемле тик йырҙарҙан торған китабы баҫыла. Хәйҙәр Хәйҙәровтың «Туй йолалары» (1991), Дамир Вәлиевтең «Арғаяш башҡорттарының рухи мираҫы» (1996) китаптары донъя күрә. Бөгөн был изге башланғысты Силәбе дәүләт университетының көнсығыш бүлеге белгестәре һәм студенттары дауам итә.

«Силәбе башҡорттарының әҙәбиәт антологияһы»н төҙөгәндә, барлыҡ башҡарылған хеҙмәттәрҙе иҫәпкә алып, эште өс ҙур бүлектә ойоштороу уңайлы тип табылды. Хеҙмәттең өс бүлеге хронологик тәртиптә бирелә. Силәбе

башҡорттарының рухи донъяһына сәйәхәтте әҙәбиәттең нигеҙе булараҡ халыҡ ижады башлап ебәрә. Унда халыҡ ижадының быуаттар буйына туплана килгән бай йөкмәткеле әҫәрҙәре һәм жанрҙары менән танышырға мөмкин. Эпостар, лирик һәм афористик жанрҙар менән бергә, балалар фольклоры ла тәҡдим ителә.

Һүҙ ыңғайы шуны әйтәһе килә: заманалар ҡатмарлы булыуына ҡарамаҫтан, халыҡ күңелендә ижад осҡоно һүнмәгән. Тарихи йырҙар, шаян таҡмаҡтар, һағышлы сеңләүҙәр, дини мөнәжәттәр, аҡыллы мәҡәл-әйтемдәр — бына шулар халыҡ тормошон оҙата йөрөгән. Ауылдарҙа тирә-яҡҡа билдәле һүҙ оҫталары булған. Улар тыуҙырған ижад өлгөләре телдән телгә күсә барған. Әҙәбиәтебеҙҙең боронғо йәшәү рәүеше төбәктә шулай һаҡланған. 60-сы йылдар тәьҫораттары менән уртаҡлашып ғалим Салауат Галин: «Экспедиция барышында тиҫтәләгән сәсәндәр асыҡланды: Һибәт Даянов, Маһинур Шаимов, Яхъя Хәмзин, Сәләхетдин Насретдинов, Әхмәтйән Сабитов, Шәйхулла Мәғәсүмов, Ҡазый Моратов, Шәмсетдин Йәлилов»[1], — тип яҙҙы.

Халыҡ ижады көслө урғылған урында рух ҡаҡшамай. Бай традиция ерлегендә талантлы әҙиптәр үҫеп сығыуы тәбиғи хәл. Ғәлимов Сәләм, Ҡадир Даян, Мөхәмәтйәров Хәй, Кәтибә Кинйәбулатова кеүек һоҡланғыс шағирҙар, асылда, шундай һутлы ерлеккә ереккән ижад. Уларҙың әҫәрҙәре башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондын тәшкил итеүе шуны раҫлай.

Антологияның икенсе бүлеге «Силәбе — таланттар төйәге» тип атала. Был бүлектә Силәбе еренән үҫеп сыҡҡан күренекле ижади шәхестәр эшмәкәрлеге менән киңерәк таныштырыу маҡсаты ҡуйыла. Унда ғалим һәм әҙип Фәтхелҡадир Сөләймәнов, тәнҡитсе Жан Лоҡман, ғалим Дамир Вәлиев, шағирҙар Ғ. Сәләм, Ҡ. Даян, М. Хәй, К. Кинйәбулатова, У. Кинйәбулатов, Р. Шәғәлиев, Д. Талхиналарҙың тормош юлы һәм ижады тәҡдим ителә.

1884—1917 йылдарҙа Троицк ҡалаһында тирә-яҡҡа даны сыҡҡан «Рәсүлиә» мәҙрәсәһе эшләй. Унда атаҡлы шағирҙар Мәжит Ғафури һәм Ямалетдин Юмаев уҡыған. Был йәҙитсел

---

[1] *Галин С.* Фольклор башкир Челябинской области // Язык и литература как способы проявления национального менталитета. Материалы первой межрегиональной научной конференции. Челябинск, 2003. С. 4.

мәҙрәсәнең яҡташыбыҙ ғалим-шәрҡиәтсе Фәтхелҡадир Сөләймәновтың белем офоҡтарын киңәйтеүҙә һәм шәхесен тәрбиәләүҙә роле ҙур була. Уның артабан талымһыҙ йәмғиәт эшмәкәре, тынғыһыҙ әҙип һәм абруйлы ғалим булып китеүенә ошонда нигеҙ һалына.

1906 йылда Силәбе ҡалаһында мосолман китапханаһы асыла. Артабан был изге китап йорто, төбәктә «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенән ҡала, икенсе мәҙәни үҙәккә әүерелә. 20-се йылдарҙа Нурислам Бабичев (Шәйехзада Бабичтың ағаһы) китапхананың мөдире була. Шул йылдарҙа ҡаһарман шағир Ш. Бабичты мәңгеләштереү йәһәтенән китапханаға уның исеме бирелә. Силәбе башҡорттары яҙмышында китапхана бөйөк шағир исеменә тоғро ҡалып, мәҙәни-ағартыу усағы булараҡ, байтаҡ әһәмиәтле эштәр башҡара.

1962 йылда китапхана үҙ яҙмышына әле генә унда ойошторолған башҡорт һәм татар әҙәби берекмәһенең яҙмышын иш итә. Әҙәби берекмә шағир-патриот Муса Йәлил исемен алып йәш ҡәләм тирбәтеүсе яҡташтарҙы туплай. Рамазан Шәғәлиев, Булат Батталов, Урал Сафиуллин, Фәрит Хәсәнов, Фирҙәүес Бәширова, Камил Мостафин, Сәлисә Гәрәева, Ғәзиз Кашапов, Әхмәт Рафиҡов, Ришат Садыҡов, Басир Рафиҡов кеүек башҡорт һәм татар яҙыусыларын берләштерә. Силәбе өлкәһендәге милли әҙәбиәт хәстәре менән йәшәү әҙәби берекмә өлөшөнә төшә. Уның сафынан шағирҙар, яҙыусылар һәм журналистар үҫеп сыға.

1997 йылдан әҙәби берекмә мәғрифәтсе-шағир Мифтахетдин Аҡмулла исемен йөрөтә. Силәбе дәүләт университетының Көнсығыш бүлегендә «Ҡарлуғас» әҙәби түңәрәген ойошторҙо. Унда йәштәр әҙәби ижадҡа ылыҡтырыла. Алевтина Вәлиева, Ирек Сабиров, Жанфида Ваһапова, Рафаэль Мөхәмәтйәнов, Файза Мәғәсүмова, Урал Ҡолошов, Луиза Закирйәнова, Нурислам Айбулатов, Юлиә Вәлиева, Зимфера Ширванова, Зөлфирә Исрафилова, Зилә Ғәләмова, Лилиә Әхмәҙиева, Фидәрит Хафизов, Айҙар Ишбирҙин берекмәнең төп көсө. Әҙәби берекмә эшләү дәүерендә Башҡортостан, Татарстан һәм Рәсәй Яҙыусылар союзына барлығы 8 ағза әҙерләне.

«Силәбелә хәҙерге әҙәби тормош» — антологияның өсөнсө бүлеге. Уның төп маҡсаты — үрҙә әйтелгән Силәбе өлкәһенең Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә ағзалары менән таныштырыу. Берекмә ойошторолоуға 45 йыл тулып

үтте. Шәйехзада Бабич исемендәге милли китапхана, Силәбе дәүләт университетының Көнсығыш бүлеге менән әҙәби берекмә берҙәм йәшәй. Әлеге ваҡытта ошо өс таған Силәбе өлкәһендә милли мәҙәниәтте һәм әҙәбиәтте үҫтереүҙә төп таяныс булып ҡала.

Шулай итеп, йыйып әйткәндә, Силәбе башҡорттарының күңел донъяһы даръялай тынғы белмәй. Дәүер бөгөлдәрендә үҙ юлынан яҙмай өмөт, ышаныс менән йәшәүен дауам итә. Төрлө осорҙа йыйып алынған бай халыҡ ижады өлгөләре һәм тупланған нәфис әҙәбиәт үрнәктәре шуны ҡеүәтләй.

Был антология бығаса башланған тыуған яҡты өйрәнеүселәр, ғалимдар һәм әҙиптәрҙең маҡтаулы эштәренең дауамы. Силәбе башҡорттарының рухи донъяһын бер урынға туплау маҡсатынан башҡарылды. Әҙәби-биографик йүнәлештәге хеҙмәт мәктәптәрҙә, махсус һәм юғары уҡыу йорттарында тыуған яҡты өйрәнеүҙә ярҙам булыр тип ышанабыҙ.

***Ҡамса Мортазин****, филология фәндәре кандидаты,*
*Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре*

# Силәбе башҡорттары фольклоры

## ЭПОСТАР

### ҠУҘЫЙКҮРПӘС МЕНӘН МАЯНҺЫЛЫУ

*(Ғ. Сәләм версияһы)*

Борон-борон заманда Күсәр менән Күсмәҫ тигән ике хан йәшәгән, ти. Улар икеһе бик дуҫ булып, бер-береһенә ҡунаҡҡа барышыр, ҡош сөйөп, төлкө алдырып, бергә һунарға йөрөшөр булғандар, ти.

Шулай, ҡәҙимгесә, Күсәр хан менән Күсмәҫ хан һунарҙа йөрөйҙәр ине, ти. Бер көн йөрөнөләр, ике көн йөрөнөләр, ти, былар — бер генә ҡош та, йәнлек тә осратманылар, ти. Өсөнсө көн тигәндә бер юл сатына барып сыҡтылар, ти. Юлдың береһе уңға, икенсеһе һулға китә икән, ти. Күсәр хан уң яҡҡа, Күсмәҫ хан һул яҡҡа китте, ти. Хәтһеҙ йөрөгәс, былар бер-береһенә яңынан тап булышҡандар, ти. Шул ерҙә Күсәр хан:

— Йә, Күсмәҫ, һин ниҙәр күрҙең? — тип һораны, ти.

Күсмәҫ хан:

— Мин бер болан осраҡайным, атмаҡсы булып, йәйәмде ҡулға алһам, болан абсая баҫты ла торҙо, имсәктәренән һөтө эйеп китте. Йәлләнем дә, атманым. Ә һин нимә күрҙең, Күсәр хан? — тип әйтте, ти.

Күсәр хан:

— Мин дә бер болан күрҙем. Атмаҡсы булып, йәйәмде алғайным, ул да абсая баҫты ла торҙо, имсәктәренән һөтө эйеп китте. Йәлләнем дә, атманым, — тине, ти.

Шунан һуң Күсмәҫ хан Күсәр хандан:

— Был беҙҙең күргәндәр нимә булыр тип уйлайһың? — тип һораны, ти.

Күсәр хан:

— Минең бисәм йөклө булып ҡалғайны, шул бала тыуғандыр, тип уйлайым, — тип юраны, ти.

Күсмәҫ хан да:

— Минең бисәм дә йөклө булып ҡалғайны. Мин дә шулайҙыр тип уйлайым, — тине, ти.

Шунан: «Әгәр ҙә беҙҙең юрағандарыбыҙ дәң килеп[1] беребеҙҙең — ҡыҙ, беребеҙҙең ул булһа, ҡоҙа булышырбыҙ», — тип һүҙ ҡуйыштылар, ти, былар.

Был ике хан өйҙәренә ҡайтып килһәләр, үҙҙәре юрағандың дәң килеүен күрәләр. Күсмәҫтең бисәһенән бер ир бала, ә Күсәрҙең бисәһенән ҡыҙ бала донъяға килгән, ти. Икеһе лә балалары булыуға бик шатланып, уларға исем ҡушырға булдылар, ти. Ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, бик күп ҡунаҡ йыйҙылар ҙа ҙур исем туйы яһанылар, ти. Бөтә халыҡ алдында Күсмәҫ хан үҙ улына Ҡуҙыйкүрпәс тип, Күсәр хан ҡыҙына Маянһылыу тип исем бирҙеләр, үҙҙәренең ҡоҙа булышырға ҡуйған вәғәҙәләрен дә әйттеләр, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу береһе ай, береһе көн кеүек матур булып үҫә башланылар, ти. Уларҙың матурлығына һоҡланмаған кеше юҡ ине, ти. Улар бәләкәй саҡтарында гел генә бергә йөрөйҙәр, бергә уйнайҙар ине, ти.

Берҙән-бер көндө Ҡуҙыйкүрпәстең атаһы ауырып китте, ти. Тирә-яҡтағы бөтә им-томсоларҙы, бағыусыларҙы килтереп, имләп, баҡтырып ҡараһалар ҙа, уларҙың береһе лә ярҙам итә алманы, ти. Күсмәҫ хандың ауырыуына дарман табылманы, ул шулай итеп үлеп тә китте, ти. Ҡуҙыйкүрпәс әсәһе менән генә

[1] Дәң килеп — тура, тап килеп.

ҡалып, етем бала булып йөрөй башланы, ти. Күп ваҡытын урамда балалар менән уйнап үткәрә ине, ти. Ҡуҙыйкүрпәс, йәшкә бәләкәй булһа ла, көрәштә үҙенән оло балаларҙы үҙ алдына сығармай ине, ти. Уйында, асыуландыра ҡалһалар, балаларҙың ашыҡтарын, бураларын талап ҡайтып киткән саҡтары ла булғылай ине, ти. Ләкин был уйынсыҡтарҙы шунда уҡ кире килтереп бирер ине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәстең ана шулай яманаты таралып китте, ти. Был хәл Күсәр хандың да эсен бошора башланы, ти. Маянһылыуҙың кейәүе буласаҡ Ҡуҙыйкүрпәстең, берҙән, етем булып, икенсенән, уның шулай үҙ һүҙле, шуҡ малай булып үҫеүе Күсәр ханға оҡшамай ине, ти. Берҙән-бер көн хан үҙенең бисәһенә:

— Йә, бисәкәй, һин нисек уйлайһың? Берҙән-бер ҡыҙыбыҙ Маянһылыуҙы Ҡуҙыйкүрпәскә кейәүгә бирһәк, ҡыҙыбыҙға ла, үҙебеҙгә лә хурлыҡ бит! Был илде ташлап, ете тау, ете ялан, ете диңгеҙ аша сығып китәбеҙме әллә? — тине, ти.

Күсәр хандың бисәһе быға риза булды, ти. Күп тә үтмәй, былар өйөр-өйөр, көтөү-көтөү малдарын әйҙәп — йылҡыларын кешнәтеп, һыйырҙарын мөңрәтеп, ҡуй-һарыҡтарын баҡыртып, баш һуҡҡан яҡҡа күсеп тә киттеләр, ти.

Хәтһеҙ йылдар үтеп, Ҡуҙыйкүрпәс тә ун ете йәшкә етте, ти. Тирә-яҡта уның көсөнә тиң булырлыҡ кешеләр ҙә табылмай башланы, ти.

Бер көндө шулай малайҙар менән көрәшепме, һуғышыпмы уйнағанда, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡулы яңылыш бер әбейҙең берҙән-бер балаһына тейеп китте лә, теге малай иҫенән яҙып, йығылды, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс уны әсәһенә күтәреп алып барҙы, ти. Әбей Ҡуҙыйкүрпәсте әрләй-әрләй:

— Бер йүнле егет булһаң, һинең кәләшең, буласаҡ ҡыҙың да ташлап китмәҫ ине! — тип әйтте, ти.

Был һүҙҙе ишеткәс, Ҡуҙыйкүрпәс эҫеле-һыуыҡлы булып китте, ти. Ни өсөн тиһәң, ул быға тиклем Маянһылыуҙың үҙенең кәләше булғанлығы тураһында бер нәмә лә белмәй йөрөй ине, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс бик ҡыҙыҡһынып, әбейҙән:

— Мине ниндәй ҡыҙ ташлап китте һуң? Ниңә әйтмәйһең әбей? — тип үтенде, ти.

— Ҡайт та әсәйеңдән һора, — тип әйтте, ти, был әбей.

— Ул быға тиклем әйтһә әйтер ине инде. Һорағас та әйтмәҫ булһа, ни эшләрмен һуң? — тине, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

— Һорап-һорап та әйтмәһә, мин һиңә бер аҡыл өйрәтәйем, — тип, был әбей Ҡуҙыйкүрпәскә ошондай бер хәйлә өйрәтте, ти. — Һин әсәйеңдән бик һәйбәтләп кенә ҡурмас ҡыҙҙырт. Әсәйең шул ҡыҙҙырылған ҡурмасты ҡалаҡ менән бирһә, алма — усына һалып бирһен. Шул саҡта һин әсәйеңдең эҫе ҡурмас һалған усын ҡуша баҫырһың да: «Миңә кәләш буласаҡ ҡыҙ кем ине? Ниңә ул мине ташлап китте?» — тип һорарһың. Шунан ул әйтмәй булдыра алмаҫ, — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, өйөнә ҡайта һалып, әсәһенән:

— Миңә кәләш буласаҡ ҡыҙ кем ине? Ниңә ул мине ташлап китте? — тип һораны, ти.

Әсәһе:

— Ҡайҙан алдың был һүҙҙе, улым? Бер ҡыҙҙың да һиңә кәләш итеп әйттерелгәне лә, ташлап киткәне лә юҡ, — тине, ти.

Шунан Ҡуҙыйкүрпәс:

— Әсәй, бигерәк ҡурмас ашағым килеп китте, миңә ҡурмас ҡыҙҙырып бирсе? — тип үтенде, ти.

Әсәһе ҡурмас ҡыҙҙырып, ҡалаҡ менән алып биргәйне, Ҡуҙыйкүрпәс быны алмайынса:

— Ҡалаҡ менән бирмә, услап алып бир, — тип әйтте, ти.

Шунан әсәһе эҫе ҡурмасты услап алып бирмәксе генә булғайны, Ҡуҙыйкүрпәс әсәһенең усын ҡуша баҫты ла: «Миңә кәләш буласаҡ ҡыҙ кем ине? Ниңә ул мине ташлап китте?» — тип һораны, ти. Шунан әсәһе ҡыҙыу ҡурмастың усты бешереп алып барыуына түҙмәй: «Һиңә кәләш булырға тейешле ҡыҙ — Күсәр хан ҡыҙы Маянһылыу ине. Һиңә бирмәҫ өсөн, атаһы

күптән инде ете тау, ете ялан, ете диңгеҙ аръяғына алып китте», — тип әйтте, ти.

Шунан һуң Ҡуҙыйкүрпәс, нисек тә булһа Маянһылыуҙы барып табыу уйына төшөп, баяғы әбейгә барып кәңәш итте, ә ул әбей шундай аҡыл өйрәтте, ти:

— Өйөр-өйөр йылҡығыҙ араһында атайың һунарға йөрөгән Күк толпар булыр. Һин нисек тә шуны тоторға тырыш. Йылҡыларығыҙ төш ваҡытында йылғаға һыулауға төшөр, ә Күк толпар иң алдан йөрөй. Һин ҡороҡ менән шул толпарҙы тотоп ал да баш тартҡан яғыңа кит тә бар.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙы тоторға атаһынан ҡалған йылҡы өйөрҙәре йөрөгән йылға буйына китте, ти. Төш ваҡыты етерҙән алда, ҡулына ҡороҡ тотоп, малдар һыулауға төшә торған йомро юл буйына йәшенеп ятты, ти. Бына бер ваҡыт өйөр-өйөр йылҡы йомро юл буйлап һыулауға төшә башланы, ти. Беренсе өйөр, икенсе өйөр үтте, ти. Ә өсөнсө өйөрҙөң алдында Күк толпар килә ине, ти. Әммә ул, Ҡуҙыйкүрпәс ятҡан ергә етер-етмәҫтән, ялын, ҡойроғон текә сәнсеп, уйнаҡлап, ҡоршолдап кире китте лә барҙы, ти. Бер аҙҙан һуң боролоп килде, ти, был толпар. Был юлы ла, Ҡуҙыйкүрпәс тәңгәленә етер-етмәҫтән, кире юлдан кире китте, ти. Өсөнсө тапҡыр килеүендә сабып үтеп китмәксе булғайны, Ҡуҙыйкүрпәс ҡороҡ менән муйынынан эләктереп тә алды, ти. Күк толпар Ҡуҙыйкүрпәсте өс тапҡыр күккә, өс тапҡыр ергә алып һуҡты, әммә уны бер нәмә лә эшләтә алманы, ти.

Шунан Күк толпар телгә килеп: «Хәҙер инде мин һинеке, ни ҡушһаң, шуны үтәйем», — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс үҙенең теләген әйтеп биргәс, Күк толпар: «Хәҙер һин минең арҡамды телгеләп, унда атайыңдың батып ҡалған алтын ҡашлы эйәрен, айбалтаһын, көмөш көҙгөһөн, һунарға йөрөгәндә кейә торған ҡырма бүркен, көмөш биҙәкле ҡәмәрен ал да үҙемде ошо йылғаның иң тәрән еренә индереп ҡуй. Шунда арҡамдың телгеләнгән ерҙәре уңалғас, алып сығырһың», — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙың арҡаһын телгеләп, ул әйткән әйберҙәрҙе берәм-берәм алды ла, үҙен йылғаның иң тәрән еренә индереп ҡуйҙы, арҡаһы уңалғас, кире алып сыҡты, ти.

Күк толпар, йылғанан сыҡҡас, Ҡуҙыйкүрпәскә: «Әсәйең ете тау, ете ялан, ете диңгеҙ аша Маянһылыуҙы эҙләп китеүеңә ҡаршы булыр. Ул һине ебәрмәҫкә теләп, бына ошолай һамаҡлап әйтер, — тине, ти.

Өйөр ҙә өйөр малың ҡалыр,
Уны нисек итерһең, балам?
Нисек итерһең, балам?
Осһоҙ ҙа башһыҙ урман булыр,
Уны нисек үтерһең, балам?
Нисек үтерһең, балам?
Икһеҙ ҙә сикһеҙ диңгеҙ булыр,
Уны нисек кисерһең, балам?
Нисек кисерһең, балам?
«Ете ҡабып, ете йотам» бүре килер,
Унан нисек ҡасырһың, балам?
Нисек ҡасырһың, балам?

— Ә һин әсәйеңә бына ошолай һамаҡлап яуап бирерһең, — тип әйтте, ти, Күк толпар:

Өйөр ҙә өйөр малым ҡалһа,
Бер йылҡынан биш булыр, әсәй,
Биш булыр, әсәй.
Осһоҙ ҙа башһыҙ урман булһа,
Атайымдың айбалтаһы иш булыр, әсәй.
Иш булыр, әсәй.
Икһеҙ ҙә сикһеҙ диңгеҙ булһа,
Атайымдың көмөш көҙгөһө иш булыр, әсәй,
Иш булыр, әсәй...
«Ете ҡабып, бер йотам» бүре килһә,
Атайымдың Күк толпары иш булыр, әсәй,
Иш булыр, әсәй...»

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙы менеп алып, өйгә ҡайтып, Маянһылыуҙы эҙләп китергә йыйыныуын әйткәс, әсәһе уға ана шулай тип һамаҡланы, Ҡуҙыйкүрпәс тә уға, Күк толпар әйткәнсә, һамаҡлап яуап бирҙе, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпары теҙгенен ҡағып ебәреүе булды — Күк толпарҙың осороп алып китеүе булды, ти.

Эй китте, эй китте, ти, Ҡуҙыйкүрпәс, бара торғас, осһоҙ-ҡырыйһыҙ, дөм ҡараңғы урманға килеп етте, ти. Шул ваҡыт Күк толпар телгә килеп;

— Атайыңдың айбалтаһын ташла! — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс атаһының айбалтаһын ташлап ебәргәйне, осһоҙ-ҡырыйһыҙ дөм ҡараңғы урмандың уртаһынан туп-тура юл һалынды, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс айбалтаһын алды ла шул юлдан елдереп, Күк толпар менән үтеп тә китте, ти.

Эй китте, эй китте, ти, Ҡуҙыйкүрпәс, бер ваҡыт икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ янына барып етте, ти, был. Шул ерҙә Күк толпар телгә килеп:

— Атайыңдың көмөш көҙгөһөн ташла! — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс атаһының көмөш көҙгөһөн ташлап ебәргәйне, икһеҙ-сикһеҙ булып йәйелеп ятҡан диңгеҙ аша бөгөлөп-һығылып торған быяла күпер һалынды, ти. Ҡуҙыйкүрпәс, көмөш көҙгөһөн алып, ана шул бөгөлөп-һығылып торған күперҙән Күк толпары менән елдереп сығып китте, ти.

Диңгеҙ арҡыры һалынған был күперҙе сыҡҡас, эй китте, эй китте, ти, Ҡуҙыйкүрпәс, бара торғас, бер тау итәгенә килеп етте, ти, был. Ҡараһа — ҡаршы яҡтан ауыҙҙарын асып, тештәрен ыржайтып, «ете ҡабып, бер йотам» ете бүре килеп сыҡты, ти. Шул саҡ Күк толпар телгә килеп:

— Ҡамсың менән минең уң яҡ ҡабырғама һуҡ — һул ҡабырғамдан ҡан атылып сығырлыҡ булһын, ә үҙең күҙеңде йом! — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс ҡамсы менән Күк толпарҙың уң ҡабырғаһына һуҡҡайны, һул ҡабырғаһынан ҡан атылып сыҡты, ти. Үҙе күҙҙәрен йомдо, шул арала Күк

толпар, ел кеүек осоп, бүреләрҙе үтеп тә китте, ти. Шунан Күк толпар:

— Инде күҙеңде ас та, артыңа әйләнеп ҡара, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс күҙен асып артына әйләнеп ҡараһа, әле тороп ҡалған тау башында, сәстәрен туҙҙырып, әсәһе баҫып тора, ти.

Шул тау башынан әсәһе:

— Улым, мин һиңә күпме ҡаршылыҡ күрһәттем — сәстәремде ҡара урман иттем, күҙ йәшемде — диңгеҙ, ете бөрсәне — ете бүре иттем — барыһын да үтеп сыҡтың, батыр егет икәнһең, барыр юлың да, ҡайтыр юлың да уң булһын инде! — тип ҡысҡырып ҡалды, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс тағы ла алға китте, ти. Бара торғас, юлаусылар ҡунып киткән бер урынға килеп туҡтаны, ти. Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарынан төшөп, ут яҡҡан урынды һәрмәштереп ҡараһа, көл эсенән ҡара күмер булып көйгән сөсикмәк табып алды, ти. Был — Ҡуҙыйкүрпәс мине эҙләп килә торған булһа, табып ашар, тип, Маянһылыу күмеп киткән сөсикмәк ине, ти. Ҡуҙыйкүрпәс сөсикмәкте татып ҡарағас, барыр юлым бик оҙон икән шул әле, тип уйланы, ти. Бер аҙ барғас, ул икенсе бер урында ла шулай уҡ юлсылар туҡтаған урынды ҡараһа, көл эсенән тағы бер сөсикмәк тапты, ти. Бының яртыһы көйгән, яртыһы көймәгәйне, ти. Ҡуҙыйкүрпәс тағы ла алға китте, ти. Шундай уҡ өсөнсө урынға еткәс, юлсыларҙан тороп ҡалған көлдө ҡаҙып ҡараһа, һарғайып ҡына яңы бешкән сөсикмәк тапты, ти. Быны күргәс, Ҡуҙыйкүрпәс «инде бараһы юлым алыҫ ҡалмаған икән», тип шатланды, ти.

Күп тә үтмәне, алыҫта бер йылҡы көтөүе күренә башланы, ти. Уға яҡынлаша төшкәс, Күк толпар телгә килеп: «Минең өс бөртөк ҡылымды алып ҡал да үҙемде ебәр, мин кәрәк булғанда, ана шул өс ҡылымды өтөрһөң, мин һинең янына килеп етермен», — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙың өс бөртөк ҡылын алды ла үҙен бушатып ебәрҙе, ти. Шунан ул көтөү

эргәһенә барып, көтөүсе ҡарттан иҫәнлек-һаулыҡ һорашты, ти.

Көтөүсе ҡарт Ҡуҙыйкүрпәстән:

— Ни эшләп йөрөйһөң, ҡайҙа бараһың, балам? — тип һораны, ти.

— Эшкә ялланырға ине, бабай, һинең байың кем була, мине алмаҫмы икән? — тине, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

Көтөүсе ҡарт:

— Беҙҙең Күсәр хандан кеше артмаҫ, әйҙә, бөгөн бында ҡунып кит. Беҙ килгән кешегә бер баш йылҡы һуйып, ҡунаҡ итмәйенсә ебәрмәй торғанбыҙ, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс ҡунып, бер йылҡы ашап, иртә менән тағы ла юлға әҙерләнде, ти. Китер алдынан йылҡы көтөүсеһе уға:

— Улым, алдыңда бер-береһенән тар ғына һуҡмаҡ менән бүленеп ятҡан ике күл булыр. Ул күлдәрҙең ғәҙәте шулай: уҙғынсы тап уртаһына еткәс, ҡушылалар ҙа уны йоталар. Шуға күрә, һин ул күлдәр янына еткәс, береһенең һыуын икенсеһенә алып һал. Шунан ғына һин сығып китә алырһың, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс көтөүсе ҡарттан айырылып киткәс тә, өс бөртөк ҡылды өтөүгә, Күк толпар килеп баҫты, ти. Егет толпарына менеп көтөүсе ҡарт әйткән теге ҡуш күлгә еткәс, атынан төшөп бер күлдең һыуын икенсеһенә ҡойҙо, ти. Шунан күл телгә килеп: «Бик ҙур рәхмәт, егет. Ете йыл буйы бер-беребеҙгә ҡушыла алмай, зарығып ята инек, бик һәйбәт иттең әле. Үҙеңә лә шулай Маянһылыу менән ҡушылырға яҙһын», — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарына менде лә тар һуҡмаҡ менән ары китте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, бара-бара, бер һыйыр көтөүенә тап булды, ти. Күк толпарынан йәнә өс ҡыл алып, көтөүсе эргәһенә барҙы, ти.

Көтөүсе ҡарт унан:

— Йә, улым, ниҙәр бөтөрөп йөрөйһөң, ҡайҙа бараһың? — тип һораны, ти.

— Бабай, берәй эшкә ялланырға тигәйнем, һеҙҙең ханығыҙҙа эш табылмаҫмы икән? — тип әйтте, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

Көтөүсе ҡарт:

— Һай, беҙҙең Күсәр хандан кеше артмаҫ. Әйҙә, бында ҡунып кит, беҙ килгән кешеләргә бер һыйыр һуя торғанбыҙ. Ҡунаҡ булырһың, иртән китерһең, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс һыйыр көтөүсеһендә лә ҡунып, икенсе көндө генә юлға сыҡты, ти. Китер алдынан көтөүсе уға:

— Алда тағы ҡуй көтөүсеһе булыр, унда ла туҡтап кит, улым, — тип ҡалды, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс өс бөртөк ҡылын өтөп, тағы Күк толпарына менеп китте лә, ҡискә табан ҡуй көтөүсеһенә барып етте, ти. Ҡуҙыйкүрпәс көтөүсенән:

— Был кем ҡуйҙары, бабай?— тип һораны, ти.

Көтөүсе ҡарт:

— Был Күсәр хан ҡуйҙары, ә һин үҙең ҡайҙа бараһың, ни эшләп йөрөйһөң, улым? — тип һораны, ти.

— Берәй эшкә ялланырға ине, бабай, һеҙҙең ханығыҙға кеше кәрәкмәйме? — тине, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.

Ҡуй көтөүсеһе:

— Беҙҙең Күсәр хандан кеше артамы һуң! Әйҙә, бөгөн бында ҡунып кит, беҙ килгән кешегә бер ҡуй һуя торғанбыҙ, ҡунаҡ булырһың. Бынан Күсәр ханға алыҫ түгел, иртәгә иртә менән китерһең, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс көтөүсенең һүҙенә риза булып, ҡунырға ҡалды, ти. Былар икәүләп һөйләшеп ултырған арала, бер ҡуй көтөүҙән айырылып сыҡты ла ҡайҙалыр сабып китте, ти. Ҡуҙыйкүрпәс менән көтөүсе уның ҡайҙа китеүен белмәй ҙә ҡалдылар, ти.

Был ҡуй Күсәр хандың һаңдауына барып, баҡса аша Маянһылыу торған йорттоң тәҙрә алдына үтеп, телгә килде лә:

Һөйөнсө лә, Маян, һөйөнсө, Маян,
Итәгең-еңең төйөнсө, Маян:
Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр,

Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр!.. —

тип һамаҡлай башланы, ти. Маянһылыу: «Әй, ҡороғор, нимә юҡты һөйләп йөрөйһөң, кит бынан!» — тип, ҡуйҙы ҡыуып ебәрҙе, ти. Ҡуй тағы ла әйләнеп килеп, шул уҡ һамағын ҡабатланы, ти:

Һөйөнсө лә, Маян, һөйөнсө, Маян,
Итәгең-еңең төйөнсө, Маян:
Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр,
Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр!

Маянһылыу тағы ла: «Юҡты һөйләп йөрөмә!» — тип, ҡуйҙы ҡыуып ебәрҙе, ти. Ҡуй өсөнсө тапҡыр килеп, тағы ла ҡысҡырыбыраҡ һамаҡланы, ти:

Һөйөнсө лә, Маян, һөйөнсө, Маян,
Итәгең-еңең төйөнсө, Маян:
Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр,
Ҡуҙый ҙа Күрпәс килә лә ятыр!..

Маянһылыу бик асыуланып, йүгереп сыҡты ла: «Нимә юҡты һамаҡлап, яраға тоҙ һалып йөрөйһөң, бысаҡ ҡаҙалғыры!» — тип, бысағы менән һелтәнгәйне, бысаҡ ҡуйҙың осаһына тейеп, ярып ебәрҙе, ти.

Бына шунан ҡуйҙарҙың осаһы ярыҡ булып ҡалған икән, ти. Ҡуҙыйкүрпәс ҡуй көтөүсеһендә ҡунып, үҙенең Күк толпарын менеп, иртә менән тағы юлға сығып китте, ти. Көтөүсе уның артынан:

— Инде оҙаҡ бармаçһың. Алда Күсәр хандың саңдауы булыр, эшкә ялланғанда хан үҙе ҡарап ала торған, шуға күрә туранан-тура һин уның үҙенә бар, — тип ҡалды, ти.

Күсәр хан саңдауына килеп еткәндә, көн әле иртә ине, ти. Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарының өс бөртөк ҡылын алды ла үҙен бушатып ебәрҙе, ти.

Ҡуҙыйкүрпәсте Күсәр хандың Ҡарағол исемле Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ тип йөрөтөлгән бер яраны ҡаршы алды, ти.

— Йә, егет, беҙҙең ханда ни йомошоң бар? — тип һораны, ти, ул.
— Хан эшкә алмаҫмы икән, тип килгәйнем, — тине, ти, Ҡуҙыйкүрпәс.
Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡуҙыйкүрпәскә бер ҡарап алды ла:
— Беҙҙең хандан кеше артыуын артмаҫ та, әҙерәк көтөп тор, ул хәҙер өйлә намаҙын уҡырға ингән, — тип әйтте, ти.
Ҡуҙыйкүрпәс Күсәр ханды көтөп торған арала, Маянһылыуҙың ҡайҙа икәнен белергә теләп, тегеләй-былай ҡаранғылаһа ла, бер ҡайҙа бер нәмә лә белерлек түгел ине, ти.
Күсәр хан Ҡуҙыйкүрпәсте үҙ янына саҡыртып алып:
— Һин, егет, эшкә ялланмаҡсы икәнһең, ни һөнәрең бар? — тип һораны, ти.
Ҡуҙыйкүрпәс:
— Ниндәй эш булһа ла ярай, ханым, барыһын да эшләй алам, — тине, ти.
Шунан Күсәр хан:
— Миңә бер йылҡы көтөүсеһе кәрәген кәрәк тә, тик минең бер шартым бар: йылҡы өйөрөндә өс йыл тыу йөрөгән бейәмде тотоп, ауыҙлыҡ һалып менә алған кешене генә көтөүсе итеп яллайым мин, — тине, ти.
Ҡуҙыйкүрпәс был шартҡа риза булды, ти. Шунан былар йылҡы көтөүенә бармаҡсы булдылар, ти. Күсәр хан Ҡуҙыйкүрпәсте бер арыҡ ҡына дүнәнгә мендерҙе, ә үҙе иң яҡшы тигән атына атланып алды, ти. Бара торғас, быларҙың юлы ике яҡҡа айырылды, ти. Шул ерҙә хан Ҡуҙыйкүрпәскә боролоп:
— Бына был юлдың уңға киткәне түтә, һулға киткәне урау, һин ҡайһыһы менән китәһең? — тип һораны, ти.
Ҡуҙыйкүрпәс:
— Миңә икеһе лә барыбер. Әйҙә, урау булғаны менән китәйем, — тине, ти.
Күсәр хан түтә юлдан, Ҡуҙыйкүрпәс урау юлдан китте, ти. Бер аҙ барғас, Ҡуҙыйкүрпәс кеҫәһенән баяғы өс бөртөк ҡылды алып, өтөп ебәрҙе лә, Күк толпар

уның алдына килеп баҫты, ти. Шунан Ҡуҙыйкүрпәс үҙе менән килгән дүнәнде Күк толпарға арҡыры һалып алды ла һә тигәнсе хандың йылҡы көтөүенә барып та сыҡты, ти; етмәһә, юлда барғанда төрлө ҡоштар атып алды, ти. Йылҡы көтөүенә килеп еткәс, Күк толпарын ебәреп, арыҡ дүнән менән Күсәр хандың килеүен көтә башланы, ти.

Күсәр хан бик күп ваҡыт үткәс кенә килде, ти. Өҫбашының ҡарар ере лә юҡ — бысранып бөткәйне, ти. Ни өсөн тиһәң, ул, теге егет килгеләгәнсе ашап-эсеп, шунан йоҡо туйҙырып алайым тип, йән-фарман сабып, бысраҡта бата-сума килгән икән, Ҡуҙыйкүрпәс, уны ҡаршы алып:

— Әйҙә, ханым, бик оҙаҡланың. Һинең килеүеңә тип бешергән ҡош һурпаһы ла һыуына башланы, — тине, ти.

Күсәр хандың аптырауҙан күҙҙәре шарҙай булды, ти. Ут яҡҡан ергә барып ҡараһа, ҡаҙан тулы ҡош ите бешеп ултыра ине, ти.

Күсәр хан бер ҙә иҫе китмәгән кеше булып, ҡош итен ашап алды ла Ҡуҙыйкүрпәскә:

— Инде һин, ана, теге өс йыл тыу йөрөгән бейәне тотоп алып, ауыҙлыҡлап бында килтереп бәйлә, — тип, өйөр араһында ялын текә сәнсеп, уйнаҡлап йөрөгән бер бейәне күрһәтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс: «Ярар, ханым», — тип, ҡороҡ алды ла, теге тыу бейәне ҡамалай башланы, ти. Күп тә үтмәне, ул ҡороғон бейәнең муйынына кейҙереп тә өлгөрҙө, ти. Тыу бейә үрәпсей, дулай башлағас, Ҡуҙыйкүрпәс асыуланыбыраҡ ҡороғон тартҡайны, шул саҡ теге бейәнең муйыны өҙөлдө лә ҡуйҙы, ти.

— Ай, егет, харап иттең тыу бейәмде! — тип ҡысҡырҙы, ти, Күсәр хан. — Йә, ярай, хәйерле ҡаза булһын. Өйөрҙә алты йыл тыу йөрөгән бейәм бар, шуны тотоп килтер улайһа, — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс ҡороҡ һалыуға алты йыл тыу йөрөгән бейә лә бөтөнләй ярһынып-шашынып дулай башланы, ти. Ҡуҙыйкүрпәс ҡороғон асыуланыбыраҡ тартып ебәрһә, бының да муйыны өҙөлөп сыҡты, ти.

Күсәр хан Ҡуҙыйкүрпәстең шул тиклем көслө булыуына ғәжәпләнеп:

— Егет, бына тигән ике тыу бейәмдең муйынын өҙөп әрәм иттең, хәйерле ҡаза булһын инде. Ана, туғыҙ йыл тыу йөрөгән бейәм бар, ул да бер ҡасан да тотолмаған. Шуны тотоп мен, тик, зинһар, һаҡ бул, харап итә күрмә инде, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс туғыҙ йыл тыу йөрөгән бейәне һә тигәнсе тотоп алып, һыбайланып алды ла саба-саба манма тиргә төшөрҙө, ти. Унан Күсәр хандың алдына килтереп бәйләп ҡуйҙы, ти. Шунан һуң хан:

— Егет, мин һине көтөүсе итеп алырға ризамын, бына ошо яландағы йылҡыларымды көтөрһөң, — тип, ҙур яланды ҡаплап алған өйөр-өйөр йылҡыларҙы күрһәтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс яланда йылҡы көтөп ҡалды. Күсәр хан саңдауына ҡайтып китте, ти.

Өйөнә ҡайтҡас, хан яңы алған хеҙмәтсеһенең шул тиклем көслө бер егет булыуын ғәжәпләнеп һөйләне, ти. Атаһының һүҙен тыңлап торған Маянһылыу ҙа, иҫе китеп: «Ҡуҙыйкүрпәстән дә көслөрәк егеттәр бар микән ни?» — тип уйлап ҡуйҙы, ти.

Маянһылыу яңғыҙы бер өйҙә тора икән. Уның тәҙрәһе төбөндә төрлө-төрлө емеш ағастары үҫеп, төрлө-төрлө ҡоштар һайрап тора ине, ти. Маянһылыу һәр ваҡыт ана шул тәҙрә төбөндә, емеш ағастарына ҡарап, һайрашҡан ҡоштарҙың тауышын тыңлап, Ҡуҙыйкүрпәсте уйлап ултырыр булған, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, Күсәр ханда эшләй башлауына хәтһеҙ ваҡыт үтеп китһә лә, гел генә ҡырҙа, йылҡы араһында булғанлыҡтан, Маянһылыуҙы һаман күрә алмай ине әле, ти.

Бына көҙ ҙә етеп, ҡар ҡатыш ямғырҙар яуа башланы, ти. Күсәр хан бөтә малдарын саңдауға алып ҡайтырға ҡушты, ти. Ҡуҙыйкүрпәс тә үҙе көткән йылҡы көтөүен саңдауға алып ҡайтып, кәртәгә япты, ти. Күшектергес елле-ямғырлы көндәр башланып киткәнлектән, йәш ҡолондарға бауырлыҡ бәйләргә булдылар, ти. Бындай көндәрҙә, малдарҙы ҡарарға көтөүселәр генә етешә

алмағанлыҡтан, ярҙамға Маянһылыу ҙа сыға торғайны, ти. Шундай елле-ямғырлы бер көндө Маянһылыу, ашығып-ашығып, ҡолондарға бауырлыҡ бәйләп йөрөй, ә уның артынан бәйләгән бауырлыҡтарҙы кемдер ҡырҡып бара ине, ти. Маянһылыу был хәлдең тиккә булмауын һиҙенеп: «Кем шулай шаяра икән? — тип абайлабыраҡ ҡараһа — уның алдында Ҡуҙыйкүрпәс баҫып тора ине, ти. Ҡапыл йылҡылар ҙа, ҡолондар ҙа онотолдо, ҡарлы-боҙло ямғыр ҙа туҡтағандай булып китте, ти. Егет менән ҡыҙ, бер-береһенә ҡарашып, баҫҡан урындарында ҡаттылар ҙа ҡалдылар, ти. Береһе: «Маянһылыу!..», икенсеһе «Ҡуҙыйкүрпәс!..» — тигән һүҙҙән башҡа бер һүҙ ҙә әйтешә алмай торҙолар, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу, ана шулай, әйтер һүҙҙәрен әйтә алмай, күпмелер ваҡыт бер-береһенә ҡарашып торғас, ышығыраҡ бер ергә һыйынып, бөтә донъяларын онотоп, пар күгәрсендәй гөрләшеп, бик оҙаҡ ултырҙылар, ти.

Бер-береһен йән күреп яратышҡан был икәүҙең нимә һөйләшкәнен Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡарағолдоң һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр бисәһе тыңлап торҙо, ти. Шунан ул Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың ихлас күңелдән һөйләшкән һүҙҙәрен боҙоп, үҙенән ҡушып, иренә барып әйтте, ти, ә Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ ҡатыны һөйләгәнде тағы ла шаштырып, Күсәр ханға алып барып еткерҙе, ти.

— Ҡыҙың ҡыҙ түгел инде хәҙер! Өҫтәүенә, үҙе теге көтөүсең менән ҡасып уҡ китергә йыйына, — тип әйтте, ти, ул ханға.

Күсәр хан, был хәбәргә ни тип әйтергә лә белмәй, елкәһен тырнап ултыра ине, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ ханға ҡарап:

— Хуп күрһәң, мин бер хәйлә уйлап таптым, — тине, ти.

— Йә, ниндәй хәйлә ул? — тип һораны, ти, хан.

— Ханым, төптәнерәк уйлап ҡараһаң, Ҡуҙыйкүрпәсте үлтермәй тороп, унан ҡотолоп булмаҫына үҙең дә ышанырһың, — тип һүҙ башланы, ти, ул. — Әммә быны хәйләһеҙ-ниһеҙ генә булдырып булмай. Ни өсөн

тиһәң, уны көс менән еңеү мөмкин түгел, ул бөтәбеҙҙән дә көслө. Шул көсөнә таянып, ул Маянһылыуҙы ғына түгел, бөтә байлығыңды талап, барлыҡ аяҡлы малыңды ҡыуып алып китеүе бар. Ҡыҙыңды йәштән үк унан айырып алып, күсеп киткәнең өсөн һинән үс алмай ҡалмаç ул. Әйе, көт тә тор, шулай итәсәк ул...

— Шулай булғас, ни эшләргә кәрәк һуң? — тип, Күсәр хан Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙың һүҙен бүлдерҙе, ти.

— Бының өсөн ялған туй уҙҙырырға кәрәк, — тип әйтте, ти, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ. — Маянһылыуҙы Ҡуҙыйкүрпәскә бирәм тип, ҙур табын ҡороп, туй яһаған булырға ла Ҡуҙыйкүрпәсте бал эсереп иçертергә. Шунан уны бейергә төшөрәһең. Бейегәндә, иçереүе еткәнлектән, башы әйләнеп, сайҡала башлар. Шунан инде уны, әҙерәк айныһын тигән булып, ситкәрәк алып китәһең дә башына һуғып үлтерәһең. Ҡуҙыйкүрпәстән ҡотолоу өсөн башҡа сара юҡ, ханым.

Күсәр хан был турала көҙ буйы уйланы, ҡыш буйы уйланы ла, ахыр килеп, яҙ көнө Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ әйткәнгә риза булды, ти. Бер заман ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу туйына, тип, бик күп кеше саҡыртты, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу был туйҙың ысын туй булмаçын һиҙенеп торҙолар, ти. Шуның өсөн улар туйҙың иң ҡыҙыу мәлендә генә, Күк толпарға атланып, ҡасып китергә һүҙ ҡуйыштылар, ти. Күк толпар беҙгә кәрәкле бер-бер хәйлә әйтмәçме, тип, Ҡуҙыйкүрпәс кеçәһендәге өс ҡылды өтөп, Күк толпарҙы килтерҙе, ти. Шунда Күк толпар телгә килеп: «Егетем, һине туйҙа иçертеп аяҡтан йығырға ла тышҡа алып сығып үлтерергә итәләр. Һин иçермәçкә тейешһең. Бының өсөн минең үҙеңдәге өс ҡылымдың береһен балдаҡ кеүек итеп, бармағыңа урап ал да балды эсер алдынан ғына, шул бармағың менән бер ҡат болғат. Мине саҡырғанда инде ул ҡылды тегеләр менән бергә ҡушырһың», — тип, әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс тап Күк толпар әйткәнсә эшләргә булды, ти.

Туй башланды, ти, бер заман. Аттар саптырылды, көрәшселәр көрәште, йүгеректәр йүгереште, ти. Табынға ултырып бал да эсә башланылар, ти. Ҡуҙыйкүрпәскә балды һалып биреп торалар, ул, ҡыл балдаҡлы бармағы менән бер генә болғап ала ла, эсеп бөтөрөп тора, ти. Иҫереп йығылыу Ҡуҙыйкүрпәстең иҫенә лә инеп сыҡмай, ти. Быны күреп, Күсәр хан менән Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ ҡайғыға ҡалдылар, ти.

Аптырағас-йөҙәгәс:

— Кейәүҙең бер бейеп алыуын һорайыҡ әле! — тип ҡысҡырҙы, ти, таҙ.

Ҡуҙыйкүрпәс бер ҙә ҡарышып тормай, бейергә төшөп китте, ти. Ул туҡтар-туҡтамаҫтан Маянһылыу бейей башланы, ти. Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарҙың ҡылдарын өтөп ебәргәйне, толпар майҙан уртаһына килеп тә баҫты, ти. Шунда уҡ ҡыҙ менән егет Күк толпарға менеп алдылар ҙа сабып китеп тә барҙылар, ти.

Ләкин Күк толпарҙың сабыуы, әллә нишләп, ғәҙәттәгенән күпкә ҡайтыш ине, һыртына ултырып барыуы ла ғәжәпкә ҡаршы, бик уңайһыҙ ине, ти. Шуға күрә арттан баҫтырып килгән Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Күк толпарҙы шунда уҡ ҡыуып етеп, ҡылыс менән һелтәгәйне, ҡылыс Күк толпарҙың сандыр итен телеп ебәрҙе, Күк толпар абынып-һөрлөгөп китте лә, Маянһылыу осоп төшөп ҡалды, ти. Шунан Күк толпар, ҡапыл бер яҡҡа тайпылып, күҙҙән юғалды, ти.

Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡарағол, Маянһылыуҙы үҙенең атына алып, Күсәр хандың саңдауына ҡайтып китте, ти. Был ваҡытта инде Күк толпар ҡыуғынсыларҙан күҙ яҙҙырып, бер ҙур күл янына килеп сыҡҡайны, ти. Ҡуҙыйкүрпәс толпарынан төштө лә: «Был ни хәл?» — тип, атының күҙҙәренә ҡараны, ә Күк толпар телгә килеп: «Ниңә миңә ҡарайһың? Бармағыңа ҡара!» — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс бармағына ҡараһа, ҡылт итеп иҫенә төштө, ти: ул туй ваҡытында ҡабаланып, ҡылдың ике бөртөгөн генә өткән, ә өсөнсөһө бармағына ураған көйө онотолоп тороп ҡалған икән. Бына шуның

быҒаса абыныу белмәгән Күк толпар һөрләгөп китеп, Маянһылыу осоп төшөп ҡалған икән.

Ҡуҙыйкүрпәс был хәлгә бик-бик ҡайғырҙы, бармағын ҡырҡып ташларҙай булып үкенде, ти. Ләкин эш уҙғайны инде, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс шулай ҡайғыға батып ултырғанда, Күк толпар телгә килеп, уның ҡайғыһын тағы ла арттырып ебәрҙе, ти. «Минең ярам өс көнһөҙ уңалырлыҡ түгел. Мине өс көнгә ошо күл эсенә индереп ҡуй», — тип әйтте, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс Күк толпарын күл эсенә индереп ҡуйҙы ла үҙе күл буйындағы суҡ тирәк төбөнә килеп ултырҙы, ти. Бер саҡ тирәк башына бер ҡарға килеп ҡунды, ти. Ҡуҙыйкүрпәс шул ҡарғаға:

— Ҡарға, минең яныма төш әле, һиңә бер йомошом бар ине, — тип әйтте, ти.

Ҡарға:

— Ҡар-рҡ, ҡар-рҡ, һин ҡатһаң, бер ҡа-лаҡ ҡа-ның миңә! — тип осто ла китте, ти.

Ҡарға киткәс, уның урынына бер һайысҡан килеп ултырҙы, ти. Ҡуҙыйкүрпәс шул һайысҡанға:

— Һайысҡан, минең янға төш әле, һиңә бер йомошом бар ине, —тип әйтте, ти.

Һайысҡан:

— Шыҡыр-шыҡыр, һин шыҡрайһаң, бер ҡалаҡ ҡаның миңә, — тип осто ла китте, ти.

Шунан тирәк башына суҡ турғай килеп ҡунды, ти. Ҡуҙыйкүрпәс уға:

— Суҡ турғай, минең яныма төш әле, һиңә бер йомошом бар ине, — тип әйтте, ти.

Суҡ турғай шунда уҡ пырылдап осоп төштө лә:

— Йомошоңдо тыңлайым, — тине, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс, бер япраҡҡа яҙыу яҙып, суҡ турғайҙың аяғына бәйләне лә:

— Бына ошо япраҡты Маянһылыуға илтеп бирсе, — тине, ти. Суҡ турғай пырылдап осоп та китте, ти.

Маянһылыу, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡайҙалығын белмәй, асыҡ тәҙрә алдында моңайып ултыра ине, ти. Шул ваҡыт баяғы суҡ турғай яҡындағы бер ағасҡа килеп

ҡунды ла сут-сут итеп һайрай башланы, ти. Маянһылыу, ниңә был тиклем өҙөлөп-өҙөлөп сырҡылдай икән был турғай, тип, абайлабыраҡ ҡараһа, уның аяғына бәйләнгән хатты күрҙе, ти. Суҡ турғай, һайрап бөткәс, өйгә инеп, Маянһылыуҙың иңбашына уҡ килеп ҡунды, ти. Маянһылыу хатты алып уҡып, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡайҙа, ни хәлдә ятҡанын белде, ти. Шунан ул үҙе лә хат яҙып, суҡ турғайҙың аяғына бәйләне лә, үҙәге өҙөлгәндә ҡабыр тип, биш-алты бөртөк булһа ла бауырһаҡ тағып ебәрҙе, ти.

Суҡ турғай ике арала йомошсо булып, көнөнә өс-дүрт тапҡыр килеп-китеп йөрөнө, ти.

Ҡуҙыйкүрпәстән айырылып тороп ҡалыуға өсөнсө көн тигәндә, иртә менән, Маянһылыуҙың янына Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙың бисәһе инеп, уның башын ҡараған булып ултыра ине, ти. Маянһылыу уның итәгендә йоҡлап китте, ти. Шул саҡ тәҙрәнән теге суҡ турғай килеп инеп, Маянһылыуҙың иңбашына ҡунды, ти. Таҙҙың һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр бисәһе, был ҡош, моғайын, Ҡуҙыйкүрпәстәндер әле, тип уйланы ла суҡ турғайҙы тотоп алып: «Ҡуҙыйкүрпәс ҡайҙа? Әйт йәнеңде алмаҫ борон!» — тип, турғайҙың йөнөн йолҡа башланы, ти. Эй йолҡа, эй йолҡа, ти, ҡәһәр һуҡҡыры бисә, ә турғай шымған да, тауыштын да сығармай, ти. Йолҡҡолай торғас, турғайҙың башында бары бер генә суҡ йөн тороп ҡалды, ти. Һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр теге бисә шул суҡ йөндө йолҡоп алғайны, бахыр турғай: «Суҡ, суҡ...» — тип ике тапҡыр ғына ҡысҡырҙы ла йән бирҙе, ти, мәхлүгең.

Маянһылыу ҡоштоң суҡ-суҡ тигән тауышына уянып китте лә:

— Харап ҡына иттең ҡошто! — тип ҡысҡырып ебәрҙе, ти. Шул ерҙә Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙың һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр бисәһе, тышҡа йүгереп сығып, бөтә саңдауға:

— Ҡуҙыйкүрпәс Суҡ буйында ята икән, шунда барығыҙ! — тип оран һалды, ти.

Күсәр хандың иң ышаныслы кешеләре, был хәбәрҙе ишеткәс тә, шунда уҡ ат менеп, Суҡ күле буйына киттеләр, ти.

Ҡуҙыйкүрпәстең янына, беренсе булып, Маянһылыуҙың ике ағаһы килеп етте, ти. Беренсе ағаһы ҡылысы менән Ҡуҙыйкүрпәскә сабайым, тип һелтәнгәйне, Ҡуҙыйкүрпәс айырата бер таһыллыҡ менән уның ҡылысын ҡулынан ҡайырып алды ла урталай һындырып ташланы, ти. Шунан уға, минән бүләк булһын тип, атаһынан ҡалған ҡырма бүркен бирҙе, ти. Маянһылыуҙың икенсе ағаһы, Ҡуҙыйкүрпәс менән алышыуҙың файҙаһыҙ булырын һиҙенеп, ҡылысын уға үҙе үк килтереп тотторҙо, ти. Ҡуҙыйкүрпәс Маянһылыуҙың был ағаһына, минән бүләк булһын тип, атаһынан ҡалған айбалтаһын бирҙе, ти, Маянһылыуға минән иҫтәлек итеп бир тип, көмөш көҙгөһөн тотторҙо, ти.

«Был бик ирмәк кеше икән дә баһа» тип, Маянһылыуҙың ағалары аттарына менеп, ҡайтып киттеләр, ти.

Көн ауышыуға өс тәүлек тулып, күл эсендә һауыҡтырылырға ҡуйылған Күк толпарҙың яраһы уңалырға тейеш ине, ти. Ҡуҙыйкүрпәс шуны көтөп, атаһынан ҡалған ҡама тунын кейҙе лә, билен көмөш ҡәмәре менән быуҙы ла, әҙерәк серем итеп алайым әле, тип, тирәк төбөнә ятты, ти. Ул шунда йоҡлап китте, ти. Ни өсөн тиһәң, төнөн Маянһылыу хаҡында уйланып үткәргәнлектән, ул таң һарғайғанға тиклем керпек тә ҡаҡмағайны, ти.

Маянһылыуҙың икенсе ағаһы уға Ҡуҙыйкүрпәс иҫтәлек итеп биргән баяғы көмөш көҙгөнө килтереп тапшырҙы, ти. Маянһылыу быға бик шатланып, ағаһына ҙур рәхмәттәр әйтеп, көҙгөнө ҡулына алып ҡарағайны: «Аһ, һәләк иткән Ҡуҙыйкүрпәскәйемде», — тип бөтөнләй иҫһеҙ булып йығылды, ти. Ни өсөн тиһәң, көҙгөлә бөтәһе лә асыҡ күренеп тора ине, ти: Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ Ҡарағол боҫоп ҡына суҡ тирәк янына барған да, шунда моңайып ултырған Ҡуҙыйкүрпәсте бысаҡ менән сәнсеп үлтергән, ә хәҙер

ул Ҡуҙыйкүрпәстең ҡәмәрен сисеп, ҡама тунын һалдырып тора ине, ти. Суҡ тирәк яны тып-тын, бер кем дә юҡ, тик тирәк башында бер ҡарға менән бер һайыҫҡан ғына Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙың тиҙерәк китеүен көтөп ултыра ине, ти...

Маянһылыу, иҫенә килеп, был фажиғәле хәлде атаһына йүгереп барып әйтте лә, уның яуабын да көтмәй, ат менеп, Ҡуҙыйкүрпәс үлеп ятҡан ергә сабып сығып китте, ти. Уның артынан уҡ, ике улын эйәртеп, Күсәр хан үҙе лә йүнәлде, ти.

Маянһылыу килеп еткәндә, Ҡуҙыйкүрпәс, тап көҙгөлә күренгәнсә, суҡ тирәк төбөндә үлеп ята ине, ти. Уның янында суҡ тирәкле күлдән яңы ғына һауығып сыҡҡан Күк толпары башын һалындырып, ике күҙенән мөлдөрәтеп йәш ҡойоп, шым ғына тора ине, ти. Ҡулына Ҡуҙыйкүрпәстең ҡама туны менән көмөш ҡәмәрен тотҡан Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ атына атланып китә алмай аҙаплана ине, ти, атҡа атланырға ғына тигәндә, Күк толпар уның аяғын тешләп, тартып төшөрөп тора икән, ти.

Маянһылыу, Ҡуҙыйкүрпәстең күкрәгенә ятып илаңы ла иланы, ти, илай-илай күҙҙәре шешенеп бөттө, ти. Ә Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ эстән генә: «Үҙ теләгемә ирештем, хәҙер инде минән китеп, әллә ҡайҙа бара алмаҫһың, һайыҫҡандан һаҡ, төлкөнән хәйләкәр ҡарт ҡатыным өҫтөнән үҙеңде йәш бисә итеп алырға күп ҡалманы инде», — тип уйланы, ти.

Ҡыҙы артынан сабып килеп еткән Күсәр хан, Маянһылыуҙы йыуатырға тырышып:

— Үҙеңде үҙең бөтөрөп, ул тиклем ҡайғырма инде, ҡыҙым! Булған эш булған инде, Ҡуҙыйкүрпәстән дә артыҡ егеттәр табылыр...

Илдән илгә йөрөйөм, балам,
Ил ғәриптәре булайым, балам,
Ҡуҙыйкүрпәс кеүек егетте табайым, балам,
Табып алып ҡайтайым, балам, —

тине, ти.

Маянһылыу атаһына һамаҡлап, ошолай тип әйтте, ти:

Илдән илгә йөрөһәң дә, атай,
Ил ғәриптәре булһаң да, атай,
Ҡуҙыйкүрпәс кеүек аҫыл егетте
Таба алмаҫһың, атай, табып ҡайтһаң да —
Ҡуҙыйкүрпәс була алмаҫ, атай.

Суҡ буйында үҫкән суҡ тирәктең
Япраҡтары, атай, киң булмаҫ.
Кемде генә эҙләп тапһаң да һин,
Ҡуҙыйкүрпәсемә, атай, тиң булмаҫ.

Шунан Маянһылыу Ҡутыр башлы ҡолтор таҙға ҡарап:

— Бигерәк тамағым кипте, күлдән әҙ генә һыу алып бирер инең, — тип әйтте, ти.

«Әһә, үҙе үк башлап өндәште, эш яйланырға тора былай булғас», — тип уйланы, ти, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ. Шунан уның, Маянһылыуға ярамһаҡланып, күл ситенә барып, һыу алырға эйелеүе булды — Маянһылыуҙың: «Ҡуҙыйкүрпәстең ҡоно бына шул булыр!» — тип, арҡаһына бысаҡ менән үлтерә сәнсеүе булды, ти.

Маянһылыу суҡ тирәк янына кире барып, түшенән Ҡуҙыйкүрпәскә тип әҙерләнгән сигеүле аҡ ҡулъяулығын алып, шуға Ҡуҙыйкүрпәс ҡаны менән Ҡуҙыйкүрпәс тип, үҙ ҡаны менән Маянһылыу тип яҙҙы ла яулыҡты Ҡуҙыйкүрпәстең ҡама туны кеҫәһенә тыҡты, ти. Шунан ҡама тун менән көмөш ҡәмәрҙе Күк толпарҙың эйәренә бәйләне, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡылысын да шунда тағып ҡуйҙы, ти. Бөтәһе лә әҙер булғас, Маянһылыу Ҡуҙыйкүрпәс кеҫәһендәге өс ҡылды Күк толпарҙың ялына ҡушып, башынан һөйөп һыйпағайны, Күк толпар шунда уҡ күҙҙән юғалды — Урал тауы буйына, Ҡуҙыйкүрпәстең әсәһе йортона ҡайтып китте, ти.

Күсәр хан, уның ике улы, йыйылған халыҡ әле Күк толпарға, әле суҡ тирәк төбөндә ятҡан Ҡуҙыйкүр-

пәскә, әле күл ситендәге Ҡутыр башлы ҡолтор таҙға ҡарап, ни эшләргә белмәй, ҡатып торған арала, Маянһылыу суҡ тирәк төбөнә килде лә, үҙ йөрәгенә үҙе бысаҡ менән сәнсеп, Ҡуҙыйкүрпәс күкрәгенә йығылды, ти.

Берен-бере өҙөлөп һөйөп тә бергә йәшәргә насип булмаған Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙың ғүмере ана шулай бөттө, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыуҙы шул ҙур күл буйындағы суҡ тирәк төбөнә, икеһен бер ҡәбергә, ерләнеләр, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙҙы күлдең теге яҡ ситенә сығарып күмделәр, ти.

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡәбере өҫтөнә ике алма ағасы, Ҡутыр башлы ҡолтор таҙ ҡәбере өҫтөнә дегәнәк үҫеп сыҡты, ти. Был дегәнәк күл аша сығып, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҡәбере өҫтөнә үҫкән алма ағасына килеп сырмалды, ти. Елле көндәрҙә, алма ағасы һелкенгәндә, дегәнәк алмаларҙы өйкәй-өйкәй, уларҙың ҡанлы һуттарын ағыҙып тора башланы, ти. Ана шул алмаларҙан тамған ҡанлы һуттан ике ҡош яралып, алма ағасы башына ике оя яһанылар, ти. Алма ағасын сырмаған дегәнәктән ике ҡарға сығып, теге ике ҡоштоң ояларын туҙҙыра башланылар, ти. Шул ваҡыт ике алма-ҡош, асыуҙары килеп, был ике дегәнәк-ҡарғаны суҡып үлтерҙеләр ҙә ҡаңғылдашып осоп киттеләр, ти.

Хәҙерге аҡҡоштар ана шул алма-ҡоштан ҡалған икән, ти.

## МАҠТЫМҺЫЛЫУ*

Әүәлге ваҡытта Һарыбай исемле бер хан йәшәгән. Уның бер улы, йәнә Маҡтымһылыу исемле бер ҡыҙы булған. Маҡтымһылыуҙың йөҙө шундай нурлы икән — уның яҡтылығы өс саҡрымдан күренеп торған. Ул ана

---

* Салауат Галин Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Сабаҡлы ауылында йәшәүсе Һибәтулла Даяновтан (85 йәштә) 1962 йылда яҙып алған. Башҡорт халыҡ ижады. IV том. Эпос. Өфө, 1999.

шул үҙенең нуры менән нағыш теккән. Үҙе айға-көнгә күренмәгән.

Һарыбай йыл да үҙенең улы менән ҡыҙын, туғыҙ тирмә биреп, туғыҙ өйөр мал эйәртеп, бер күлдең утрауына йәйләүгә оҙата икән.

Был турала Таймаҫ тигән хан ишетеп ҡала. Ул күптән үк Маҡтымһылыуҙы үҙенә алмаҡ булып йөрөй икән. Тик яй-әмәлен тапмаған. Инде килеп тегеләрҙең йәйләүен яу менән баҫмаҡ була. Маҡтымһылыуҙы көс менән алмаҡ була.

Ошо мәлдә Маҡтымһылыу төш күрә. Ул төшөн ағаһына һамаҡлай:

Бөгөн төндә бер төш күрҙем, ағай,
Уң сәсемде мин иштем, ағай,
Һул сәсемде ишә алманым, ағай,
Һөҙөлөп яуға мин төштөм, ағай,
Мин төштөм, —

ти. Быны ишеткәс, ағаһы уҡ юна ла йөнләй[1], уҡ юна ла йөнләй.

Күпмелер ваҡыт үткәс, Таймаҫ хан яу менән килеп төшә. Был мәлде Маҡтымһылыу сәс ишеп ултырған була. Ул һул сәсен ишеп өлгөрмәй ҡала. Таймаҫ хан уны тирмәһенең аҡ кейеҙенә урап алып китә.

Шул саҡ ағаһы ҡола айғырына атланып быларҙы ҡыуа сыға. Ҡыуып етеп, баҫҡынсыларҙың бер талайын уғы менән, бер талайын ҡылысы менән айҡап, Маҡтымһылыуҙы баҫып ала ла ҡултыҡлап кирегә саба. Баҫҡынсыларҙың ҡалғаны былар артынан төшә.

Шулай сабып килгәндә, Маҡтымһылыуҙың үрелмәй ҡалған һул яҡ сәсе ҡарағайға урала. Ярһыған ҡола айғырҙы туҡтатып булмауын белеп, ағаһы Маҡтымһылыуҙы ҡулынан ысҡындыра. Ҡыҙ йәнә баҫҡынсылар ҡулына төшә. Ағаһы ла бирешмәй, ҡайтанан былар өҫтөнә ташлана. Яу бик ҡаты була. Маҡтымһылыу өс мәртәбә ҡулдан ҡулға күсә. Ниндәй генә ғәйрәтле

[1] Уҡ башына ҡауырһын ҡуя.

булмаһын, Мәктымһылыуҙың ағаһы ла хәлдән тая, Таймаҫ хан ҡыҙҙы үҙе менән алып китә.

Ошонан һуң байтаҡ йылдар үтә. Мәктымһылыуҙың Таймаҫ хан ҡулында булыуы тураһында хәбәр бының атаһына ла килеп етә.

Һарыбай хан нисек ҡыҙын ҡотҡарырға тип, уйға ҡала. Туғыҙ батман бал ҡойоп, туғыҙ тыу бейә һуйып, мәжлес үткәрергә була. Ат еткән ергә ат ебәреп, хат еткән ергә хат ебәреп, халыҡты йыя. Мәжлескә хан балаларын да, бей балаларын да, бай балаларын да, ярлы балаларын да саҡырта.

— Ҡыҙымды яу менән алып ҡайтыусы булырмы, хәйлә менән алып ҡайтыусы булырмы? — тип, туғыҙ тыу бейә башын, ике тәгәс бал алып, хан балаларына килә. Тегеләре вәғәҙә бирмәй. Һарыбай артабан бей балаларына бара. Былары ла, баштарын баҫып, өнһөҙ ҡала. Бай балалары менән дә шул уҡ хәл ҡабатлана.

Инде нишләһен, бер ҙә генә өмөтө булмаһа ла, ул ярлы балаларына һуғыла. Баяғы һорауын бирә. Ситтә генә ултырған таҙ егет тороп баҫа.

— Мин ҡыҙыңды алып киләм. Яу менән түгел, хәйлә менән, — ти. Бай биргән туғыҙ тыу бейәнең башын ашап[1], ике тәгәс бал эсә лә:

— Ханым, ҡулыңдағы атама балдағыңды бир, кәрәк булыуы бар, — ти. Балдаҡты ала ла хушлашып сығып китә.

Бара, бара был, ике көн үтә, өсөнсө көн етә. Бара торғас, Таймаҫ хан иленә килеп сыға. Бер ҡамышлы күл буйына килеп, ял итергә ултыра. Аңғанса булмай, төш ваҡыттары етеүгә, бер ҡыҙ баланың ике ҡомған тотоп, йүгереп китеп барыуын күреп ҡала. Егет уны туҡтата, ҡайҙа барыуын һорай. Ҡыҙ:

— Мына һыу апҡайтам еңгәйемде йыуындырырға. Ул айға-көнгә күренмәй, — ти.

Шунан таҙ егет теге алтын балдаҡты ҡомғанға төшөрә лә:

— Һин уны йыуындырғанда һыуҙы йәһәт-йәһәт һал. Атыу еңгәйең: «Йәлләр һыуыңды ниңә килтер-

---

[1] Башын ашап — туйып.

ҙең», — тип әйтер. Һин йәһәт ҡойғанда балдаҡ уның усына төшөр. Балдаҡты күреп, уның күҙенән йәше атылып сығыр. Кемдеке икәнен таныр. Шул ваҡытта әйт: «Күл буйында бер әҙәм йөрөп ятыр, һине фәлән ваҡытта көтә», — тиң.

Ҡыҙ бала егеттең әйткәнен еңгәһенә еткерә. Маҡтымһылыу тун бөркәнеп, һөйләшелгән мәлгә килеп етә. Һөйләшеп танышҡас, егет:

— Мин һине хәйлә менән алып ҡайтырға килдем, — ти.

— Ҡалай алдатырбыҙ һуң? — тип һорай Маҡтымһылыу.

— Таймаҫ хан ҡолан да болан атырға сығамы һуң? — тип һорай таҙ.

— Сыға, — тип яуаплай Маҡтымһылыу.

— Ул ҡайтҡанда һин ҡаршы сығаһыңмы?

— Сығам.

— Эйәренән төшөрөшәһеңме?

— Төшөрөшәм.

— Һин был юлы уға ҡаршы сыҡма, эйәренән төшөрөшмә. Йоҡлағанда ла, арҡаң менән боролоп ят. Шул ваҡыт ул һинән: «Һиңә ниндәй хәсрәт төштө, ниндәй ҡайғыға тарының?» — тип һорар. Ә һин уға әйт: «Атайымдың мәжлестәре иҫемә төшөп китте. Ул туғыҙ тыу бейә һуя торғайны, туғыҙ батман бал ҡоя ине. Ат еткән ергә ат, хат еткән ергә хат ебәреп, хан балаларын, бей балаларын, бай балаларын, ярлы балаларын йыя торғайны. Туғыҙ көнлөк юлға сығып, туғыҙ мәжлес ҡорор ине», — тиген. Шунан һуң Таймаҫ хан: «Ә-ә, ул минең дә хәлдән килә», — тип әйтер ҙә иртәгеһен туғыҙ тыу бейә һуйыр, туғыҙ батман бал ҡойор ҙа туғыҙ көнлөк юлға сығыр мәжлес ҡорорға. Шул мәлде беҙ ҙә тайырбыҙ, — тине егет.

Егеттең әйткәне дөрөҫкә сыға. Таймаҫ хан туғыҙ тыу бейә һуя, туғыҙ батман бал ҡойҙортоп ала ла туғыҙ көнлөк юлға юллана.

Ул киткәс, Маҡтымһылыу ике балаһы Аҡай менән Күкәйҙе билбауҙан ергә күмеп ултырта, алдарына ярыҡ ҡалаҡ, ярыҡ табаҡ ҡуйып, ҡалдыҡ-боҫтоҡ аш һала. Унан һуң, йылҡы өйөрөнә барып, айғырҙы сән-

сеп йыға, дөйә көтөүенә бара — атанын сәнсеп йыға, ҡуй көтөүенә бара — ҡусҡарҙы сәнсеп йыға, һыйыр көтөүенә бара — үгеҙҙе сәнсеп йыға ла таҙ егет менән ҡасып китә.

Инде Таймаҫ ханға киләйек. Ике-өс көн үткәс, Таймаҫ хан, йорт хәлдәрен белеп кил, малдарҙы теүәлләп кил, тип бер хеҙмәтсеһен ҡайтарып ебәрә. Тегеһе килһә, күрә:

Йылҡыға килһә, айғыр юҡ,
Дөйәгә килһә, атан юҡ,
Ҡуйға барһа, ҡусҡар юҡ,
Һыйырға барһа, үгеҙ юҡ, ти.

Таймаҫ хан янына әйләнеп килә лә һамаҡлап әйтә:

Йылҡыға барҙым — айғыр юҡ, Таймаҫ, айғыр юҡ, Таймаҫ.

Дөйәгә барҙым — атан юҡ, Таймаҫ, атан юҡ, Таймаҫ.

Ҡуйға барҙым — ҡусҡар юҡ, Таймаҫ, ҡусҡар юҡ, Таймаҫ.

Һыйырға барҙым — үгеҙ юҡ, Таймаҫ, үгеҙ юҡ, Таймаҫ.

Аҡай менән Күкәй билбауҙан
Күмекте, Таймаҫ, күмекте, Таймаҫ.
Маҡтым бер һылыу ҡасыпты, Таймаҫ,
Ҡасыпты, Таймаҫ!

Шулай тип әйткәйне, хан уның үңәсен дә өҙә сапты, ти.

Таймаҫ хан тағы бер ялсыһын ҡайтарып ебәрҙе, ти. Ул да:

Йылҡыға килһә, айғыр юҡ,
Дөйәгә килһә, атан юҡ,
Ҡуйға барһа, ҡусҡар юҡ,
Һыйырға барһа, үгеҙ юҡ,
Аҡай менән Күкәй билдән күмекте,
Маҡтым бер һылыу ҡасыпты, —

ти.

Хан янына килеп шуны һамаҡлағайны, тегеһе сабам тип ҡылысын күтәрҙе, ти. Әммә мәжлестәге халыҡ: «Барған бер кешене шулайтаһыңмы ни?» — тип уның ҡулын тотоп алдылар, ти.

Атын менеп, Таймаҫ хан йортона табан инде үҙе саба. Иленә ҡайтһа, бары ла тегеләр һөйләгәнсә, ти:

Атына барһа, айғыр юҡ,
Дөйәгә барһа, атан юҡ,
Ҡуйға барһа, ҡусҡар юҡ,
Һыйырға барһа, үгеҙ юҡ,
Өйгә ҡайтһа, Аҡай менән Күкәй күмекте,
Маҡтым бер һылыу ҡасыпты.

Таймаҫ хан Маҡтымһылыуҙың эҙенә төшә лә ҡыуып китә. Алып йөрөп ҡыуа, алып йөрөп ҡыуа, бер көн үтә, ике көн үтә. Тағы бер аҙ барғас, бер яҡтылыҡ күрә. Уны күргәс, тағы ла шәберәк ҡыуа. Бара торғас, Тәкәлек тигән йылғаға етә. Ҡараһа, Маҡтымһылыу йылғаның теге ярында йыуынып ултыра. Таймаҫ хан сабып барып йылғаға төшә, тик уны аша сығалмай кире әйләнә. Маҡтымһылыуға шул ерҙә былай тип һамаҡлай:

(Ы)ласын да ҡоштоң балаһы,
Имәндә була ояһы,
Ел өргән һайын
Боролор ҙа булыр уның инәһе.

(Ы)ласын да ҡоштоң балаһы,
Имәндә була ояһы,
Ел өргән һайын
Боролор ҙа булыр уның атаһы.

Шунан хушлаша ла алдына ҡояш, артына томан төшөрөп, ғәйеп тә була. Таймаҫ хан илап ҡала.

Таҙ егет Маҡтымһылыуҙы атаһына алып барып тапшыра. Һарыбай ҡарт ҡыҙын шул егеткә бирә. Туғыҙ тыу бейә һуйып, туғыҙ батман бал әсетеп, ат еткән, хат еткән ерҙән кешеләр саҡыртып, барыһын ҡыуан-

дырып, үҙе лә ҡыуанып туғыҙ көнлөк туй үткәрә. Туй һуңынан тегеләрҙе ике тирмә менән, бер өйөр йылҡы менән башҡа сығара. Таҙ егет менән Маҡтымһылыу бер күл буйында ҡартайғансы матур ғүмер иттеләр, ти.

Иртәгем ары китте, үҙем бире ҡалдым. Лоҡманға туғарҙым, уға тау менән таш йөкмәттем, үҙем аш йөкмәп ҡайттым.

## *Ҡобайыр*

## СҮКЕМ БАТЫР*

Сүкем батыр ир ине,
Сүкем батыр ир ине,
Дошмандарға күкрәк киреп,
Ҡаршы сығыр ир ине.
Сикәһенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға, тиер ине,
Елкәһенә уҡ тейһә,
Ямғыр яуа, тиер ине.

Ошбу һалйот ерендә
Киң өйөрҙәр йөр(ө)гәндә,
Шул малдарҙы таларға
Күсем хан яуы килгәндә,
Ҡамсат бүркен ҡыңғартып,
Уҡ-һаҙаҡтарын тағып,
Сүкем сыҡҡан яу һалып,
Арғымаҡҡа атланып.

Дөлдөл кеүек осҡан ул
Буҙъюрға ман сапҡанда,
Таш-ҡаяны ватҡан ул
Һаҙағынан атҡанда.

---

* Янмурзин Әскәр бабайҙан 1936 йылда яҙып алынған (яҙып алыусыһы билдәһеҙ). Башҡорт халыҡ ижады. V том. Тарихи ҡобайырҙар. Өфө, 2000.

Гәүерҙәр[1] уйланылар
Башҡорт ерен таларға,
Сүкем кеүек батырҙарҙы
Хәнйәр менән ҡаҙарға.
Сүкем батыр бирмәне
Тыуған-үҫкән ерҙәрен,
Ҡурпылы тибендәрен,
Йылҡылы өйөрҙәрен.
Юлдаштары бөтһә лә,
Миәс һыуын кискән ул,
Унда булған дошмандарҙың
Муйындарын киҫкән ул.

Күкрәк кереп ҡаршы сыҡҡан,
Бер ҡурҡыуҙы белмәгән,
Шуға уны туған халҡы
Тәкбир[2] әйтеп ерләгән.

Сүкем батыр ир ине,
Бик ян(ы)уар ир ине,
Башҡорттарҙың араһында,
Таң йондоҙо шикелле,
Һүнмәй торған ир ине.
Ҡарсығалай йылғырлыҡта
Ил эсендә бер ине.

## *Халыҡ йырҙары*

## УРАЛ

Урал — халҡыбыҙ араһында киң таралған һәм яратып йырланған йырҙарҙың береһе. Уның байтаҡ варианттары бар. Силәбе башҡорттары араһында ла бер нисә варианты осрай. «Халҡыбыҙ тарихының күсмә тормош дәүеренән сығарылған был йырҙы Арғаяш

---

[1] Гәүерҙәр — икенсе дин кешеһе, кафыр.
[2] Тәкбир — ололау.

башҡорттары борондан йырлай», — тип яҙҙы ғалим Дамир Вәлиев үҙенең «Арғаяш башҡорттарының рухи мираҫы» исемле хеҙмәтендә. Ул Арғаяш районының Үләнде ауылында йәшәүсе Кирам Шәйхисламовтан (1909—1992) яҙып алған бер вариантын килтерәбеҙ.

Урал ғына буйҙап йөрөгәнемдә,
Күренеп ята башҡорт далаһы.
Йырҙарың күп һинең, моңдарың күп,
Әйҙә, йырла, башҡорт балаһы.

Урал ғына буйҙап йөрөгәнемдә
Бер таш табып алдым беләүгә.
Эс серҙәремде һөйҙәр инем
Үҙем кеүек ярһыу берәүгә.

Урал тауҙарынан Алтайғаса
Ата-бабаларҙың төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
Шунда ята башҡорт һөйәге.

## АРҒУЖА*

Йырҙың тарихы буйынса, Шәрәфетдин Вәйсилов тигән Ялтыр ауылының бер ғәйәр егете халыҡты яҡлап йыш ҡына батша хакимиәтенә ҡаршы сыҡҡан. Ул власть башлыҡтарының малын ҡыуып алып китер, йорттарын яндырыр булған. Шул сәбәпле уны Силәбе төрмәһенә ябып ҡуялар. Ул ҡаса һәм тағы элеккә эшенә тотона. Шулай йөрөй торғас, Шәрәфетдинде тоталар һәм каторгаға оҙаталар. Ул унан ҡайта алмай вафат була.

Архив мәғлүмәттәренән күренеүенсә, Шәрәфетдин Ялтыр ауылы муллаһы Вәйсилҡара Ҡужахмәтовтың (1792 йылғы) беренсе ҡатынынан тыуған улы була. Уның 1854 йылдан Силәбе төрмәһендә ултырыуы

* Вәлиев Д. Арғаяш башҡорттарының рухи мираҫы. Өфө: Ғилем, 1996.

билдәле. Шәрәфетдингә 10-сы ревизия (халыҡтың иҫәбен алыу) материалдары буйынса, 1859 йылда 37 йәш була. Шулай итеп, халыҡ һөйләгән Шәрәфетдин Вәйсиловтың тарихы менән рәсми мәғлүмәттәр тура килә.

«Арғужа» йыры Шәрәфетдин Вәйсилов Арғужа күле буйында ҡасып йөрөгән ваҡытында ижад ителгән. Йыр тексының авторы ла Шәрәфетдин үҙе булырға тейеш. Әгәр был дөрөҫ икән, ул саҡта Шәрәфетдин Вәйсилов талантлы һәүәҫкәр композитор булған.

Арғужаҡай буйы, ай, һары тал,
Юнып ҡына алған(да) уҡ кеүек.
Уйлағанда уйҙар, ай, юҡ кеүек,
Эскенәйем яна ут кеүек.

Арғужа ла буйлап йөрөгәндә,
Ятып ҡалды ҡайыш дилбегәм.
Дилбегәм дә өсөн ҡайғырмайым,
Ятып ҡалды тыуған илгенәм.

Арғужа ла буйлап йөрөгәндә,
Исемемде яҙҙым ташына.
Аға ла эне һүҙен тыңламайса,
Еттем, буғай, ғәзиз башыма.

## Ҡолой кантон*

Ҡолой Көсөкөв (хәҙерге Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Иҫәнгилде ауылында тыуған, 1840 йылдан һуң вафат булған) — кантон башлығы. Мөхәмәтҡолой тигән утарға нигеҙ һала (хәҙер Ҡолой ауылы). 1864 йылда ошо ауылда урыҫ-башҡорт мәктәбе аса. Уның 17 улы булған. Шуларҙың өсөһө — Сәғит, Хәсән, Абдулла һуңынан кантон башлыҡтары булып хеҙмәт итә, икеһе

---

* Вәлиев Д. Арғаяш башҡорттарының рухи мираҫы. Өфө: Ғилем, 1996.

сотник була. «Ҡолой кантон» тигән халыҡ йыры уға арналған.

Был йырҙың халыҡта бер нисә варианты йәшәп килә. Уның тәүге варианты 20-се йылдарҙа яҙып алына һәм көйө менән бергә 1954 йылда «Башҡорт халыҡ ижады»нда донъя күрә. 60-сы йылдарҙа фольклор экспедицияһы ваҡытында С. Галин менән Н. Шоҡаров яңы варианттарын табалар. Шулай итеп, йырҙың яңы өс варианты 1974 йылда «Башҡорт халыҡ ижады»-ның беренсе китабында баҫыла.

Мәғлүмәттәр буйынса, Ҡолой Көсөкөв ҡаршылыҡлы шәхес булған. Бер яҡтан ҡарағанда, ул түрәлек итергә яратыусы, ҡаты күңелле, аяуһыҙ етәксе булған, ябай халыҡты йәлләмәгән, ҡаршы һөйләшеүселәрҙе ҡамсы менән һуҡтырған. Икенсе яҡтан ҡарағанда, Рәсәй батшалығы алдында ҙур хеҙмәт күрһәткән. 1812 йылғы Ватан һуғышында үҙе етәкселек иткән ғәскәр менән Парижды алыуҙа ҡатнаша. Мөхәмәтҡолой үлгәс, кантонлыҡты ҡабул иткән улы Сәғит өс тыу бейә һуйып, бәйге ойоштора һәм атаһының хөрмәтенә көй сығарған ҡурайсыға бүләк иғлан итә.

1978 йылда ғалим Дамир Вәлиев Арғаяш районының Нуркин ауылында Сәфәрғәли Солтанбәковтан йырҙың яңы вариантын яҙып ала. Антологияла йырҙың төрлө йылдарҙа яҙып алынған варианттары тәҡдим ителә.

## ҠОЛОЙ КАНТОН

1

Ҡолой кантонды ла бай, тиҙәр,
Ҡамсат та бүрке, ай, бар, тиҙәр.
Үҙ хөкөмдәре лә үҙ ҡулында,
Ни ҡылһа ла, ирке бар, тиҙәр.

Ҡолой кантон менгән туры юрға
Юрғалай ҙа башын борғолай.
Ҡолой кантон нахаҡ хөкөм итеп,
Бик күп ирҙәр зая булғылай.

Ҡолой кантондың да буйҙары
Буйға ғына үҫкән тармалай.
Ил күҙенән ҡанлы йәш ағыҙған —
Ҡолой кантон менән Ермолай.

Ҡолой кантон да бик үк ҡанһыҙ,
Бер һүҙ әйтһәң, ҡылыс ҡармалай.
Күп иркәйҙәрҙең дә башын юйҙы
Ҡолой кантон менән Ермолай.

Кантон да ғына кантон килә, тиҙәр,
Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ.
Яуыз кантондарҙы ҡуя икән
Рәсәй генә тигән батшалыҡ.

2

Таш урамҡайҙарҙа юрғалаған
Ҡолой ҙа кантондың тураты.
Баязит менән, һай, Әптекәй
Ҡолой ҙа кантон ҡанаты.

Шадриндарҙан алған, һай, туратым
Әкрен генә баҫып юрғалай,
Был империяны биләп алған
Ҡолой кантон менән Ермолай.

Ҡолой ҙа кантон буйҙары
Буйға ла үҫкән тармалай.
Ике генә милекте тиңдәр тотҡан
Ҡолой кантон менән Ермолай.

Ҡолой кантондың күрке бар,
Башҡайына кейер бүрке бар.
Үҙ илкәйҙәренә үҙе хужа,
Ҡалай ғына итһә ирке бар.

3

Парлап та ғына парлап ат ектерҙем
Ҡара туп та тигән баҙарға.
Падишанан приказ килгән, тиҙәр,
Йәш казакты һайлап яҙырға.

Казактары атҡа, һай, менә алмай,
Өҙәңгекәйҙәрен кейә алмай.
Шул казактар атҡа менеп сыҡһа,
Күҙ йәшкәйҙәрен тыя алмай.

Алыҫтарҙан ғына, һай, күренә
Московский бейек таш ҡала.
Ризыҡҡайың бөтөп, тупраҡ яҙһа,
Тупраҡ яҙған ерҙә баш ҡала.

Башҡортомдоң ғына, һай, ҡоралы
Мөгөҙ генә һаплы уҡ икән.
Күп донъялар йөрөп, мин байҡаным,
Башҡорттарҙан батыр юҡ икән.

4

Ҡолой кантонды ла(ай) бай, тиҙәр,
Ҡамсат та бүрке, ай, бар, тиҙәр.
Үҙ хөкөмдәре лә үҙ ҡулында,
Нишләтһә лә ирке бар, тиҙәр.

Ҡолой кантондың да, һай, буйҙары
Буйға ғына үҫкән тармалай.
Мейәс кенә буйын, һай, биләгән
Ҡолой кантон менән дә Ермолай.

Ҡолой кантонды ла бай, тиҙәр,
Еккән дә генә аты тай, тиҙәр.
Үҙ хөкөмдәре лә үҙ ҡулында,
Ни эшләтһә лә ирке бар, тиҙәр.

# Мейәс буйы*

Борон бер Әминә исемле ҡыҙ Ҡуйһары ауылына йәшбикә булып төшкән, ти. Әммә Олобикә, кешеләр яллап, уны Мейәс буйында үлтерткән. Шул турала йыр сығарғандар. Был йырҙың икенсе исеме лә бар, «Мейәс буйы» тип атала. Йырҙың тарихы буйынса, ҡыҙҙы үлтертеүселәр был фажиғәле хәл онотолһон өсөн шулай эшләй, йыр сығарыусыны ҡурҡыталар ҙа уның исемен үҙгәрттерәләр. Әммә был йыр халыҡ араһында «Әминәкәй» исеме менән таралып өлгөргән була.

Тәүге тапҡыр йырҙы 1962 йылда Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Ҡуйһары ауылында йәшәүсе 60 йәшлек Сәләхетдин Насретдиновтан фольклорсы Салауат Галин яҙып алған. «Мейәс буйы» исемле яңы вариантын 1978 йылда Ҡолой ауылында Яхия Хәмзиндән ғалим Дамир Вәлиев яҙып алған.

Антологияла тәүге тапҡыр яҙып алынғаны тәҡдим ителә.

Мейәс кенә буйы ҡыҙырым ҡырсын,
Ҡыҙырым ҡырсын буйлап йүгерҙем.
Үткән генә ғүмерем иҫемә төшөп,
Йән көсөмдө һалып һыҙғырҙым.

Мейәс кенә буйы бигерәк ялан,
Ат бәйләр ҙә инем, баған юҡ.
Илап та ғына илап хаттар алдым,
Хат яҙыр ҙа инем туған юҡ.

Мейәс кенә буйы, ай, суҡ муйыл,
Муйылын тиреп булмай ел көндө.
Ышанмағыҙ, дуҫтар, был донъяға,
Вайран булып ҡалыр бер көндө.

---

* Башҡорт халыҡ ижады. Беренсе китап. Йырҙар. Өфө, 1974.

## Ҡушай*

Ҡайҙа ғына күҙҙән һин юғалдың,
Шырҡыратып ҡолон бәйләүҙәр?
Рәхәт кенә йәшәп, ҡымыҙ эсеп,
Йәй айында йәйрәп йәйләүҙәр.

Атҡа ғына менеп, юртып елеп
Менгән саҡтар тауҙың башына;
Ҡәһәр генә һуҡһын был донъяға,
Кемдәр етте йәйләү башына.

## КИҘӘГӘС КҮЛ**

Киҙәгәс тә күлдең, ай, буйында
Күп командаларға дәл булдым.
Йән юлдашым минең малолетка,
Тотолорға шунда маң булдым.

Киҙәгәс тә күлдең, ай, туғайы,
Ат менеп үк сабырға уңайы.
Ун ике лә йылға хөкөм булып
Ун ике йыл ярты тулайы.

---

* Ҡушай — йыр XIX быуат аҙағында башҡорттарҙың ерһеҙ ҡалыуына батшалыҡҡа ҡарата социаль протест рәүешендә Ҡушай исемле кеше тарафынан сығарылған. Атаһы сығарған был йырҙы Хафиз Ҡушаевич Ҡушаев (1888—1941) яратып йырлаған булған. Ҡушаев Х. Ҡ. — дәүләт эшмәкәре, 1922—1929 йылдарҙа БашЦИК рәйесе, унан 1937 йылғаса Мәскәүҙә ЦИК Президиумында эшләй.

Вәлиев Д. Арғаяш башҡорттарының рухи мираҫы. Өфө: Ғилем, 1996. 1982 йылда Арғаяш районының Үләнде ауылында Кирам Шәйхисламовтан яҙып алынған.

** 1962 йылда Силәбе өлкәһенең Һары ауылында 63 йәшлек Хәйбулла Фәйзуллиндән ғалим Кирәй Мәргән яҙып алған.

## ИҘӘКӘШ*

Силәбеләргә беҙ киттек,
Ай-һай ҙа беҙҙең ғәзиз баштар,
Алдан да арттан ҡарауыл.

Беҙҙең генә илде һораһағыҙ,
Ай-һай ҙа беҙҙең ғәзиз баштар,
Ҡыҙырым сауҡа үҫкән һарауыл.

Тәҙерәкәй төбөм ҡаҙаҡлы,
Ай-һай ҙа беҙҙең ғәзиз баштар,
Ишекәй төбөм йоҙаҡлы.

Ҡайтыр ғына инем үҙ илемә,
Ай-һай ҙа беҙҙең ғәзиз баштар,
Аяҡ-ҡулҡайҙарым тоҙаҡлы.

Силәбеләрҙә беҙ яттыҡ,
Ай-һай ҙа беҙҙең ғәзиз баштар,
Бөрмәле лә башлы төрмәлә.

Оҙон ҡолаҡтарҙан беҙ ишеттек,
Ай-һай ҙа беҙҙең ғәзиз баштар,
Оҙаталар тиеп Пермәгә.

## АРҒАЯШ**

Кәкүк кенә, меҫкен, ай, саҡыра
Ҡойроҡтарын һалып баш-башҡа.
Сәсмәүҙәре булыр, ай, янбашта,
Ҡуш беләгеn һалыр иңбашҡа.

---

* 1962 йылда Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Яңы Субыл ауылында 58 йәшлек Мәғәсүмов Шәйхулланан ғалим Салауат Галин яҙып алған. Башҡорт халыҡ ижады. Өфө, 1974.

** Ҡайҙа, кемдән яҙып алыныуы билдәле түгел. Башҡорт халыҡ ижады. Өфө, 1974.

Ҡыйғас та була, ай, тау башы,
Ҡыйғас ҡара була ҡыҙ ҡашы.
Ҡыҙ балаҡай үҫеп буйға етһә,
Ир балаҡай була юлдашы.

Йүгереп тә төштөм, ай, үҙәккә,
Ҡыҙарыпҡай бешкән еләккә.
Ҡыҙ балалар, меҫкен, үҫә икән
Ир балаҡайҙарға бүләккә.

## Тәхәлемкәй

Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районында «Тәхәлемкәй» исемле халыҡ йыры табылды. Был йырҙы Жанфидә Абдулла ҡыҙы Ваһапова яҡташтары: Бүре ауылының атаҡлы йырсыһы Ғаяз Хәйретдинов (1918 йылғы) һәм Хәлит ауылы кешеһе Зәкәриә Ғәйнетдиновтан (1926 йылғы) берәр куплетлап яҙып алған. Уның һөйләүенсә, Ғаяз Хәйретдинов йырҙың көйөн дә белгән булған. Хәҙер ағайҙар икеһе лә вафат.

Йырҙың яҙылыу тарихы билдәһеҙ. Йөкмәткеһенә ҡарағанда, уны тыуған иленән мәжбүри рәүештә айырылып, алыҫ сығып киткән кеше сығарған. Тыуған иленән яҙған кеше — мәңге яңғыҙ һәм иң бәхетһеҙ кеше.

Тәхәлемкәй буйлап ҡайтыр инем,
Һуғармы икән һыуҙың һалҡыны.
Һуҡһа ла ғына һуҡһын һыу һалҡыны,
Баҫылмаҫмы йөрәктең ялҡыны.

Тәхәлемкәй күлен өс әйләндем,
Ҡайта алмай йөрөгән ҡош кеүек.
Уйлаған да уйым һис юҡ кеүек,
Эскәйҙәрем яна ут кеүек.

## ИМПАИРА-ТИРИТУР*

Алмағасҡа яулыҡ элдем,
Һандуғастар ҡунһын тип.
Һин, дуҫыма хаттар яҙҙым,
Һағынғанды белһен тип.

Импаира-тиритур,
Импаира-тиритур.
Киң ҡырҙарҙа һабан һөрә
Башҡорт егете бит ул.

Ағиҙелдең аръяғында
Йырлап утын киҫәләр.
Беҙгә тигән йәш матурҙар
Ауылдарҙа үҫәләр.

Импаира-тиритур,
Импаира-тиритур.
Һыу буйында ат эсерә,
Башҡорт егете бит ул.

Аттар килә атлап-атлап,
Еләк сәсәген тапап.
Гармун көйөнә йырлайым
Ауыл ҡыҙҙарын маҡтап.

Импаира-тиритур,
Импаира-тиритур.
Иртә тороп эшкә бара,
Башҡорт ҡыҙҙары бит ул.

Йәй ҙә йәшел, ҡыш та йәшел
Ҡарағай тигән ағас.
Ниңә йәшел булмаһын ул,
Бер ҡайғыһы булмағас.

---

* Был йырҙы 2000 йылда Шируанова Зимфера Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Оло Ҡаҙаҡбай ауылында йәшәүсе әсәһе Мөхәмәтйәнова Дариғә Васил ҡыҙынан (1932 йылғы) яҙып алған.

Импаира-тиритур,
Импаира-тиритур.
Алтын бойҙай гөрләп үҫә,
Ауыл баҫыуы бит ул.

## *Сеңләүҙәр**

Ҡыҙҙың ата-әсәһенә сеңләгәне:

Ҡарлуғасҡай ҡайҙа бараһың,
Ҡанат осҡайыңды талдырып?
Инәкәй, ҡайҙа алып бараһың,
Сит илдәрҙә яңғыҙ ҡалдырып?

Француз яулыҡ биҙәккәй,
Биткәйемә төшөр, инәкәй.
Минең дә кеүек ҡыҙҙы күрһәң,
Иҫкәйеңә төшөр, инәкәй.

Атаҡайымдың аттары
Һыуҙан да сыҡҡан балыҡтай.
Атаҡайымдың биргән ере
Янып та торған тамуҡтай.

Атайымдың урамына
Өйрәк тә һыя, ҡаҙ һыймай.
Атайымдың өйөнә
Ир балаҡай һыя, ҡыҙ һыймай.

Атайымдың урамында
Ике аяғымдың юлы бар.
Алып килегеҙ атайымды,
Үпкәләр ҙә һүҙем бар.

Ултырҙым тәҙрә төбөнә
Яңы һауған һөт кеүек.

---

* Ибраһимова Рина Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Ярат-ҡол ауылында йәшәүсе өләсәһе Зәғифә Закир ҡыҙы Ибраһимованан (1922 йылғы) 2002 йылда яҙып алған.

Белмәнең, инәй, хәлгенәмде,
Эскәйҙәрем яна ут кеүек.

Атайым миңә ат бирҙе,
Ерән дә ҡашҡа булһын тип.
Атаҡайым мине йәштән бирҙе,
Бауырҡайы башҡа булһын тип.

Инәкәйемдең мейесе
Йәшел дә кирбес булһасы.
Инәкәйемдең өйөнән
Китмәҫ тә йола булһасы.

Йүгереп сыҡтым һаҙ үтә,
Аяғыма һыу үтә.
Аяғыма һыу үтә,
Бигерәк йәштән бирҙең,
Үҙәгемә шул үтә.

Атайым, бесән сабырһың,
Сапҡан юлың киң булмаҫ.
Атаҡай, бала үҫтерерһең,
Мине иҫкә төшөрөрһөң,
Мине артҡа ҡайтармаҫһың.

Ҡыҙҙың әхирәттәренә, ауылдаштарына сеңләгәне:

Ҡарайҙа беҙҙең өйөбөҙ,
Шаңғырайҙа беҙҙең көйөбөҙ.
Күп ултыра, тип, күпһенмәгеҙ,
Хисаплы ла беҙҙең көнөбөҙ.

Ишектән сыҡтым, ҡайырылдым,
Ҡапҡанан сыҡтым, айырылдым.
Тиң-тиндәшкәйҙәрем хуш булың,
Инде лә һеҙҙән айырылдым.

Имән ағас көйәнтә,
Эйелмәҫ тә тимәгеҙ.
Йыраҡ ергә бирҙегеҙ,
Килеп йөрөмәһен, тинегеҙ.

Әй, йөрөлгән ер, йөрөлгән ер,
Йөрөлгән ерме, тиһәм, һөрөлгән ер.
Әлхәмдиллә шөкөр, был йөрөлгән ер,
Әллә ниндәй була төшкән ер.

Ултыра өйрәк, ултыра,
Ояһын йөн менән тултыра.
Ҡыҙ балаҡай, меҫкен, ни хәл итһен?
Ике күҙен йәш менән тултыра.

Ҡарағат тирҙем ҡалдырып,
Уң беләгемдә талдырып.
Тиңдәшкәйҙәрем ҡарап ҡалды,
Ҡарағаттай күҙен талдырып.

Әй, шау ҡамыш, шау ҡамыш,
Шау ҡамышта бер тауыш.
Илемде ташлап, бил быуып,
Китергә торам мин, байғош.

## *Мәҡәл-әйтемдәр*

* Ағалы-энеле һуғышыр, атҡа менһә, ярашыр.
* Аҙыҡлының аты арымаҫ.
* Балалы өйҙә ғәйбәт юҡ.
* Күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй.
* Һуҡмаҫ һуйыл күтәрә.
* Май сүлмәге тышынан билгеле.
* Көлөп тор ҙа, көтөп тор.
* Йоҡлағанға йоҡмаған.
* Ялҡау килһә, хәбәргә тотона, шәпте килһә, эшкә тотона.
* Осоп төшөү өсөн ҡанат кәрәкмәй.
* Утты утын аҫтына йәшермәйҙәр.
* Эше барҙың ашы бар.
* Сабырлы сыҙар, сабырһыҙ илар.
* Яман бала яуҙан ҡаты.
* Тамаҡтың ояты юҡ.
* Белмәгәндең беләге тыныс.
* Доғаһы юҡтың дуғаһы юҡ.

## *Тыйыуҙар*

* Ағастың тамырын яғырға ярамай, нәҫелең ҡорор.
* Ашты тиргәргә ярамай, аш рәнйер.
* Өйҙә насар теләктәр теләргә ярамай, яланда теләйҙәр.
* Бүләккә энә бирергә ярамай, хәйерселек теләү була.
* Тупһа аша әйбер бирмәйҙәр, айырылышыуға.
* Торонбашты мейестән сығарып ташламайҙар, донъя киреләнәсәк.
* Һуғандың ҡабығын яғырға ярамай, ҡайғың әсе булыр.
* Бысаҡты ергә ҡаҙарға ярамай, зыян күрерһең.
* Утҡа төкөрөргә ярамай, ауыҙың бөрөшөр.
* Асылма аша сүп-сар ташламайҙар, фәрештәләр рәнйер.
* Ғәйбәт һөйләгәндең теле ахирәттә аҫҡа һәлберәп торасаҡ.
* Мәрхүмдең исемен яманлап телгә алыу тыйыла.
* Ҡояш байығас, тауышлы эштәр башҡарыу тыйыла.
* Бағананың төбөн өҫкә ҡалдырып ултыртыу тыйыла.

## *Балалар фольклоры**

### ҺӨЙГӨСТӘР, ҺИКЕРТКЕСТӘР

Ҡыҙым, ҡыҙым, ҡыҙ кеше,
Ҡыҙыма килер йөҙ кеше.
Йөҙ кешенең араһынан
Һайлап алыр бер кеше.

Һикер тутай, һикер тутай,
Һикһән ике йәшәрһең.

---

* Балалар фольклорын Ибраһимова Рина (1980 йылғы) 2002 йылда Арғаяш районынан яҙып алған.

Һикһән ике йәшәрһең дә,
Йөҙөм-еләк ашарһың.

Бәхетле булғыры,
Тәүфиҡлы булғыры.
Белемле булғыры,
Аталы-әсәле үҫкере.

Һу-уп, һу-уп, тағы ла
Ҡара ниндәй ҡағына.
Осҡан ҡоштай талпына ла,
Юҡ шул ҡанатҡай ғына.

## ТАҠМАҠТАР

Йөҙөгөмдөң исемдәре,
Исемдәре Әнисә.
Әнисәнең ағаһы
Бигерәк күп сәй эсә.

Йөҙөгөмдөң исемдәре
Исемдәре Кәтибә.
Кәтибәнең уйынсыҡтарын
Азат ағаһы тибә.

Йөҙөгөмдөң исемдәре,
Исемдәре Миңһылыу.
Миңһылыуҙың апаһы
Бигерәк тә шул һылыу.

## ҮСЕКЛӘШЕҮҘӘР

Фатима, Фатима,
Тик уйланып ултыра.
Өйгә эшен эшләй алмай
Ҡытайҙағы аңғыра.

Ғәлмән бәлмән бешергән,
Өй башына йәшергән.
Уны алайым тигәнсе,
Бесәй талап төшөргән.

Йәнтүрә, Йәнтүрә,
Көн дә бәлмән бешерә.
Өйөрөлгән ите әсе,
Һыуында йөҙә сәсе.

Тува, тува, тува та,
Рима гармун уйната.
Атаһы утын яра,
Инәһе һыйыр һауа.

Ринат — эремсек,
Диван аҫтына кереп сыҡ.

Ары-бире йүгерә
Урам буйлап бер тәкә.
Бәжекәйҙең малайҙары
Егермеһе бер тәңкә.

Таһир — тоғор арва,
Ҡуянбайға барма.
Ҡуянбайҙың ҡыҙҙары
Ҡамыт аяҡ үҙҙәре.

## КӨЛӘМӘСТӘР

Беренсе класта уҡыған Зиләнән уҡытыусыһы:

— Зилә, атайың йә әсәйең өйҙә дәрес әҙерләргә ярҙамлашамы? — тип һорай.

— Ярҙамлашҡандары юҡ, эшләп кенә бирәләр, — ти Зилә.

* * *

— Ринат, кәбеҫтә күбәләген нисек юҡҡа сығарырға? — тип һорай биология уҡытыусыһы.

— Кәбеҫтә үҫтермәҫкә, — тип яуап бирә Ринат.

* * *

Ҡарттаһы Рамазандың итеген яңылыш кейгәнен күреп:

— Улым, итегеңде яңылыш кейгәнһең дә инде, — ти.

Бала күп уйлап тормай, бер аяғын икенсеһенә ишеп баҫа ла:

— Ә хәҙер яңылыш түгел! — тип әйтә.

* * *

— Улым, нисек, мәктәп оҡшанымы?

— Бик оҡшаны, әсәй.

— Ә нимә күберәк оҡшай?

— Тәнәфестәре бик күңелле була.

# Силәбе еренән сыҡҡан ғалимдар һәм әҙиптәр

## Нуриәғзәм Таһиров

## (1888–1937)



Нуриәғзәм Таһир улы Таһиров 1888 йылдың 9 ғинуарында Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Ләүеш ауылында урта хәлле мулла ғаиләһендә тыуа.

Тыуған ауылында башланғыс белем ала. Мәүлит ауылында, унан һуң Троицкиҙағы «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә уҡыуын дауам итә. 1908–1911 йылдарҙа Өфөлә «Ғәлиә» мәҙрәсәһендә уҡый.

1912–1914 йылдарҙа Силәбе өйәҙендә һәм алыҫ Себерҙә уҡытыусыһы булып эшләй. 1917 йылда Бөтә башҡорт ҡоролтайына делегат итеп һайлана. Ҡоролтайҙа уны Башҡорт мәркәзенә ағза итеп алалар. 1921 йылда Башнаркомпрос коллегияһы ағзаһы, фәнни ойошманың рәйесе була. 1925 йылдан Адвокаттар коллегияһының ағзаһы. 1929 йылда репрессияға дусар ителә. 1956 йылда вафат булғандан һуң аҡлана.

Нуриәғзәм Таһиров – егерменсе йылдарҙа башҡорт филология фәненең нигеҙ ташын һалыусы тәүге телсе-ғалим. Башҡорттарҙың көнкүрешен, тарихын, телен һәм

мәҙәниәтен өйрәнеү буйынса Фәнни йәмғиәт рәйесе була. 1924 йылда беренсе «Башҡорт әлифбаһы»н әҙерләй. 1926 йылда «Башҡорт теле һүҙлеге»н, ҡыҫҡаса орфографик һүҙлек баҫтырып сығара. Башҡорт теленең тәүге грамматикаһын төҙөүҙә ҡатнаша, уның тәүге авторҙарының береһе була.

«Ғәлиә» мәҙрәсәһендә уҡыған сағында әҙәби ижад менән мауыға. Уның тәүге шиғырҙары һәм публицистик яҙмалары шул йылдарҙа «Тормош» (Өфө), «Ваҡыт» (Ырымбур) гәзиттәрендә төрлө псевдоним менән баҫыла. Әлеге ваҡытта 14 шиғырҙан торған ҡульяҙма дәфтәре Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәге архивында һаҡлана. Шулай уҡ уның ижадында «Батрак» исемле китабы, «Аҡһаҡ ишан» исемле драмаһы билдәле. Ул тәүге журналистар рәтендә була.

## БАЛА САҠТА

Бала саҡта йүгергеләп уйнай инем,
Мәңге шулай булыр, тиеп уйлай инем,
Гәрсә өйҙә ашарға тип көтһәләр ҙә,
Ваҡытында өйгә ҡайтып килмәй инем.

Сөнки унда әпәкәй әләкһә, туйған,
Шул сәбәпле ашар ваҡыт онотолған,
Ҡайҙа батҡаҡ, ҡайҙа туҙан араһында
Болғаланып уйнау беҙгә ҡыҙыҡ булған.

Юҡ, ул дәүер күп тормайса үтә икән,
Рәхәтлектәр беҙҙең ҡулдан китә икән,
Үҙ хәлеңде үҙең генә ҡайғыртып та
Михнәт сигә торған көндәр етә икән.

Шул заманда үткән көндәр иҫкә төшә,
Уйлап-уйлап күп ваҡытта эс тә боша,
Ни сара һуң, үткән көндөң бер минуты
Ҡайтып килмәй, илаһаң да әллә нисә...

## ШӘКЕРТТӘР АУЫҘЫНСА

Уйлап баҡһаҡ, артта ҡалған милләтебеҙ,
Ана шуға килә беҙҙең асыуыбыҙ,
Шул милләтте аҙыраҡ алға атлатыуҙыр —
Был уҡыуҙан иң беренсе маҡсатыбыҙ.

Һәр нәмәгә булалыр ул бер сәбәпсе,
Һыуҙа йөрөһәң, уның кәрәк карап башы,
Шуның кеүек юлдан яҙған милләттәрҙе
Беҙ булабыҙ юлға һалып төҙәтмәксе.

Ҡәрҙәштәрҙә байҙарҙан күп фәкирҙәре,
Уҡыр ине, ҡулында юҡ һис малдары,
Уҡымайса әгәр улар шулай ҡалһа,
Йәһәләттә иҙеләләр бит йәндәре.

Беҙ барабыҙ шундай меҫкен ҡәрҙәштәргә,
Дүрт күҙ менән көтөп ятҡан тиңдәштәргә,
Ижтиһадлап нисек тә мәктәп һалып,
Уҡыу юлын күрһәтәбеҙ һәм йәштәргә.

Шулай итһәк, милләтебеҙ алға китер,
Аҡрынлап моратына барып етер,
Ялҡаулыҡ һис файҙаһыҙ, тип киҫеп әйтһә,
Ағай, миңә бер тин бир, тип һорау бөтөр...

## БЕР МУЛЛАҒА

Юлдан яҙһа уғры, юлда һин уға маяҡ бул,
Әгәр һынһа аяҡтары, һин ныҡлы бер аяҡ бул,
Ҡартайып та атлауҙары зәғифләнһә,
Кәкре һаплы муйыл таяҡ һин бул имде.

Асыуланып, йөҙҙәренә ҡаты орма,
Саҡырмағандары булһа, уға йөрөмә,
Барлыҡ малың һатып алған указыңды
Тамағыңа аҙыҡ тиеп белмә имде.

Үҙҙәре ас фәҡирҙәрҙе һин талама,
Ҡырҡ ямаулы кейемдәре ник алама?
Наҙанлыҡ һәм ялҡаулыҡта аңҡаулыҡтың
Сәбәптәрен күрһәт, зинһар, ҡалма имде...

## Абдулҡадир Инан

## (1889–1976)



Абдулҡадир Инан (Фәткел Мостафа улы Сөләймәнов) 1889 йылдың 2 ноябрендә Ырымбур губернияһының Силәбе өйәҙе Шығай (икенсе исеме Һары Күлмәк) ауылында (хәҙерге Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы) тыуа.

Башланғыс белемде тыуған ауылы мәҙрәсәһендә ала. Троицк ҡалаһында «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә уҡый. 1914 йылдан алып балалар уҡыта. Февраль революцияһын Ырымбур ҡалаһында ҡаршылай. Башҡорт хөкүмәте органы – «Башҡорт» газетаһының мөхәррире була. Башҡорт АССР-ы төҙөлгәс, республиканың Мәғариф комиссияһында фән буйынса комиссия эшенә етәкселек итә.

1923 йылда башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәксеһе Зәки Вәлиди менән сит илгә сығып китә. Төркиәнең баш ҡалаһы Стамбулда, аҙаҡ Анкарала йәшәй. 1925 йылдан Төркиәт институтында ассистент. 1933 йылдан Төрөк тел ғилеме йәмғиәтендә, Анкара институтында эшләй. 1961 йылдан Дин эштәре департаментында, 1964 йылдан алып Төрөк мәҙәниәте институтында эшләй.

Шәрҡиәтсе ғалим боронғо яҙма төрки ҡомартҡыларын тикшерә, төрки халыҡтары араһында шаманлыҡ күренештәрен өйрәнә. Тарих, фольклор, әҙәбиәт, этнография, лингвистика һәм археология буйынса ғилми хеҙмәттәр яҙа. «Шаманизм тарихта һәм бөгөн» исемле китабы Өфөлә 1998 йылда баҫылды.

Уның әҙәби ижады XX быуат башына тура килә. 1914–1920 йылдарҙа шиғырҙары, хикәйәләре, драмалары матбуғатта баҫыла. «Башҡорт йәйләүендә» исемле һайланма әҫәрҙәр йыйынтығы Өфөлә 1996 йылда донъя күрә.

## БАШҠОРТ МОҢО

Аҡ тирмәнән сығып, моңло төндә
Ҡарап торҙом айҙың батҡанын.
Йоҡоларым ҡасып, күп уйланып,
Көтөп торҙом таңдың атҡанын.

Йылт-йылт итеп янған нурлы йондоҙ
Әллә нимә һала күңелгә.
Һыҙлана ла күңел, моңлана ла
Әллә нимә бөтөн түгелгә.

Иҫкә төшә шунда иҫке саҡтар —
Ата-бабаларҙың дандары.
Күҙ алдында иләҫ-миләҫ итә
Көтөү-көтөү йөрөгән малдары.

Һаҙаҡтарын тартып, һөңгө тотоп,
Йөрөгән улар матур аттарҙа.
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Ил бирмәгән яман-яттарға.

...Яҡшы аттар киткән, инде ҡалған
Ҡуян йөрәк, ялҡау, ямандар...
Бер йырланым шулай, бер иланым,
Илап торҙо ҡара урмандар.

## ЙӘЙЛӘҮҘЕ ҺАҒЫНҒАНДА

Ҡайҙа ғына китте беҙҙең күҙҙән
Йәйелеп кенә ятҡан йәйләүҙәр?
Уйнап-көлөп, йүгереп, тирләп-бешеп
Сорҡоратып бейә бәйләүҙәр?

Ел дөбөрләп сыҡҡан моңло тауыш
Иртә менән йылҡы килгәндә,
Күңелемдәге шатлыҡ йөҙгә сығып
Ултырған саҡ ҡымыҙ эскәндә?

Ҡурайсыны алып, моңландырып,
Ултырған саҡ ҡурай уйнатып,
Матур аттар менеп, юртып-елеп,
Йөрөгән саҡтар Урал буйлатып?

Ала юрға егеп, әкрен атлап,
Менгән саҡтар тауҙың ташына!
Ҡәһәр генә төшкөрө был донъяға, —
Кемдәр етте йәйләү башына?

Әйләнәлә үҫкән матур ҡайын
Сыңғыратып та бейә бәйләргә,
Йәйләүҙәр ҙә китте, малдар бөттө,
Инде ҡалды һағынып һөйләргә.

Ожмах, киң, матур, эй йәйләү,
Беҙҙең ҡулдан сығып киттең бит!
Ник илайһың, башҡорт? Ҡуй, илама!
Үҙең һатып ашап бөттөң бит!

## МИН ҮЛГӘС

Килер бер көн... үлер был тән... китермен,
Мөҡәддәс күктәрендә сәйәр итермен.
Ҡара таплы, гонаһлы, шомло ергә
Ҡарап күктән рәхәтләнеп көлөрмөн...
Күҙем төшөр; күп иҫәрҙәр йыйылған
Эше юҡтан минең ҡәберем ҡашында,
Үләкһәмә итеп хөрмәт, эйеп баш,
Уҡырҙар исемемде ҡәберем ҡашында...
«Үҙе бөйөк, һүҙе күктән, — тиерҙәр. —
Нисек аңламаныҡ тере сағында?!»

## КИЛМЕШӘКМЕН

Моңло төн... Ялт-йолт итеп күктәрҙә йондоҙҙар яна,
Әллә ниндәй серле нурҙар сәсрәтеп йондоҙ ата.

Береһе янып, береһе һүнә мәңгелек күк шәмдәре,
«Эй, бөйөк Тәңрем», — тимен дә күҙҙәремдән
йәш тама.

Һиҙәмен; мин килмешәкмен, ер түгел илем минең,
Шул мөҡәддәс күк — минең ил, ашҡынам шунда таба...

## Тайфур Сөләймәнов

## (1906–1982)



Тайфур Вафа улы Сөләймәнов 1906 йылда Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Мәүлит ауылында тыуа. Атаһы – указлы мулла – ауылдағы мәҙрәсәлә мөдәррис була, ә әсәһе Мәрфүғә Сөләймәнова Ҡоншаҡ районының Шығай ауылынан Абдулҡадир Инандың ике туған апаһы булып сыға.

Башланғыс белемде тыуған ауылында ала. Өфөләге педагогия училищеһында уҡый. Уҡытыусы булып эшләй. 1937 йылда атаһы Вафа Сөләймәнов ҡулға алынып, ғаиләһе менән һөргөнгә оҙатыла. Тайфур туғандары менән Прокопьевск ҡалаһына ебәрелә. Ул унда писарь булып эшләй. Атаһы Беломор-канал төҙөргә билдәләнә, ул шунда эшләп, ҡайта алмай, вафат була.

1940 йылда Тайфур Вафа улы ялған документтар ярҙамында туғандарын тыуған яғына алып ҡайта. 1942 йылдың сентябрендә уны һуғышҡа алалар. Ленинград фронтының 18 армияһында хеҙмәт итә. Блокадалы Ленинградты яҡлауҙа ҡатнаша. 1945 йылда һуғыштан еңеү яулап, әйләнеп ҡайта.

һуғыштан һуң, Арғаяш районының Мәүлит, Көҙәш, Яраткол, Сосновка районының Көҙөй, Табын ауылдарында уҡытыусы булып эшләй.

Тайфур Сөләймәновтың ҙур булмаған әҙәби мираҫы ҡульяҙма хәлендә һаҡланған. 1940 йылда «Алтындар һәм йылдар» исемле 145 битлек повесть яҙған. «Һырға-һабаҡ һалыш» исемле хикәйәһе 1941 йыл менән билдәләнгән. Билдәле булыуынса, ул бәйеттәр ҙә сығарған, әммә улар һаҡланмаған.

## ҺЫРҒА-ҺАБАҠ ҺАЛЫШ

*Хикәйә*

I

Бөгөнгө кеүек хәтеремдә, мин кескәй генә сағымда, белмәйем ҡайһы ауылдыҡылыр, Мөхитдин исемле бер кеше беҙгә, һәр баҙар көнө тип әйтерлек, килеп йөрөй торғайны. Ул үҙе өҫтөнә иҫке генә тула сәкмән, башына ҙур ғына иҫке эшләпә, аяғына ямаулы сарыҡ кейеп йөрөһә лә, мин уны үтә яратҡанымды, уға иркәләнеүемде хәтерләйем. Ул үҙе һәр ваҡыт көләс, шат йөҙлө, уйынсаҡ характерлы булыуы менән бергә, үҙенең бәләкәй ҡустыһы һымаҡ итеп, көслө, ҙур ҡулдары менән күтәреп ала йәки ҡулдарымдан етәкләп, баҙарға алып сыға. Миңә төрлө тәмле-татлы ашамлыҡтар — күстәнәстәр һәм уйынсыҡ һыбыҙғылар алып бирә. Минең ошо бәхетемдән ҡайһы бер үҙем кеүек бәләкәй малайҙар көнләшәләр ҙә ине. Бигерәк тә, өйгә ҡайтҡас, үҙемдән өс йәшкә генә өлкәнерәк булған Һәҙиә апайымдан алып иң өлкән апайымдарға тиклем:

— Ҡана, ҡайныңдың бүләгенән беҙгә лә ауыҙ иттер, — тип теңкәмә тейәләр. Мине төрлө һүҙҙәр менән оялтырға тырышып үсекләйҙәр, асыуландырырға тырышалар.

Ләкин, әле мин тәү белә башлаған сағымда, апайымдарҙың үртәүҙәрен аңлап етмәгәнгә микән, артыҡ борсолмайым, киреһенсә, ул күстәнәстәрҙе

ашап, маһая торғайным. Ә улар һеләһеҙ булып көләләр ине.

Ҡайсаҡ ул беҙҙең ауылда була торған баҙарға килмәй, оҙаҡ ваҡыттар көттөрә. Ә мин күстәнәстәр эләкмәүҙән күңелһеҙләнә инем. Әгәр ҙә ул көтмәгәндә генә килеп төшһә, апайымдар тағы:

— Әнә, ҡайның килде, бар, ҡаршы сығып ал, — тип көлөшәләр. Улар ни тиклем көлһәләр ҙә, шатлығымдан нишләргә белмәйем.

Ә ул килеп инеү менән атайымдарҙан иҫән-һаулыҡ һорашҡас та, мин күҙенә эләгеү менән:

— Йә, кейәүкәйем, нихәл, һаумы? — тип мине ҡулдарымдан тотоп ала һәм иркәләй...

Ә атайымдар, мин аңлап етмәгән ниндәйҙер «буласаҡ килендәре»нең һаулығын һорашҡандарҙыр, уныһын хәтерләмәйем...

II

Минең аңһыҙ балалыҡ әкренләп үтә бара. Кешеләр араһында була торған ҡайһы бер нәмәләрҙең айышына ла төшөнә башланым. Миндә лә ҡайһы бер нәмәләргә ҡарата өлкәндәр йәки башҡалар алдында оялыу тойғолары үҫә башланы...

Бына бер мәлде, бик бәләкәй сағым томанлы ғына булып күҙ алдымда кәүҙәләнгән, теге Мөхитдин тигән кеше көтмәгәндә генә бисәһе менән беҙгә килеп төштөләр. Атайымдар ҙа күптән күрмәгән дуҫтарын хөрмәтләп ҡаршы алдылар һәм бик оҙаҡлап, һөйләшә-һөйләшә сәй эстеләр.

Улар бынан бик алыҫта булған бер алтын приискыһында эшләүҙәрен, ҡыйынлыҡ менән булһа ла, тамаҡ туйҙырырлыҡ табыш булып тороуын һөйләнеләр. Уларҙың һөйләшкәндәрен ситтән генә ҡарап тыңлап торған сағымда Мөхитдиндең бисәһе әсәйемә ҡараны ла, миңә төртөп күрһәтеп:

— Беҙҙең кейәүебеҙ ошо егет буламы ни инде? — тип һорашып та бөтмәне, ҡапыл оялыуымдан тышҡа йүгереп сығып ҡастым. Беҙҙең тәҙрәнең бер күҙенең

быялаһы юҡ ине. Ҡасып сыҡҡас та, әкрен генә шул тәҙрә янына шыуып барҙым, сәй янында нәмә һөйләшкәндәрен тыңлай башланым. Мине оялтып сығарған ҡатындың:

— Ҡара ниндәй ҙур булып үҫеп килә, минең Хәтимәм дә унан ҡалышмай үҫә. Иҫән-һау, буйға үҫеп етеп, туйҙарын күрергә насип итһен инде. Бына әле, алыҫ ерҙән әллә ниҙә бер генә килеп торғас, затлы булмаһа ла, үҙенә бүләктәр алып килдем, нишләйһең, кейәү бала бит, — тип, әсәйемә кескәй генә муҡсаһынан нәмәләрҙер сығарып биргәнен күҙәтеп торҙом.

Мин ул көндө оялыуымдан өйгә ҡайтмайынса, һыу буйында, кесерткәндәр араһында кискә тиклем ҡасып йөрөнөм. Үҙем, ҡәһәр һуҡҡырҙарың, ҡасан ғына ҡайтып китәләр инде, тип эстән генә әрней инем.

Тик кискә табан, көтөү килгән саҡта ғына үҙебеҙҙең өйгә ҡайттым. Өйгә ингән генә инем, әлеге шаян телле апайҙарым:

— Бына, кәләшең сигелгән күлдәк бүләк итеп ебәргән, — тип, миңә ҡаршы йүгереп сыҡтылар. Ысынлап та, бер апайымдың ҡулында аллы-күкле сәсәктәр төшөрөп сигелгән күлдәк күрҙем. Күлдәкте ни тиклем ҡыҙығып ҡулыма алһам да, уларҙың: «Килен бүләге», — тип үртәүҙәренән ғәрләндем дә, ҡаршыла дөрләп янып торған сыуалға бырaҡтырҙым.

Апайҙарым шарҡылдап көлөштөләр. Мин ни эшләргә лә белмәйенсә, мөйөшкә ҡасып, бер тун менән ҡапланып яттым да, тулыҡһып илап ебәрҙем. Ә апайҙарым, һаман мине үртәп, ҡысҡырып көлөүҙе дауам иттеләр...

## III

Йылдар үтте...

1917 йылдың көслө Октябрь елдәре илебеҙҙә яңы үҙгәрештәр яһап, ярлыларға иркен, мул тормош бүләк итте. Әлекке ярлы тормош ауырлығынан зарланып йөрөй торғас, атайымдың йәшлек дуҫы Мөхит-

дин дә үҙгәрҙе. Ул, революция, граждандар һуғышы йылдарында партизанлыҡ иткән. Ҡыҙыл Армия сафында Колчакка, Дутовҡа ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашҡан. Илдә тыныслыҡ урынлашҡас, түбәнге Совет аппараттарының береһендә эшләп йөрөй башланы. Үҙебеҙгә килгән һайын атайым менән һөйләшеп ултырған саҡтарында:

— Һай, дуҫҡайым, уҡымай ҡалғанбыҙ шул, грамотаға йүнләп өйрәнеп булмай. Олоғайыбыраҡ кителгән шул, — тип, үкенесле итеп һөйләнә лә, унан: — Бына йәштәрҙе уҡытырға кәрәк, уларға мәктәп ишектәре асылды. Әйҙә, уҡыһындар, власть үҙебеҙҙеке бит, бына һин, дуҫҡайым, минең был кейәүҙе лә уҡытырға кәрәк, — тип, миңә төртөп күрһәтеп ҡуя. Ә мин уның шул «кейәү» тигән һүҙенән ни эшләргә белмәйенсә ҡыҙарам.

Мин ауыл мәктәбен тамамлағас, ауылыбыҙҙан утыҙ биш саҡрым алыҫлыҡта булған, ҙур бер ауылда асылған икенсе баҫҡыс мәктәбенә уҡырға киттем. Ул мәктәпкә барып уҡыуҙы, ул саҡта, ҙур, юғары уҡыу йортонда уҡыусы итеп һанай инем. Атайым да минең ул мәктәптә уҡыуымдан бик ҙур өмөт менән ҡәнәғәтләнә ине. Ул һәр ваҡыт:

— Минең малай ҙур уҡыуға инде, ул бик ҙур кеше буласаҡ, — тип һөйләнә. Ә теге Мөхитдин килгән саҡтарында:

— Әйҙә, минең ҡыҙ үҫә торғансы уҡый бирһен, унан бик шәпләп туй итербеҙ, — тип атайымды өгөтләп китә икән.

Был мәктәп мине һәм минең менән бергә бөтә уҡыусыларҙы үҙенә йотто. Ул беҙҙең өсөн берҙән-бер белем шишмәһе. Бөтә күңелебеҙ менән бирелеп уҡыйбыҙ. Беҙҙең алдыбыҙҙа көндән-көн киң, яңы донъя асыла бара. Тәбиғәт, тормош һәм йәмғиәттең тәрән үҫеш серҙәрен төшөнөүгә таба барабыҙ. Беҙҙе ҙур белем үҙ ҡосағына тарта. Тарих, әҙәбиәт, тәбиғәт, география, математика һ. б. фәндәр беҙҙең йәш күҙҙәребеҙҙе яҡтырталар...

Минең иптәштәрем үҙем кеүектәр. Улар тирә-яҡтағы төрлө ауылдарҙан йыйылғандар. Бер нисә бөртөк ҡыҙҙар ҙа бар. Улар бик аҙ ине. Икеһе, ата-әсәләренең ризалығынан башҡа, ҡасып килгәндәр. Уларҙы мәктәп үҙ средствоһы иҫәбенә тәьмин итә. Икеһе уҡытыусы ҡыҙҙары булһалар, ҡалғандары ул ваҡыттағы ҡайһы бер асыҡ фекерле, ысын мәғәнәһе менән Совет яҡлы кешеләрҙең ҡыҙҙары инеләр. Был 1922—1923 йылдар ине...

## IV

Көтмәгәндә генә үҙем менән бергә уҡыусы Сания исемле бер ҡыҙ минең ҡайһы ауыл малайы булыуымды һорашып белде лә:

— Беләһегеҙме нәмә, һин беҙҙең еҙнәбеҙ икәнһең дә баһа. Һинең кәләшең Хәтимә әхирәт минең тиңдәш ҡыҙым булыр, беҙ уның менән бер ауылданбыҙ, — тине.

Ҡыҙҙың ауыҙынан бындай һүҙҙәрҙе ишеткәс, тәүҙә аптырап ҡалдым. Был ҡыҙ мине шаяртамы, юрый көлөр өсөн генә әйтә микән, тип уйланым.

Ләкин ул ысынлап һөйләүен белдерә башланы.

— Ул һиңә сәләм һөйләргә ҡушты, күрергә ине үҙеңде, матур егет микән, тип әйтә, — тип көлөп ҡуйҙы. Минең бер ҡыҙарып, бер уңарып, нимә тип әйтергә лә белмәй, тәрән уйға батҡанымды күргәс, шыбырлап ҡына:

— Атайың һиңә минең әхирәтемде һеҙ бишектә ваҡытығыҙҙа уҡ йәрәшкән, һин ул ҡыҙҙың ҡолағын тешләгәнһең, һырға-һабаҡ һалыш булған бит, — тине. Шулай ҙа, бер нәмә лә аңламағанға һалышып:

— Әкәмәт икән, — тип көлгән булдым. Ә үҙем эстән генә был ҡыҙыҡлы хәлде уйлап, ышана инем. Бөтә уйҙарым үткән балалыҡ сағыма тиклем йүгерҙеләр. Мине кескәй генә сағымдан алып «кейәү» тип йөҙәткән Мөхитдин, ҡасандыр апайҙарымдың үртәүҙәре, үсекләүҙәре бер минут эсендә томанлы ғына рәүештә күҙ алдыма килделәр.

Ысынлап та, был эш дөрөҫ, ул ҡыҙ бар һәм мине белә икән, тигән фекерҙе ныҡыта башланым. Йәшлек тилелеге еңә, күрәһең, үҙем эстән генә:

— Беләһе ине, матур, әллә бик йәмһеҙ ҡыҙ микән? — тигән кеүек төрлө уйҙар менән ватыла башлаһам да, уның тураһында ентекләп һорашырға ҡыйыулығым етмәне. Был ваҡиға минең өсөн осо табылмаған бер ҡыҙыҡлы төйөн булды. Ә Сания, һөйләне-һөйләне лә, шарҡылдап көлөп китеп барҙы...

Ҡышҡы каникулға таралған саҡта:

— Әхирәтеңә минән сәләм һөйлә! — тип, юрый шаяртып ҡына әйтеп һалдым теге Сания исемле ҡыҙға.

Күрәһең, ул минең сәләмде тапшырған булған. Бер мәлде, каникул уҙғандан һуң, әйләнеп килгәс:

— Бына һеҙгә хат һәм бүләктәр, — тип тегелеп кенә ҡулдан яһалған конверт менән кескәй генә бер төйөнсөктө минең ҡулыма килтереп бирҙе. Башта ни эшләргә белмәйенсә ҡаушаһам да, һуңынан батырлана төштөм. Шунда уҡ, бер ситкәрәк китеп, хатты уҡый башланым. Унда:

«Әлхат, нисфулмөләҡат, һағынып яҙҙым сәләм хат, бик һағынһаң уҡып баҡ, һағынмаһаң утҡа яҡ!» — тип башлаған да: — «Суҡ-суҡ ебәргән сәләмдәреңде килтереп тапшырҙылар. Рәхмәт мине иҫеңә алып сәләм ебәреүеңә. Мин һине күрмәһәм дә, бик яҡшы беләм, мин һиңә кескәй генә сағымда — бишектә ваҡытымда уҡ йәрәшелгәнмен. Һин минең ҡолағымды тешләгәнһең, һырға-һабаҡ һалыш булған. Шуның өсөн һине күрәһе, бер осрашып ҡош кеүек һайрашып һөйләшәһе, серләшәһе килә. Һеҙ уҡыған ауылда әсәйемдең яҡындары бар, әсәйем менән, бәлки, шуларға ҡунаҡҡа барырбыҙ. Ҡош телендәй генә булһа ла, бер хат яҙ! Яҙаһы һүҙҙәрем күп ине, ваҡыт бик тар булды, унан кешеләр күреп-белеп баралар. Хәҙергә хуш! Ҡайнар сәләм менән ғүмерлек йәрең Хәтимә», — тиеп яҙылған. Хатты уҡып сыҡҡас:

— Бына һиңә кәрәк булһа, көтөлмәгән кәләш, бына ни өсөн уның атаһы Мөхитдин мине кейәү тип йөҙәткән. Туҡтағыҙ әле, минең менән улай иҫке ғәҙәтсә

эшләй алмаҫһығыҙ! — тип, эстән генә янып ҡуйған булдым. Унан һуң төйөнсөктө сисеп ҡараным. Төйөнсөктә төрлө сәсәктәр төшөрөлөп сигелгән ҡулъяулыҡ, етмәһә, мөйөштәренә минең дә, үҙенең дә исемен төшөргән. Үҙе аяуһыҙ еҫле майға манылған. Май еҫе шунда уҡ бүлмәне тултырҙы. Бер киҫәк еҫле «Гөлжиһан» һабыны һәм кескәй генә тоҡсайға тултырылған баллы йыуаса...

Бына шулай, нисек кенә итеп тә күҙ алдыма килтерә алмаған ниндәйҙер Хәтимә исемле ҡыҙ, минең уйҙарымды, бөтә хыялымды көтмәгәндә үҙенә бәйләне.

Уҡыуҙар көслө ағым менән дауам итә. Бергә уҡыған иптәштәрем дә ҡайҙандыр ишетеп алғандар ҙа, ҡайһы ваҡыт күҙ ҙә астырмай көләләр. Ләкин, мин бәләкәй сағымдағы апайҙарым үртәгәндәге һымаҡ бирешмәйем. Тик, был турала уҡытыусылар ғына ишетеп ҡалмаһалар ярар ине, тип ҡурҡа инем.

Ләкин, уҡыу йылы бөткәнгә тиклем, миңә ул «ҡолағы тешләнгән» ҡыҙҙы күрергә тура килмәне. Ул шулай, тик бер хыялдағы иҫтәлек кенә булып ҡалды...

## V

1926 йылдың июнь баштары ине. Мин Өфө урта мәктәптәренең береһендә уҡып, йәйге каникулға ҡайтып барам. Йәйҙең тәүге ҡыҙыу ҡояшлы көндәре. Ҡыш буйына мәктәп стеналары эсендә йонсоған, талыҡҡан йәш организмды рәхәтлек һәм иркенлек хистәре менән шатландыра. Күңел күтәренке. Талығыуҙы белмәй торған йәшлек нәмәләрҙер уйлата, өйгә ҡайтҡас та, яңы көс-энергия менән ялҡынланып эшләйһе, халыҡ өсөн бөтмәҫ-төкәнмәҫ көс менән йәйелеп хеҙмәт итәһе килә. Ул ваҡыттағыса «Ауылға йөҙ менән!» лозунгыһы менән янып, ысынлап та, ауылдың йөрәгенә, уға ҙур этәргес көс булып, шаулап түгелә инек.

Бына поезд иң аҙаҡҡы станцияға килеп туҡтаны. Ҡулымда ауыр ғына итеп күтәргән кәрзин һандыҡ. Вагондан төшкәс тә, кемделер көтөп тороусы бер

төркөм ирҙәр, ҡатындар һәм бала-сағалар зыҡ ҡубып йүгереп килделәр. Кемделер һораштырып, ҡарандылар ҙа, тағы ла икенсе вагондар буйлап киттеләр. Поезд оҙаҡ торманы, ул ҡуйы парҙар сығарып, бышҡыра-бышҡыра ҡуҙғалып, китеп барҙы.

Кешеләр тарала башланы. Мин маңлай тирҙәремде һыпырып, зәңгәр кепкамды ҡулыма тотоп, кәрзинем өҫтөндә тирә-яҡҡа ҡарай-ҡарай «нисек итеп ауылға тиклем шыуып барып етергә» тигән уй менән ултыра инем. Һис бер көтмәгәндә, хатта күптән үк онотолған, үҙе саҡ ҡына ла танымаҫлыҡ булып үҙгәрмәгән, тик бер аҙ таҙарған, һаҡал, мыйыҡтарын әҙ генә булһа ла тәртипкә килтергән һәм ыҫпай ғына кейенгән, теге Мөхитдин тигән кеше яныма килеп баҫты. Ҡулында сыбыртҡыһы ла бар. Башында иҫкерәк кенә булһа ла, арыу ғына эшләпә, үҙе ғәҙәтсә көләсләнгән. Күптән өҙөлөшмәй килгән таныш-дуҫ төҫлө бик ҡыҙыу-ҡыҙыу атлап килеп еткәс тә:

— Һаумы, кейәү! — тип ҡысҡырып күреште лә — Өфөнән килеп төштөңмө ни, ҡайтырға ат юҡмы әллә? — тип һораша башланы. Мин:

— Эйе, — тип бер генә һүҙ менән яуап ҡайтарҙым. Ул һис уйланып та тормайынса:

— Ҡайғырма, кейәүкәйем, хәҙер үҙем үк алып барып ташлайым. Әйҙә, бер аҙ ҡояштың ҡыҙыуы һүрелгәнсе фатирға барайыҡ. Самауыр ҡуйҙырып сәй эсербеҙ, тамағың кибеп һыуһап та, асығып та килгәнһеңдер, — тине лә, минең кәрзинемде күтәреп алып китеп тә барҙы. Ә мин, теләһәм дә, теләмәһәм дә уның артынан эйәрҙем. Станциянан алыҫ түгел бер ситәндә егеүле аты бәйле торған икән. Иҫкерәк кенә ситәнле арбаһында бер бәләкәй генә ағас һандыҡ кеүек нәмә менән өр-яңы метр үлсәүе ята ине. Арбаға менеп ултырғас та, станция эргәһендәге поселок урамы буйлап киттек. Ялҡау ғына атын шыҡ та шыҡ һуғып ҡыуа. Үҙе:

— Кредитнай товариществала член правления булып эшләйем. Бына бынау метр тигән үлсәүҙәренә

күсеп ятабыҙ ҙа баһа, — тип теге метр үлсәүҙәренә төртөп күрһәтте.

Оҙаҡ та бармайынса, асыҡ торған бер ҡапҡаға боролоп индек. Үҙе арбаһынан төшөр-төшмәҫ, ишек алдына бейек күтәрмә өҫтөнә сығып, «былары ниндәй әҙәмдәр тағы» тигән һымаҡ, бер ҡулын күҙ өҫтөнә зонтик яһап, ғәжәпләнеп ҡарап торған әбейгә ҡарап:

— Хозяйка, самауыр готовамы? — тип ҡысҡырҙы. Әбей ҙә, әллә шуны ғына көтөп торған һымаҡ, белмәйем, таныпҡалыпмылыр, кеткелдәп көлөп ебәрҙе лә:

— Вот сейчас только поставила, — тине.

Атты туғарып, ҡоро бесәнгә бәйләгәс:

— Бер аҙ ашап алһын, унан һыу эсереп, һоло бирербеҙ. Унан барып еткәнсе бирешмәҫ.

Өйгә индек. Мин үҙем менән бергә кәрзинемде лә күтәреп индерҙем. Сәй янына, күстәнәс итеп алып ҡайтып барған кәнфит һәм перәник кеүек нәмәләрҙән бер аҙ алырмын тип уйлағайным. Ингәс тә, кәрзинемде асып, һабын, таҫтамал сығарып алып, яңы ғына ҡоҙоҡтан алынған һалҡын һыу менән бик һәйбәтләп йыуынып алдым. Унан һуң кәнфит, перәниктәр сығара башлағанымды Мөхитдин күреп ҡалды ла:

— Ҡуй, ҡуй, кейәүкәйем, мин үҙем капиратыр була тороп, шәкерт кешенең күстәнәскә тигән нәмәһен ашап ултырмам, әйҙә ҡуй урынына, — тип, минең айвайыма ирек бирмәйенсә, кире һалдырҙы. Үҙе шунда уҡ йүгереп сығып китте. Самауыр ҡайнап өлгөргәнсе, күп итеп кәнфиттәр, перәниктәр һәм аҡ ҡалас алып инде. Кеҫәһенән бер кескәйҙе лә сығарып, өҫтәлгә ултыртты.

Мин нимә тиергә лә белмәйем. Ә ул, мине төрлөсә тартҡылап, һөйләндерергә тырыша. Өфө баҙарҙарында әйбер, аҙыҡ нәмәләренең хаҡтарынан алып, ул яҡтағы һауа торошторын, ямғырҙарҙың яуып, яумауҙары тураһында һорашты.

Самауыр ҡайнап өлгөрҙө. Асылмалы тәҙрә янындағы өҫтәлдә сәй эсә башланыҡ. Сәйҙән алда теге бәләкәй һауытты бушатырға тура килде.

— Мин эсмәйем бит, — тиһәм дә:

— Эсмәгән булһаң, бына мин биргәнде күтәреп эс әле, оҙон юлда талығып килгән быуындарыңды йомшартып ебәрер, — тип көсләп-көсләп теңкәмә тейҙе.

— Атайыңа оҡшамаған икәнһең, бер ҙә яҙылып һөйләшмәйһең дә. Йәшһең шул, бара-бара өйрәнерһең әле, — ти, үҙе көлә ине.

Ләкин, был Мөхитдиндең өҙлөкһөҙ һөйләшеүе, ҡыуаныслы көлөүҙәре менән башланған сәй эсеү, ҡыҙыҡлы ғына ваҡиғаны барлыҡҡа килтерҙе.

Мин өндәшмәй генә сәй эсәм. Бына ул тағы һүҙ башланы:

— Булмаһа, ҡәҙерле кейәүкәйем, бынан туп-тура беҙгә китәбеҙ, ҡунаҡ булырһың. Бер юлы Хәтимәне лә күреп ҡайтырһың, — тине.

Уның был һүҙҙәрен ишеткәс, биттәрем ут кеүек яна башлағанын һиҙҙем. Ҡаршылағы көҙгөлә бик ныҡ ҡыҙарғанымды ла күрҙем. Ул миңә ҡырҡа бәйләнде. Ә мин:

— Юҡ, булмай. Өйгә ҡайтам, — тип киҫеп кенә яуап бирҙем. Ул тағы:

— Йәштәрегеҙ ҙә еткән, тиҙерәк башлы-күҙле булырға ла ваҡыт һеҙгә, — тине.

— Мин уҡыйым бит әле, — тигәс:

— Бәй, бәй, тағы күпме уҡымаҡсы булаһың инде, — тип ғәжәпләнде.

— Рабфакта ике йыл уҡыйһым бар, унан һуң тағы ла дүрт-биш йыл вузда уҡыясаҡмын!

— Һә, һә, һаҡалдарың билеңә төшөп ҡартайырһың былай күп уҡып. Беҙ бына арлы-бирле ҡултамғабыҙҙы ғына ҡуя белһәк тә, советҡа хеҙмәт итәбеҙ. Һинең шул уҡыуың да етер инде, — тип ҡыҙа ғына башлағайны:

— Хәтимәнең белеме нисек, нисә класты тамамлаған? — тип кенә һорарға ла өлгөрә алманым, ауыҙындағы арҡылыға тешләй башлаған ҡыҙыл билле перәник иҙәнгә осоп төштө һәм үҙе бик тиҙ аяҡ үрә баҫты. Ҡапыл йөҙөндә ҡурҡыныслы асыу барлыҡҡа килде. Бик ҡыҙып-ҡыҙып:

— Йә, бисәңде закондар уҡытып, үҙ башыңа түрә итеп ҡуймаҡсы инеңме ни? Баянан бирле һиҙҙем мин һине, юҡҡа ғына йүнле һөйләшмәйһең. Һеҙҙең кеүек интеллигенттар өсөн шул бейек үксәле, нәҙек балтырлы, сәсе киҫелгән, бына бынау пернәник кеүек өҙөлөп торған нәҙек билле ҡала мәрйәләре кәрәк, күрәһең. Юҡ, минең Хәтимәм улай аҙғын түгел. Әйтәм, атайың да йүнле һөйләшмәй. Һеҙ ун һигеҙ йәшкә еткәнсе, өс баш йылҡы затынан, дүрт баш һыйыр, биш баш һарыҡ малынан ҡалым, 200 һум мәһәр түләп ҡуймаҡсы ине, уны ла түләмәне. Ярай, быныһы советса булһын, ти. Етмәһә, малай үҙе нәмә тиер әле, ул бит уҡыған, әнтелегентнәй кеше бит, тип танауын күтәргән була. Ярар, беҙ ҙә үҙ тиңебеҙҙе табырбыҙ әле, — тип, тағы әллә нәмәләр һөйләп ҡысҡырҙы-ҡысҡырҙы ла, сәй эсеп торманы, сығып китте. Мин:

— Эх, тормоштан артта ҡалған, кемде иҫке ҡумыҙға бейетмәксе булаһың, — тинем дә, үҙемде тота алманым, көлөп ебәрҙем.

Мөхитдин атына һоло ла биреп торманы. Тиҙ генә егеп алды ла, ултырып сығып та китте.

Был көтөлмәгән ҡыҙыҡлы ваҡиғаны уйлай-уйлай, күңелле генә, тәмләп сәй эсеүҙе дауам иттем.

*1941 йыл, март*

## Ҡадир Даян
## (1910–1975)

Ҡадир Даян (Ҡадир Хәким улы Даянов) 1910 йылдың 14 февралендә Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ ауылында тыуа.

1927 йылда Ҡоншаҡ урта мәктәбен тамамлай. Уҡытыусылар курсына уҡырға инә. 1930–1933 йылдарҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡый.

Башҡортостан китап нәшриәтендә мөхәррир булып эшләй. Стәрлетамаҡ педагогия техникумында уҡыта. 1936–1941 йылдарҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтының



башҡорт филология кафедраһы мөдире.

Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм миҙалдар менән бүләкләнә. Һуғыштан һуң ул Башҡортостан китап нәшриәтендә мөхәррир, Яҙыусылар берлегендә әҙәби консультант вазифаһын башҡара.

Әҙәбиәткә утыҙынсы йылдарҙа килә. Башҡорт балалар әҙәбиәте, поэзия һәм драматургия үҫешенә ҙур өлөш индерҙе. Ул шиғриәттә йыр поэзияһы традицияһын уңышлы дауам итте.

1938 йылдан Башҡортостан яҙыусылар берлеге ағзаһы ине. Әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн 1969 йылда уға Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән маҡтаулы исем бирелә. 2005 йылда шағирҙың исеме тыуған яғында мәңгеләштерелде – Ҡоншаҡ районында Ҡадир Даян исемендәге премия булдырылды.

Сабаҡлы күл —
Гүзәл Сабаҡлыҡай
Йәмдәр бирә Ҡоншаҡ еренә.
Бер ярынан
Икенсе яҡ яры
Күкһелләнеп кенә күренә.

Эйе, ҙур ул.
Ташлы утрауы бар.
Һыуы тоҙло, диңгеҙ һыуындай.
Ҡырсынташтар,
Аҡһыл ваҡ-ваҡ ҡомдар
Тығыҙланған уның буйында.

Аҡ сабаҡтар уйнай йылтылдашып,
Балыҡсының йөҙөн йылмайтып...
Ҡайһы саҡта әйтеүселәр була:
«Бынан матур күлдәр булмай!» — тип.

Аҡсарлаҡтар оса талғын ғына,
Һауаларҙан һыуға күҙ текәп.
Тулҡындарға ҡапыл атылалар,
Ҡалҡыналар тағы теп-текә.

Ҡоншаҡ яғы —
Ҙур-ҙур күлдәр иле.
Ә Сабаҡлы —
Иң дә гүзәле!
Был яҡтарҙы, дуҫҡай,
Һин күрмәһәң,
Ваҡыт табып, берәй гиҙ әле!
Сабаҡлының күркәм буйҙарында
Элек булған байҙар йәйләүе.
Ул саҡтарҙа,
Тик уларға булған
Диңгеҙ күлдең буйы — бар йәме.

Шул урында бөгөн лагерь гөрләй,
Пионерҙар бында ҡыуана.
Улар ҡомда аунай, һыу төшәләр...
Рәхәтлектән улар — «диуана».

Мин ярында торам Сабаҡлының,
Аҡ тулҡындар йыуа яр ташын.
Әллә шулай ярһып, тулҡынланып,
Ҡаршылаймы мине яҡташым?

Һәм ул шунда минән һорай һымаҡ
(Телләндерҙе уны хыялым):
— Ниңә, Ҡадир, яңғыҙ ғына ҡайттың?
Ҡайҙа Сәләм[1], ҡайҙа Хәй[2] улым?
Ҡайҙа минең данлы ғалим улым —
Тимерғазин[3] — һинең аҙашың?
Шәрифәкәй[4] ҡайҙа?..

---

[1] Сәләм — шағир Ғәлимов Сәләм
[2] Хәй — шағир Мөхәмәтйәров Хәй
[3] Тимерғазин — профессор Ҡадир Тимерғазин
[4] Шәрифәкәй — ВЛКСМ Үҙәк Комитеты секретары Шәрифә Тимерғалина

Ниңә ҡайтмай улар?
Йөрөйҙәрме әллә аҙашып?

— Уларғамы аҙашырға?!
Юҡ, юҡ!
Маҡтанырлыҡ улар ғүмере!
Тик аяныс —
Улар өсөн бик тә
Иртә килде ғүмер эңере.

Эх, ярһыма, сабыр Сабаҡлыҡай!
Ҡайтмаҫ инде улар боролоп.
Туҡта! Мин ишетәм...
Һин дә тыңла!
Улар ҡайтҡан бында йыр булып...

## МАТУР ӨФӨ ҠАЛАҺЫ

Ағиҙелдең буйы йәмле,
Гөл-сәскәле далаһы.
Шул Иҙелдең ярҙарында
Матур Өфө ҡалаһы.

Ҡушымта:
Эх, Өфө ҡалаһы
Ағиҙелдең буйында.
Ҡайҙа ғына йөрөһәм дә,
Һин булырһың уйымда.

Өфө урамдары асфальт,
Бейек яңы йорттары.
Ҡара төндө көндөҙ итә
Балҡып янған уттары.

Ҡушымта.

Өфө баҡсалары матур,
Гөл-сәскәгә күмелгән.
Йәйге көндә бер күрһәң дә,
Мәңге китмәй күңелдән.

Ҡушымта.

Өфө, тиҙәр, Өфө, тиҙәр, —
Өфө матур ҡала шул.
Ағиҙелкәй — яҡты йылға,
Йәмдәр биреп аға шул.

Ҡушымта.

Ағиҙелкәй, Дим буйҙары
Матурлана, яҙ булғас.
Маҡтап йырлай шат Өфөнө
Дим талында һандуғас.

Ҡушымта.

## ТӘҮГЕ КИТАП

Бала саҡта миңә тәүге китап
Булды ҡырҙар, күлдәр, үҙәндәр...
Ҡурай менән ҡош моңдары булды
Үҙәгемдә тәүләп өҙгәндәр.

Һабаҡ бирҙе миңә тыуған ерем,
Ул байлығым минең, шатлығым!
Йәш күңелгә һеңде төҫө, моңо,
Йомартлығы — барлыҡ сафлығы.

Тыуған ерем — бөйөк китап икән,
Шишмәһе ул — аҡыл, илһамдың.
Бик күп яҡтан ярлы булыр инем,
Был китаптан мәхрүм булһам мин.

## БӨРКӨТ ҺӘМ ҺАНДУҒАС

Тау бөркөтө һандуғастың
Тауышына хайран ҡала:
«Ниндәй нәфис моңло тауыш!
Был моңдо ул ҡайҙан ала?..»

Ә һандуғас был бөркөттөң
Ҡанатына хайран ҡала:

«Ниндәй көслө, ҡыйыу канат!
Тауҙан ашып, айбарлана!..»

Шуның кеүек, һәр саҡ ғашиҡ
Талантлылар таланттарға.
Күңелдәре бик киң, асыҡ, —
Тарһыныуҙар ят уларға.

## НИҢӘ ЯРҺЫЙ БЫЛ ЙӨРӘК?

Ниңә күрҙем икән һине
Боҙҙар аҡкан көндәрҙә?
Мин ялҡынмын, һин һалҡынһың,
Күңелдәрең кемдәрҙә?

Ярһып аға, ярҙы ҡаға
Йылғаларҙа ҡар һыуы.
Ниңә ағып китмәй икән
Йәш йөрәктең ярһыуы?

Һинең хаҡта уйламаған
Минуттарым бик һирәк.
Ниңә тынмай, ниңә ярһый,
Ниңә ярһый был йөрәк?

## «АТАЙЫМ КӘҢӘШТӘРЕ» ЦИКЛЫНАН

Атты йүгәнләмәй тороп,
Эйәр һалып менмәйҙәр.
Маҡсатһыҙлыҡ — йүгәнһеҙ ат,
Ә маҡсатһыҙ елмәйҙәр.

* * *

Бер өҙөлгән епте ҡабат
Ялғаһаң да, төйөн ҡала.
Дуҫың булһа, дуҫлыҡ ебен
Өҙмәйенсә йәшә, бала!

* * *

Ҡаҙандағы һыуҙар ташмай,
Аҫтында ут булмаһа.
Ғәжәпләнмә — юҡҡа булмаҫ,
Әгәр ирҙәр илаһа.

* * *

Бойоҡ сәскәләрҙең күҙен аса
Иртә менән ҡояш нурҙары.
Кеше йөрәге лә киң асыла,
Йылы ҡараш кәрәк ни бары.

## ШАЙМОРАТОВ ГЕНЕРАЛ

Башҡорттар китте һуғышҡа,
Оҙатып ҡалды күк Урал:
Ат уйнатып алдан бара
Шайморатов генерал.

Шайморатов яу ҡырында
Дошмандарҙы көл иткән;
Утта янмай, һыуҙа батмай,
Һай, батыр ҙа ир икән.

Совет халҡы Тыуған илдән
Ҡыуҙы яуыз дошманды;
Бер туғандай үтәнеләр
Изге Ватан ҡушҡанды.

Ватан өсөн йән ҡыҙғанмай
Һинең улдарың — Урал;
Шулар менән дошман ҡырҙы
Шайморатов генерал.

## БАШҠОРТ ҠЫМЫҘЫ

Кемдәр һауа бейәләрҙе,
Әллә Һаҡмар ҡыҙымы?..

Көс тә бирә, дәрт тә бирә,
Һай, ҡымыҙы, ҡымыҙы!

Эх, ҡымыҙы, ҡымыҙы ла,
Был ҡымыҙға ни етә!
Күңелдәрҙе елкендереп,
Йырлата ла бейетә.

Эсеп ебәр шул ҡымыҙҙы,
Һыуһындарың баҫылыр.
Күңелдәрең бойоҡ булһа,
Балҡый-балҡый асылыр.

Эх, ҡымыҙы, ҡымыҙы ла,
Был ҡымыҙға ни етә!
Күңелдәрҙе елкендереп,
Йырлата ла бейетә.

## Ғ. Сәләм

## (1911–1939)



Ғ. Сәләм (Сәләм Ғәлим улы Ғәлимов) 1911 йылдың 18 ғинуарында Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Тәгеш ауылында тыуа.

1928 йылда Арғаяш урта мәктәбен тамамлай. 1930 йылда Ғ. Сәләм «Башҡортостан» газетаһына эшкә саҡырыла. 1933–1937 йылдарҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтында уҡый. Студент сағында институтта әҙәби түңәрәк аса. Тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтына эшкә ҡалдырыла. 1938 йылдың көҙөнән алып Ленинградта фольклористика буйынса аспирантурала уҡый. 1939 йылда ҡаты ауырып китеп, вафат була.

Уның тәүге шиғырҙары матбуғатта егерменсе йылдар аҙағында баҫыла башлай. 1932 йылда «Тревога» исемле

тәүге китабы донъя күрә. Ул үҙен әҙәбиәттә атаҡлы шағир, журналист һәм фольклорсы итеп танытты.

Ғ. Сәләм – лиро шағир, шағир-патриот һәм шағир-новатор. Уның поэмалары һәм балладалары бөгөн дә әһәмиәтен юғалтмай. «Шоңҡар», «Бала», «Ғүмер», «Ҡыҙыл букет», «Республика иртәһе» әҫәрҙәре башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондын тәшкил итә.

1934 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар берлеге ағзаһы ине.

## РЕСПУБЛИКА ИРТӘҺЕ

1

Паровоздар киҫеп сыҡҡан ерҙә
Урал ҡаялары уртаһын,
Ап-аҡ ташҡа баҫып,
Ҡарап торҙом
Республикамдың мин иртәһен.
Тын күлдәргә төшкән аҡҡошмо ни,
Уйһыуҙарҙа ята аҡ томан,
Ниндәй йәнле иртә!
Бына бер саҡ –
Тау биттәрен солғап яҡтыға,
Ҡояш сыға башлай,
нурҙарына
Йым-йым итә Урал таштары;
Иртәнге ел,
әкрен генә өрөп,
Һыйпап үтә үлән баштарын...
Күрәм:
Эшкә тора республикам,
Һөрән һалды бына гудоктар,
Эшсе өйҙәр, ҡояшҡа ҡаратып,
Тәҙрә асты,
ошо минутта
Ҡайһы ҡаялалыр динамиттар
Таш аҡтарҙы,
һауа ярыла...
Сайҡалғандай булды мин баҫҡан тау,
Тибрәлгәндәй шунда бар Урал.

Тән семерләп китте,
Ә ҡулдарым
Тотондолар ҡайраҡ таштарға.
Юҡ, бер ни юҡ!
Ахыры, шиғыр яҙып,
Нервым ғына бер аҙ ҡаҡшаған.
Күҙ ташлайым ҡабат:
Иҙел буйлап
Колхоз ауылдары тартылған.
Уяналар өйҙәр,
шау-шыу булып,
Көтөү сыға әүен артына,
Тереләләр юлдар.
Автобустар
Ҡыҙ һәм егеттәрҙе тейәгән,
Баҫыуҙарға бара,
ә арыраҡ,
Башаҡ тулҡынланған ерҙәрҙә,
Ҡуҙғалдылар баҫыу караптары,
Ҡыр күмелә күмәк эш менән:
Һабансылар йыры,
тракторҙар
Гөрөлдәүе,
баҫыу өҫтөндә
Мең томдарҙа бөтмәҫ роман тыуа,
Ноталарға һыймаҫ тауыштар,
Буяу төрө етмәҫ картиналар...
Бына тағы йәшел ҡамыштан
Кәмә сыҡты,
Күмәк йыр башланды,
Кемдер баҫты тальян телдәрен.
Беләм, былар — күрше ял йортонан,
Шулай башлай улар көндәрен.

2

Республикам тора,
аҙмы тағы
Миңә күренмәгән урындар?

Фонтан атҡан нефть вышкалары,
Ҡорос заводтары...
Борон-борондан
Тик ҡурай һыҙғырған сәхрә буйлап
Күтәрелгән яңы ҡалалар,
Ҡайҙа үҫә булыр Димитровтар
Һәм Чкалов кеүек балалар.
Аҙмы тағы ла өйҙәр!
Ҡайҙа бөгөн —
Мең йыл тулған саҡта йәшенә,
Үрмәкселе емерек һикеләргә
Тимер карауаттар алышына.
Аҙмы колхоз,
тәҙрәләргә
Электролампа ҡуйыла,
Ҡайҙа ғүмереӊ данлы йыр шикелле,
Бәхетеӊ йәшлек кеүек тойола.
Унда кешеләр эшкә,
Ялға хаҡлы,
Унда кешеләр йырға хаҡлылар,
Унда кешеләр яҡшы ғүмер юлын
Партия аҡылы менән таптылар.

3

Көн башлана,
Илем тағы ла ниндәй
Шатлыҡ менән ҡабынып балҡымаҫ!
Айырым аҡҡан ике йылға ҡушылыр,
Орден алып ҡайтыр батырҙар;
Татьянаның арияһын йырлар
Ферма ҡыҙы стан ҡаршында,
Бригада ҡул сабыр
үҙенең ҡыҙын
Һәм Чайковскийҙы алҡышлап;
Һыйырһыҙға колхоз һыйыр бирер,
Өйһөҙҙәргә өйҙәр һалырҙар.
(Ә ҡасан һуң колхоздарға тиңдәш
Яҡшы шиғыр яҙыр шағирҙар?)

Кемдер бөгөн яңы вуз бөтөрөр,
Корпустарға кирбес өçтәлер,
Кемдәрҙеңдер семья башлауҙарын
Теркәр тағы ЗАГС өçтәле...
Бында тауҙар,
бында киң баçыуҙар.
Ҡарап торам,
шул саҡ янымдан
Көн яғына китте цистерналар,
Уралыма керҙе вагондар.
Пассажирҙар бара,
Кемдер берәү
Яулыҡ болғап, моңһоу ҡараны.
Бәлки,
Уның егете лә станцияла
Минең кеүек баçып ҡалғандыр...

4

Машинист дуç,
йә һин паровозды
Аҡрынайтыр инең бер аҙға,
Һинең менән барған пассажирҙар
Республикам аша уҙғанда,
Тағы ла оҙаҡ ҡараһындар уның
Нефть тулған уйһыу буйҙарын,
Алтын кейенеп ятҡан ҡаяларын,
Аҡсарлаҡтар сумған һыуҙарын.
Тыңлаһындар:
бында ҡасандыр бер
Пушкин күргән телһеҙ башҡорттар
Беренсе ҡат бөгөн
үҙ телендә
Уның шиғырҙарын уҡыйҙар.
Тыңлаһындар беҙҙең ҡыҙҙар йырын,
Минең илдең иртән тороуын,
Ситлектә ҡартайған ыласын ҡоштоң
Йәшәреүен, яңынан тыуыуын!

5

Таштар ҡултығында паровоздың
Аҡ толомо ҡалды ишелеп,
Күк вагондар тауға ышыҡланды,
Ашығып ҡасҡан йылан шикелле.
Тауҙар, тауҙар!
— Ҡайһы тау бейек? — тип,
Мин Уралға тағы ла ҡараным.
Тик тапманым шул тауҙарҙа тыуған
Шатлыҡтан да бейек ҡаяны!

## ЙӨРӘК ТҮРЕНДӘ

Шиғырҙы ла, дуҫтар, тәнде лә
Үҫтерәһе ине тиң итеп,
Булмай!
Шиғыр ите үҫкән һайын,
кәмей тән ите.
Тик:
— Арыған, тимә,
Тән талһа ла,
Күҙҙәремдә бойоғоу күренмәҫ,
Ун ғүмергә бөтмәҫ йәшәү дәрте
Йөрөтәм мин йөрәк түрендә!

## ҒҮМЕР

Кем булғандыр егет:
Шахтананмы,
Колхозданмылыр ул, ҡайҙандыр,
Эштәнме ул ҡайтҡан,
Әллә юҡһа
Эшкәме ул китеп барғандыр;
Мастермылыр, инженермылыр ул,
Конюхмылыр әллә һунарсы?
Һис бер яуап ҡайтарманы егет,
Юҡ ине һәм унан һораусы.
Ул һуҡмаҡтан бара ине фәҡәт

Төн төшкәндә тайга эсенә,
Шиғыр ине был төн шағирға ла,
Һәм шағир булмаған кешегә.
Төн тын ине,
егет барҙы һаман
Һуҡмаҡ менән дамба буйынан,
Бейек ҡом өйөмө,
ә өҫтөнән
Уссурия юлы һуҙылған.
Егет юлға менде,
кинәт алда
Ниндәйҙер бышылдау ишетелде.
Егет юлға менде,
сеү, шәүләләр...
— Ҡарағаймы? Бәлки, кешелер...
Шәүләләр ҡуҙғала.
«Туҡта, кемдәр?!»
Егет ашығып алға атланы...
Ул алға атланы, кинәт шул саҡ,
Тынлыҡ емереп, дары шартланы.
Бер секундҡа егет ҡалтыранды,
Бысаҡ телдеме ни тән итен?
Башын тотто, айнығандай булды,
Аҡрын ғына күҙен йөрөттө,
Инде ҡараһа ла:
шәүләләр юҡ,
Өҙөк рельс бары алдында.
Ул һиҫкәнеп китте...
Ә бит тиҙҙән
Үтәсәктәр бынан вагондар...
Ниҙәр булмаҫ совет вагонында,
Бәлки, сиккә тигән ҡоралдыр!
Кемдәр юҡтыр унда:
йә күмерсе,
Йәки һаҡсы, йәки командир!
Йә водовоз, ғалим йәки лётчик,
Йә пионер, кассир йә шағир?..

Улар посҡа,
эшкә,
ял итергә
Йәки туй яһарға баралыр.
Бына шулар барыһы йотолорҙар,
Үлем киҫер улар ғүмерен...
Ҡайһыһы һуң уның ҡиммәт түгел?
Нишләһен ул?.. Бары — бер үҙе...

Ул ҡысҡырыр ине ишетелһә,
Яулыҡ болғар ине күренһә,
Ниндәйҙер шау ишетелә... Поезмы
әллә?
Юҡ, күренмәй алда бер ни ҙә.
Шаулау арта бара,
ҡолағы тона,
Ҡан төйөрсөкләнә күҙендә.
Сеү, ҡулдары кинәт яңаҡ буйлап
Йылы ҡан һарҡыуын һиҙҙеләр.
Сеү, был шаулау, бәлки, тамыуылыр
Үҙ ҡанының һуңғы тамсыһы?
Аҡтыҡ тапҡыр быҫҡып яныуылыр
Ғүмер юлының һүнер саҡҡыһы.

Юҡ, юҡ, түгел!
Әле тамыр тибә!
Ҡанлы башта уяу фекере.
Үҙ йәшәүен ҡанға ағыҙа-ағыҙа,
Паровозға йәшәү килтереп,
Егет алға барҙы,
ә күҙҙәрен
Поезд килер яҡҡа төбәгән,
Ә тирәлә — бары ҡарт нараттар,
Ҡарт нараттар баҫҡан тирәгә.
Ниңә улар һүҙһеҙ баҫып тора?
Ниңә улар ярҙам итмәйҙәр?
Ниңә улар йәки: — Әй, машинист,
Паровозды ҡыума! — тимәйҙәр.

Быуындары һынды егеттең,
Күҙен баҫты томан, ҡара ҡан...
Кем ишетер уны? Ниндәй сара!..
Тағы ла атлай... Туҡтай, сайҡала.
Кинәт егет ауҙы...
Ниҙер юғалтҡандай,
Ҡапшанды ул һуңғы көс менән.
Тынысланды бары кәүҙәһенең
Ятыуын тойғас рельс өҫтөндә.

Тынысланды...
Ҡанһырауҙан уның
Һуңғы тамсы ҡаны тамһа ла,
Тик тамманы уның йөрәгенән —
Бер ҙур уйы ҡалды һаман да:
«Минең үлемем яңы тормош башлар
Йөҙ-йөҙ иптәш ғүмерен ҡотҡарһа,
Улар менән бергә мин йәшәрмен
Заводтарҙа... Колхоз... Постарҙа».

Ә был саҡта һаман ҡарт нараттар
Баҫып торған тирә-яҡтарҙа,
Күреп торған улар: рельс буйлап
Совет вагондары сапҡандар.

Күреп торған улар: ҙур паровоз
Яҡынлашҡан һайын кәүҙәгә,
Көсһөҙ ҡулдар һаман паровозды
Артҡа этәрергә теләгән.

Ә һуңынан улар ергә ятҡан,
Ауыр тәгәрмәстән еңелеп,
Поезд туҡтатылған,
пассажирҙар
иҫкә алған уны баш эйеп.
Кем булғандыр егет,
шахтананмы,
Колхозданмылыр ул, ҡайҙандыр,
Эштәнме ул ҡайтҡан, әллә юҡһа
Эшкәме ул китеп барғандыр...

Ул ҡайҙа барғандыр,
Унда уны
Кемдер көтөр, кемдер һағыныр...
Ҡуйсы, иптәш,
юҡ, һорама инде,
Яуап бирмәҫ егет барыбер.

Ауыр тойғо ятты һәр юлсыға,
Йөрәктәрҙә асыу ҡабынды,
Киҫәктәргә турар ине улар,
Ҡулға төшһә, шунда дошманды.
Һәр берендә
бөйөк нәфрәт янды,
Тик белмәне улар: шул кисте
Юлды шартлатыусы ике бандит
Ҡулына төштө үткер чекистың.

## ҠЫҘЫЛ БУКЕТ

*(Баллада)*

### I

Чан Жи — ярлы ҡытай улы,
Ҡыҫҡа уның тормош юлы:
Мин был йырҙы яҙғанда
Ун йәш ине Чан Жиға.

Байрам ине Чан Жиҙарҙа,
Йәш туйы ине уларҙа,
Килгәйне йәштәштәре,
Урамдаш иптәштәре.

Чан Жиға килгән дуҫтары,
Атаһы ҡайтмаған бары.
Уның атаһы күптән
Партизандарға киткән.

Ерҙе япон алмаһын тип,
Ҡул бығауҙа ҡалмаһын тип,

Һуғышта йөрөй һаман,
Ах, йылдар ниндәй яман!

— Чан Жи, шат бул! — ти иптәштәр. —
Ул ҡайтыр һуғыш бөткәстән,
Һин дә үҫерһең, Чан Жи,
Батыр булырһың, Чан Жи.

Балалар күп уйнанылар,
Яңы йырҙар йырланылар,
Чан Жиҙың бәхетенә,
Йәш тулыу хөрмәтенә.

Ал, ҡыҙыл, һары төҫлөнән
Һәр бала сәскә килтергән,
Еҫкәргә ниндәй тәмле,
Ҡарарға ниндәй йәмле!

Ни тиклем сәскә йыйылды,
Чан Жиҙың ҡосағы тулды
Иптәштәр бүләгенән,
Иптәштәр теләгенән.

Сәскәләрҙең тик алынан
Бер букет яһап ҡуйҙылар,
Өҫтәлгә ултырттылар,
Тирәләп ураттылар.

Уртала өҫтәл ултыра,
Өҫтәлдә ал букет тора,
Һоҡланғыс ҡыҙыл букет
Ултыра хуш еҫ бөркөп.

Букетҡа ҡарай балалар,
Тирәләп, йырлап уҙалар:
— Беҙ сәскәне һөйәбеҙ,
Сәскә булып көләбеҙ.

Ал букет шикелле гүзәл
Беҙгә лә көн килер тиҙҙән.
Һин дә үҫерһең, Чан Жи,
Батыр булырһың, Чан Жи.

## II

Төн төштө өй алдына,
Ҡунаҡтар ҙа таралды.
Чан Жи һаман подвалда
Әсәһе менән ҡалды.

Өҫтәлдә дуҫтар бүләге —
Ҡыҙыл букет ултыра,
Букетта Чан Жи күҙҙәре,
Ә әсәһе һыу ҡоя.

— Улым, арығанһыңдыр,
Ваҡыт, улым, йоҡласы.
— Әсәй, ниңә өй һалҡын,
Мейескә утын яҡһаңсы.

— Улым, мейескә яғырға
Утын бармы ни беҙҙә?
Килсе, әйҙә, яныма,
Йылыраҡ булыр бергә.

— Әсәй, ниңә төн һуҡыр?
Ниңә ай тыумай икән?
Беҙҙең сыра юҡлыҡты
Әллә ай белмәй микән?

— Йоҡласы, бәғ(е)рем, иркәм,
Мин иртән иртә торам,
Элек атаң эшләгән
Заводҡа эшкә барам.

— Әсәй, атайым минең
Был саҡта ҡайҙа икән?
Улар ҙа беҙҙең кеүек
Йоҡларға ятты микән?..

## III

Төндә заводты уратып,
Килде япондар,
Йәйәү, атлылар.

Яндырҙылар посёлканы,
Ҡамап ялҡынға,
Буяп ал ҡанға.

Таңға тиклем һуғыш барҙы
Һәр бер урамда,
Һәр ишек алда...
Бар һауа яңғырап торҙо:
— Бир самурайға!
— Еңеүгә, алға!

Чан Жи уянды шау-шыуға,
Кемдәр ҡысҡыра?
Сеү, нимә булған?!
Чан Жиҙың әсәһе ҡайҙа?
Яулығы ҡалған.
Пинжәге ҡалған.
Подвал эсе сыбарланған
Урам утына,
Янғын утына,
Ә өҫтәл өҫтөндә һаман
Букет ултыра,
Алланып тора.
Букетты алды ла Чан Жи
Урамға сыҡты,
Ашығып сапты.
Инде ҡайҙа барһын Чан Жи?
Мәйеткә баҫты
Һәм ҡанға батты.
Чан Жи букетын тотҡан да,
Һис һүҙһеҙ бара,
Аптырап ҡала:
Ҙур завод күренә алда,
Ҡыйығы яна,
Ҡоймаһы ауа.

Завод ҡапҡаһына еткәс,
Сигенде ҡапыл.
Юҡ, етмәй аҡыл!
Чан Жи нишләһен һуң, иптәш?

Йөрәге ялҡын,
Ҡулдары һалҡын.

Ниндәй бәлә? Ох, әсәһе
Йығылған салҡан,
Ауыҙы ал ҡан.
Уның бөҙрә ҡара сәсен
Елдәр тараҡҡан,
Күҙҙәре ҡатҡан.

— Әсәй?! — тип ҡысҡырҙы Чан Жи,
Уға йығылды,
Быуыны һынды.
Әсәһенең биттәренә
Яңағын ҡуйҙы,
Сәстәрен йыйҙы:

— Әсәй, торсо, әсәй! — ти ул,
Саҡыра ҡабат,
Моңайып ҡарап.
Әсәһе генә улына
Ҡайтармай яуап.
Юҡ йылы яуап.

Әсәһенең күкрәгендә
Чан Жи иланы,
Оҙаҡ иланы.
Чан Жи башын күтәргәндә
Ер яҡтырғайны,
Ҡояш тыуғайны.

Ер мәйеттәрҙән ҡапланған,
Йөҙҙәре ҡанлы,
Түгел танырлыҡ.
Башһыҙ самурайҙар ғына
Йәки шпорлы,
Йәки погонлы.

Чан Жи әсәһенә тағы
Бик оҙаҡ ҡарай,
Көлмәй, иламай,

Уға букетынан алып
Ал сәскә ҡаҙай,
Әсәһен наҙлай.

Сеү, Чан Жи, нимә бар унда?
Ышанмай үҙе,
Алдаймы күҙе?
Әсәһенең уң ҡулында
Бер граната күрҙе,
Бер граната күрҙе.
Ул граната шартламай ҡалған...
Ҡурҡынды Чан Жи,
Ҡыуанды Чан Жи.
Ялт-йолт итеп тирә-яҡҡа
Ҡаранды Чан Жи,
Күҙ һалды Чан Жи.

## IV

Посёлоктың көньяғында,
Урман буйы ҡалҡыуҙа,
Заводчик имениеһында
Штаб ҡорҙо япондар.

Япондар штабы ҡайнай,
Рапорт яҙа генерал,
Ул яҙа бөгөнгө еңеү
Һәм еңелеү турында.

«Поселокты ҡулға алыу
Беҙ тигәнсә булманы,
Бер һалдат та үлмәҫ, тинек, —
Ярты ғәскәр юғалды.

Бар посёлок ҡорал тотоп,
Ҡаршы ташланды беҙгә.
Ут һалдыҡ, плен алманыҡ.
Тынлыҡ хәҙер бар ерҙә...»

Генерал ҡуша:
— Рапортты
Токиоға ебәрегеҙ!
— Була! — ти уға поручик. —
Токиоға ебәрербеҙ!
Рапортын яҙғас, генерал
Бара тәҙрә төбөнә.
Ә тышта — посёлок яҡтан
Бер бала йүгереп килә.

Сеү, ниндәй бала икән был?
Ҡулына букет тотҡан.
— Был букет генералға! — ти
Үткәндә һәр бер постан.

Часовойҙар тотмай уны,
Пароль дә һорамайҙар.
Уның ал букетын күргәс:
— Молодец! — тиҙәр улар.

— Был букет генералға! — ти,
Бала шат, көлөп килә,
Килгән һайын букетын да
Күтәрә бирә үргә.

Сәстәре елпенеп туҙған,
Ерҙә саң осоп ҡала.
Бына ул штабҡа етте,
Ал букет тотҡан бала.

— Был букет генералға! — ти,
Ул генералға керә.
Туҡта, был бала — Чан Жи бит!
Штабҡа Чан Жи керә...

Букетын өҫкә күтәреп,
Чан Жи былай өндәшә:
— Кисә мин ун йәштә инем,
Бөгөн мин ун бер йәштә.

Минең тыуған көндө ҡотлап,
Миңә букет бирҙеләр.
«Ҙур булып үҫ һин, — тинеләр, —
Батыр бул һин», — тинеләр.

Бөгөн шул букетты һеҙгә
Бүләк итеп тапшырам.
Тапшырам һеҙгә, — ти, — Чан Жи, —
Һеҙ еңеү шатлығынан.

Генерал ҡыуана быға,
Офицерҙарын йыя:
— Ҡарағыҙ, господиндар, — ти,
Күрһәтә һәм Чан Жиға. —

Был баланың букетын, — ти, —
Рапортҡа беркетегеҙ.
Рапорт менән Токиоға
Букетты тиҙ илтегеҙ.

Господа офицерҙарым,
Беҙгә бик ҙур бүләк был,
Ҡытай халҡының японға
Булған мөхәббәте был. —

Шулай тине лә генерал,
Букетты алды ҡулға.
Тукта, нишләп букет ауыр,
Эсенә нимә тулған?..

Ташларға өлгөрмәне ул,
Яҡ-яҡҡа туҙҙы букет.
Эсендә граната шартланы,
Бар штабҡа ут бөркөп.

Уң яҡҡа ауҙы генерал,
Һул яҡҡа ауҙы Чан Жи.
Бер тыпырсынды генерал,
Тыпырсынманы Чан Жи.

# М. Хәй
# (1911–1942)



М. Хәй (Хәй Ғабдрафиҡ улы Мөхәмәтйәров) 1911 йылдың 15 сентябрендә Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Ҡунаҡбай ауылында тыуа.

Башланғыс белемде тыуған ауылында ала. 1928 йылда Өфөләге Ленин исемендәге урта мәктәпте тамамлай. Силәбе өлкәһенең Арғаяш кантонында эшләй. Өфөгә күсеп килә. 1929 йылда балалар өсөн асылған «Аманат» («Керпе», «Пионер») журналының тәүге мөхәррире була. «Ленинсы», «Йәш коммунар» газета редакцияларында мөхәррир, урынбаҫар вазифаларын башҡара.

1937 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай. Мәскәүҙә мөхәррирҙәр һәм тәржемәселәр курсында уҡый. 1938–1940 йылдарҙа – ул Башҡортостан Тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтында ғилми хеҙмәткәр. Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән фронтҡа китә һәм 1942 йылда батырҙарса һәләк була.

Уның тәүге шиғырҙары матбуғатта егерменсе йылдар аҙағында баҫыла башлай. 1931 йылда «Барышта» исемле тәүге китабы донъя күрә. Утыҙынсы йылдарҙа шиғриәткә сонет жанрын индерә һәм фәлсәфәүи лириканы үҫтерә.

1934 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар берлеге ағзаһы ине.

## УЙҘАР

Халҡы күтәргән кешенән
Йондоҙҙар ҙа көнләшәләр;
Халҡы тибәргән кешенән
Йыландар ҙа ерәнәләр.

Халыҡҡа булған һөйөүҙе
Һис бер көс һүндерә алмаç;
Халҡы үçтергән батырҙар
Һыуҙа батмаç, утта янмаç.

Халыҡ нәфрәте яндыра,
Һөйөүҙе ҡанатландыра;
Тик бер ҡарашы ла уның
Бәхет тауына күтәрә,
Рухландыра һәм күрһәтә
Сиге булмаған донъяны.

## ЕГЕТ БУЛҺАҢ

Егет булһаң, бул алтыны,
Ҡыҙҙар, алтыным, тиһен.
Янһын йөрәгең ялҡыны,
Матурҙар яныр һөйһөн.

Егет булһаң, йондоҙҙай бул,
Йондоҙҙо ҡыҙҙар күҙләй.
Йондоҙ күрһәтә яҡты юл,
Бар йыһанды балҡыта ул,
Зәңгәр күк йөҙөн биҙәй.

Егет булһаң, бул сәскәләй,
Ҡыҙҙар сәскәне һөйә.
Гөлгә ҡуна күбәләктәр,
Гөл-сәскәлә елбәҙәктәр,
Илгә гөл еç, йәм һибә.

## ӨЛГӨРӨҮ

Әҙ булһа ла тормош утын үттем,
Асыһын да күрҙем мин уның.
Әгәр һәр саҡ татлы бал булһа,
Ни ҡыҙығы булыр донъяның.

Үçмер инем. Йәшен һуҡҡан кеүек,
Мин уяндым. Еңел уйҙарым

Томандай таралды. Бер дәүергә үҫтем.
Шул сағымды маҡтап йырланым.

Эх, йәшәһен кеше өлгөрөүе,
Эх, йәшәһен тормош көлөүе,
Ҡояш төшә шул саҡ янында.
Хистәр ташып тула күңелемә,
Ҡарар итәм: ҡыҫҡа бер ғүмеремдә
Бер биш ғүмер йәшәп ҡалырға.

## ҺҮҘ

Һүҙ таш яра.

*(Халыҡ мәҡәле)*

Ҡиммәт түгел алтын донъяла,
Динамит та бик көслө түгел;
Усаҡ уты йәнде йылытмай;
Бысаҡ менән кителмәй күңел.

Аяҙ көндө йәшен йәшнәмәй,
Ҡараңғыла күрә алмай күҙ;
Ә шуларҙың барыһын бер юлы
Үҙ сифаты иткән бөйөк һүҙ.

## ИДЕАЛҒА ЫНТЫЛЫУ

Бал ҡортондай тырышып, ҡырмыҫҡалай
Үрмәләһә текә таш-тауға,
Шунда сыға кеше ҙур донъяға,
Шунда сыға яҡты идеалға.

Ҡай ваҡытта тормош тауҙай баҫа,
Бәхет тойола бик-бик йыраҡта.
Ҡыйыу барам. Идеал саҡыра мине,
Фекерем, рухым сыныға шул саҡта.

Икеләтә арта минең көсөм,
Күңелемдән ташып сыға хисем,
Ышаныс йондоҙомдо мин күрәм.

Ниндәй бәхет ерҙә йәшәү, тим мин,
Ергә һыймай, идеал, бәхетең һинең,
Шатлығың да һинең бик тәрән.

* * *

Мин һөйөрмөн, иркәм, һине
Күңелең саф булһа ғына;
Үҙең кеүек йәш илеңдең
Һөйгәне булһаң ғына.

Ике ҡат артыҡ һөйөрмөн,
Ысын йөрәк менән һөйһәң.
Һандуғас булып ҡунырмын,
Күбәләк булып ҡунһаң.

Тулы ай булып ҡарармын,
Сулпан булып ҡараһаң.
Йөрәк түремә ҡуйырмын,
Йөрәк дуҫың һанаһаң.

## ВАТАН

Минең Ватаным
Океандарҙан киң,
Гүзәллектә ул —
Сәскәләргә тиң.

Минең илемдә
Ҡояш та яҡты,
Йондоҙҙар ҙа шат,
Ер ҙә бик яҡшы.

Минең илемдең
Күге лә бик киң,
Мин үҙ илемдә
Ҡоштай ирекле.

Элек был ерҙә
Хәсрәттәр тыуҙы,
Күҙ йәше менән
Беҙ ерҙе йыуҙыҡ.

Халҡымдың ҡаны
Йылғалай аҡты,
Бөтә ғүмерҙе
Ҡайғы оҙатты.

Зарға бай булдыҡ,
Бәхет күрмәнек,
Шатлыҡ ни була —
Уны белмәнек.

Күк тә бит былай
Киң түгел ине.
Ерҙә ҙур төрмә,
Буш күңел ине.

Асыҡ йондоҙҙар,
Күл һәм урмандар
Хәсрәт, ҡайғыға
Тулған булғандар.

Яңы ҙур ҡояш
Яҡтыртты көндө
Һәм яңы ҙур ай
Яҡтыртты төндө.

Мәңгегә яңы,
Мәңге-мәңге шат,
Мәңгегә матур,
Мәңге-мәңге саф —

Ул минең халҡым,
Ул минең ерҙәр,
Йәшел урмандар,
Хәтфәле ҡырҙар.

Күл, йылғаларым
Һыу менән тулы
Һәм диңгеҙҙәрем
Зәңгәр тулҡынлы.

Ер аҫтым — хазина,
Тауҙарым бейек,
Торалар күкһел
Болотҡа тейеп.

Мәңге-мәңге йәш
Ул минең халҡым,
Күҙҙәре йондоҙ,
Йөрәге алтын.

Халҡым күңеле
Пак, саф шишмәләй,
Халҡым ғүмере
Шиңмәҫ сәскәләй.

Егеттәр — ыласын,
Һылыу ҡыҙҙарым,
Балалар — гөлдәр,
Бик йәш ҡарттарым.

Минең бишекте
Тирбәткән ерем,
Бар матурлыҡты
Күрһәткән илем.

Бөтә донъяның
Ҙур байрағы һин,
Бөтә ҡолдарҙың
Күҙ алмаһы һин.

Ер бәхете һин,
Ер сафлығы һин;
Ер тормошо һин,
Ер шатлығы һин.

Мин һине бирмәм,
Бирмәм һис кемгә.
Һинһеҙ тормош юҡ,
Йәшәү юҡ беҙгә.

Һин —минең ғүмер,
Ялҡынлы теләк,
Шәфҡәтле әсә
Һәм туҙмаҫ йөрәк.

Мең-мең мөхәббәт,
Рәхмәт, ил, һиңә.
Иң ҙур бәхетем,
Ватаным, һиңә.

Мин ни менән бай,
Мин барын бирәм.
Һинең хаҡыңа —
Тыуған илгенәм.

Йөрәк ҡанымдың
Ал иң яҡшыһын.
Күҙ нурҙарымдың
Ал иң яҡтыһын.

Күҙҙе һаҡлаған
Күҙ ҡабағындай,
Беҙ торабыҙ, ил,
Һинең һағыңда.

Шатланһын халҡым,
Йәшәрһен ҡырҙар,
Шаулаһын тормош,
Яң(ғы)раһын йырҙар.

Мәңге йәшә һин,
Тыуған илгенәм,
Балҡы һин, ҡояш,
Яҡтыр, көнгөнәм.

Мин һине, илем,
Бирмәм һис кемгә.
Һинһеҙ тормош юҡ,
Йәшәү юҡ беҙгә.

## Жан Лоҡман

## (1912–1959)



Билдәле тәнҡитсе Жан Лоҡман улы Лоҡманов (1912–1959) Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Ҡоншаҡ ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуа.

1921–1929 йылдарҙа урта мәктәпте тамамлағас, Башҡорт дәүләт педагогия институтына уҡырға инә. 1933 йылда, диплом алғас, Ҡазан дәүләт педагогия институты ҡаршыһында татар әҙәбиәте буйынса аспирантурала уҡый. 1936–1939 йылдарҙа Өфөгә ҡайтып, Башҡорт дәүләт педагогия институтында доцент булып эшләй.

Бөйөк Ватан һуғышында 1945 йылға тиклем рота командиры булып хеҙмәт итә, артабан штурмлаусы батальон командиры була. Ике тапҡыр – еңелсә, ике тапҡыр ауыр яралана.

Һуғыштан һуң Жан Лоҡман Башҡорт дәүләт педагогия институтында эшләүен дауам итә, әҙәби тәнҡит менән шөғөлләнә, мәҡәләләре газета-журналдарҙа баҫыла. М. Ғафури менән Ғ. Туҡай ижадын ғалим ентеклəп өйрәнә. Айырыуса уның «Әҙәби жанрҙар тураһында», «Һуғышсан политик поэзия өсөн», «Әҙәбиәттәге вульгарлашыуға ҡаршы», «Ғ. Туҡай сатираһы», «Р. Ниғмәтиҙең Бөйөк Ватан

һуғышы осорондағы ижады» хеҙмәттәре киң билдәле. Улар башҡорт әҙәби тәнҡитен үҫтереүҙә мөһим роль уйнаны.

Жан Лоҡман бик күп әҙәбиәт дәреслектәрен төҙөүҙә ҡатнашты, шулай уҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын әҙерләүҙә күңел биреп эшләне.

## Кәтибә Кинйәбулатова

## (1920)



Кәтибә Кәрим ҡыҙы Кинйәбулатова 1920 йылдың 15 сентябрендә Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Мәүлит ауылында тыуа.

Башланғыс белемде атаһынан ала. Мөхәмәтҡолой мәктәбендә уҡый. Өфөлә рабфакта уҡып, Башҡорт дәүләт педагогия институты студенты була. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, институттың ситтән тороп уҡыу бүлегенә күсә һәм тыуған ауылына ҡайта. Уға өс һеңлеһенә һәм бер энеһенә «ғаилә башлығы» булырға тура килә. Сирүси ете йыллыҡ мәктәбендә, унан һуң Мөхәмәтҡолой мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй.

1952 йылда Өфөгә күсеп килә. «Башҡортостан» газетаһы редакцияһында эшләй. 1960 йылда Мәскәүгә Яҙыусыларҙың юғары әҙәби курсына уҡырға ебәрелә. 1968 йылда ойошторолған «Башҡортостан ҡыҙы» журналының тәүге мөхәррире була.

1975 йылда ижад эшенә күсә. 1956 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар берлеге ағзаһы. Башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге фиҙакәр хеҙмәте өсөн «Почет Билдәһе» ордены менән бүләкләнә.

## ЯҠЫН ДУҪЫМ!

Яҡын дуҫым!
Бер һүҙем бар һиңә,
Алдан әйтеп ҡуям серемде...
Ҡәберемә килереңде беләм,
Кем теләһен инде үлемде...
Етер инде, етер ундай бер көн,
Ундай яҙмыш тик бер Хоҙайҙан.
Сәскә күрһәң минең тупрағымда,
Кем ултыртҡан, тимә,
Һеҙ ҡайҙан?
Умырзая сығыр, бәлки, унда,
Күк сәскәләр, бәлки, сығырҙар,
Улар әйтер: «Беҙ бит шиғырҙар.
Шағирә үҙе тере саҡта
Яҙып өлгөрә алмай ҡалған шиғырҙар.
Һеҙҙе һөйөп яҙған шиғырҙар!..»

## ИГЕНСЕ

Һаумы, дуҫым, һаумы, игенсе!
Ил тип, Ер тип, тиреҫ түгеүсе.
Хеҙмәт менән көн-төн әйҙәләп,
Алтын орлоҡтарҙы игеүсе.

Эшең, ана, ҡалай ырамлы,
Мөғжизә бар, ахыры, үҙеңдә.
Орлоҡтарҙы тау-тау өйгәндә
Ҡояш ялҡын ала үҙеңдән.

Миллион тонна һалдың келәткә,
Инде булмаҫ илдең нужаһы.
Бәхет ҡоя икән ер-тупраҡ,
Мөғжизәсе булһа хужаһы.

## ТЫУҒАН ЯҠҠА ҠАЙТҠАС...

Тыуған яҡҡа ҡайтҡас бер көндө,
Һөйләште лә китте ҡайындар,
Телгә килде ап-аҡ муйылдар,
Тирә-яҡҡа хуш-еҫ бөркөлдө.
   Уң яғымда гөлдәр түтәле:
   Әйҙә, тиҙәр, тиҙерәк үт әле.

Һөйләштеләр зың-зың иңкештәр,
Бал эс, тиҙәр, бал бик шифалы.
Кинәнделәр бөтә ҡош-ҡорттар,
Ял ит, тиҙәр, ял ит, туҡталып.
   Алда ғына бер төп балтырған,
   Көткәйнек, ти, һине былтырҙан.

Шығыр-шығыр була һайыҫҡан,
Майҙигәстәр сут-сут килделәр,
Туҡрандар ҙа ағас башына
Суҡ-суҡ сәләм әйтеп менделәр.
   Ҡарағайҙа тейен ялда, ти,
   Ултырып кит минең янда, ти.

Эй тыуған ер, минең ғәзиз ер,
Иркәләйһең мине бала итеп,
Бер йәшәүҙә һинең хөрмәтте
Ҡайтарайым икән ҡалайтып?

## МОҢДАР, МОҢДАР...

Наҙлы нурға атылып сыҡҡан төҫлө
Шишмәләрҙең яҡты һыуҙары.
Иҫкә алған һайын, ауылым, һине,
Йөрәгемдән аға йырҙарым.

Күптән инде бына балиғ булдым,
Тәүге һыҙыҡ яткан маңлайға.
Ә шулай ҙа ғәжәпләнә ҡай саҡ
Мине күргәс ағай, апайҙар.

Нисек, тиҙәр, һаман ҡартаймай ул,
Йөрөшө лә, тиҙәр, егәрле.
Белмәй улар,
«Тыштан йәймә йәйәм»,
Эстәремдә моңдар етерлек.

Ә ул моңдар — берсә яҙғы ел дә,
Аҡ сәскәле муйыл ағастар,
Ҡаҙ үләне баҡса буйҙарының,
Бәпембәле йәшел балаҫтар.

Һәм ул моңдар — әбей, бабайҙар ҙа,
Асыҡ йөҙлө шаян еңгәйҙәр,
Барыһы ла ысын-шаярыулы
Ҡолағыма «үпкә» һөйләйҙәр.

— Ҡайҙа йөрөйһөң һин тауыш-тынһыҙ?
Шағирә лә, ахыры, булғанһың.
Хатың да юҡ, ә беҙ борсолабыҙ,
Һин бит, һылыу, беҙҙә тыуғанһың.

Хаҡ шелтәгә яуап һүҙ табалмай
Өҙгөләнде тағы шул йөрәк,
Тиҙҙән һеҙгә ҡыуанысла йырҙар
Алып ҡайтһам ине бер тейәп.

Моңдар,
моңдар, —
күңел аҙығы һеҙ,
Йөрәк ярып тыуған уйҙарым.
Атылып сыҡҡан яҡты шишмәләрҙәй,
Яҙыласаҡ иң саф йырҙарым.

## КЕШЕ КҮҢЕЛЕ

Ғүмерем буйы ысын мөхәббәтте
Хыялымда ғына йөрөттөм.
Йәшәүемдең әсе яҙмыштары
Мине генә әллә үҙ итте...

Ғүмерем буйы Көткәндәрҙе көтмәй,
Көтмәгәндәр менән алдандым.
Әллә инде яҙмыш тигәндәре
Ысын итте микән ялғанды?..

Хыялымда ғына яралған моң
Юлыҡтырған һиңә — Көтмәгән,
Һин Көтмәгән менән йәшәһәм дә,
Ғүмерем, бәлки, заяүтмәгән...

Үкенестәр кемдәрҙән һуң үтмәй,
Ялҡынлы хис кемдә янмаған?
Кеше күңеле — ҡалын ҡара урман,
Берәү бармы уны аңлаған?!.

## МИН – ӘСӘЙМЕН

Мин — әсәймен.
Ҡолағымда гел-гел
Сабыйҙарҙың сарға тауышы.
Яңғырап тора,
Әйҙәп-бәйҙәп тора,
Уға тоғро барлыҡ булмышым.

Мин — әсәймен.
Ауыр йылдар күрҙем.
Атайҙарҙы яуға оҙаттым.
Ауыр йылдар ауыр килгән һайын
Сабыйҙарҙы нығыраҡ яраттым.

Мин — әсәймен.
Ғүмеремдә мәгәр
Күп татыным әсе-сөсөнө.
Бала көлһә,
Донъям теүәлләнде,
Бойоҡто иһә,
Йөрәк өшөнө.

Мин — әсәймен.
Шундай мәлдәр була:
Ҡара ҡайғы килә —
Түҙәһең.
Үкереп илар инең, —
Бала хаҡы!
Йөрәк тотҡан булып
Көләһең.

Улар кескәй саҡта,
Ашығыуҙан хатта
Һыуҙан да мин ҡайттым
Йүгереп.
Сабый тауышы сыҡһа,
Хәүеф һалып,
Биҙрәм китер ине
Түгелеп.

Юҡ!
Түгелмәй икән!
Мин — әсәймен.
Йөрәк шулай хәүеф үткәрә.
Сабый бәхетенә
Әсәйҙәр бит
Биҙрәләрен
Мөлдөрәмә тулы күтәрә.

Мин — әсәймен.
Хәйер, беләм,
Йәшәүемдең етте ауышы...
Һуңғы сәғәттә лә
Ошо тауыш
Әжәл менән сая алышыр.

Тыуған илем!
Ғәзиз күргән илем,
Һиндә балам — ғүмерем һағышы.
Рәхмәт һиңә,
Мәңге бүләк иттең
Сабыйҙарҙың сағыу тауышын.

Мин бәхетле.
Яҙыҡ булмаç әле,
Маҡтанырға бик ҙур иçәбем,
Мең әжәлгә мин оторо торам,
Мин үлемһеҙ,
Мин бит — әсәмен.

## ИНӘЙЕМ ВАСЫЯТЫ

Һыҡтап, илап ваҡыт уҙғарырға
Кеше ғүмерҙәре икеме.
Инәкәйем миңә васыят әйтте:
«Эшлә, эшлә», — тине үтенеп.

— Һыҡтап ғүмереңде әрәм итмә,
Эшһеҙ кеше генә илаһын.
Килгәндә лә әжәл йән алырға,
Ең һыҙғанһаң, ҡурҡып, туҡтаһын.

— Үҙең дә бит ҡара таңдан алып
Ҡара төнгә тиклем эшләнең,
Ниңә туҡтатманың шул яуызды,
Ул килгәндә, инәй, нишләнең?

Өндәшмәй ул. Инәкәйем күптән
Гүр эйәһе. Тыныс йоҡола.
Мин баш бала. Инәй урынына
Мин кергәнмен тормош утына.

Теләһәң дә, теләмәһәң дә һин
Балаларға яуап бир ана...
Васыятыңа тоғро булдым, инәй,
Тик шиғырҙан ғына ҡан тама.

## БЕЙЕКЛЕКТӘН КҮҢЕЛЕМ ҺҮРЕЛМӘЙ

«Ул түбән», тип һис тә уйламағыҙ,
Йәшәгән юҡ тауға үрелмәй.
Күрмәһәм дә тауҙың түбәләрен,
Бейеклектән күңелем һүрелмәй.

Мине аңлар илаһи зат — дуҫтар,
Мин үҙем дә шундай бер заттан.
Күпме йәбер-золом күрелһә лә,
Башым ғорур, кәүҙәм төҙ атлар.

Мине таныр кеше булған кеше,
Белмәмеш булырҙар тик яттар.
Ете ҡатлы түгел нәҫел-нәсәп,
Тыуылғанмын аҡ нур, бер ҡаттан.

## Уран Кинйәбулатов

## (1934–2003)



Уран Кәрим улы Кинйәбулатов 1934 йылдың 25 майында Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Ҡолой ауылында тыуа.

Ҡолой ауылында ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. Коркино тау техникумына уҡырға инә. Хеҙмәт юлын «Челябинскшахтастрой» тресының етәксеһе булып башлай. 1954–1957 йылдарҙа хәрби-диңгеҙ флотында хеҙмәт итә. 1958–1962 йылдарҙа Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡый. 1962 йылдан алып «Башҡортостан» дәүләт телевидение һәм радио тапшырыуҙары комитетында төрлө редакцияларҙа хәбәрсе, мөхәррир булып эшләй.

Уның шиғырҙары матбуғатта илленсе йылдарҙа баҫыла башлай. Уның бик күп шиғырҙары көйгә һалынған, «Йырҙар» йыйынтыҡтарына ингән. «Сейәлетау» исемле шиғырҙар китабы 1992 йылда донъя күрә.

## ҮҘЕҢ БУЛӘК

Ниңә икән һинең исемеңдә
Ҡушам һаман моңло йырҙарға.

Мөхәббәтем, бәхеткәйем минең
Тулып ағыр микән ярҙарға?

Мөхәббәтем, бәхеткәйем минең
Тулып ағыр микән ярҙарға,
Үҙең бүләк, үҙең генә бүләк,
Миңә башҡа бүләк һайлама.

Әгәр һөйһәң, яҙҙар булып һөйһәң,
Йөрәгемдә һағыш һүрелер.
Яҙғы ҡояш көткән мөхәббәтем
Гөлдәр булып нурға үрелер.

Йәшлегемде һиңә бүләк иттем,
Ғүмер наҙым булһаң — һуңлама.
Үҙең бүләк, үҙең генә бүләк,
Миңә башҡа бүләк һайлама.

## САФ МӨХӘББӘТ БАР БИТ УЛ

Ярһыҙ йылға булмағандай,
Йәрһеҙ булмай йәш күңел.
Һөймәҫмен тип уйлағайным,
Һөймәҫкә мөмкин түгел.

Йөрәгемдә ғишыҡ уты
Үҙәкте өҙә генә.
Мөхәббәтем һис кәмемәй,
Үҫә лә үҫә генә.

Зәңгәр күктә юлдар ярған
Ҡанатлы ҡоштар бит ул.
Илатҡан да, йырлатҡан да
Саф мөхәббәт бар бит ул!

## БӨРЙӘНДЕҢ ЕГЕТТӘРЕ

Ғашиҡтарҙың иле бит ул
Уның Бөрйәне, тиҙәр шул, эх кенә!
Ҡыҙҙар беҙҙә ғишыҡ тотһа,
Минең бер йәнем, тиҙәр шул, эх кенә!

*Ҡушымта:* Зәңгәр күкте байҡап оса
Уралтау бөркөттәре.
Бер ҡарауҙа ғашиҡ итә
Бөрйәндең егеттәре!

Беҙҙең Бөрйән — ҡуйы урман,
Ағас һайын һандуғас шул, эх кенә!
Ҡош түгел, үҙең һайрарһың,
Күңел тулы моң булғас шул, эх кенә!

*Ҡушымта:* Зәңгәр күкте байҡап оса
Уралтау бөркөттәре.
Ҡара күҙле, ҡара ҡашлы
Бөрйәндең егеттәре!

Бөрйән тауы гел аҫыл таш,
Аҙым һайын хазина шул, эх кенә!
Салауат күпере аша
Килегеҙ, дуҫтар, беҙгә шул, эх кенә!

*Ҡушымта:* Зәңгәр күкте байҡап оса
Уралтау бөркөттәре.
Аҡ теләкле, ут йөрәкле
Бөрйәндең егеттәре!

## ОРБИТАМДЫ ЮҒАЛТТЫМ

Әллә ниңә көн буйына
Күңел йырлай, таҡмаҡлай.
Баш юғалтып ғашиҡ булдым
Йәш егеттәй, ахмаҡтай.

Йылмайып ҡына ҡаршылай,
Тора-бара ни эшләр?
Иркәм эшләй ҡошсолоҡта,
Тип-тип, сип-сип, себештәр...

Онотола фани донъя,
Күҙгә күҙҙәр ҡарашһа.
Беҙҙе күреп, яңғыҙ ҡалған
Аҫыл ҡоштар парлаша.

Мин — Ағиҙел, һин — Дим, Дим, тип
Хәбәр һала зирәгем.
Ҡосоп алһам, йәнем уста,
Леп-леп, дөп-дөп йөрәгем!

Инсафлы бер егет инем,
Орбитамды юғалттым.
Йөрәгемдә йоҡлап ятҡан
Арыҫланды уяттым.

## БИШЕК ЙЫРЫ

Хәтфә үлән, йәшел бәрхәт —
Үтер юлдарың.
Һинең өсөн бишек кеүек
Минең ҡулдарым.

*Ҡушымта:*

Йоҡла, балам, йом күҙеңде,
Әлли, бәлли, бәү!
Мин һаман да һинең янда,
Әлли, бәлли, бәү!

Күгәрсен дә балаларын
Йоҡлатты йырлап.
Йылмайып йөҙә тулған ай,
Йөҙөңдө нурлап.

*Ҡушымта.*

Һинең менән бергә үҫә
Өмөтөм минең.
Һинең менән бергә тибә
Йөрәгем минең.

*Ҡушымта.*

## ВАТАНЫМ

Арымам инде
Таулы юлдарҙа.
Үҫтерҙең, Ватан,
Ауыр йылдарҙа.

*Ҡушымта:* Ватаным, Ватаным!
Изге төйәгем һин,
Ҡайнар йөрәгем һин,
Ватаным, Ватаным!

Еремдән алам
Йәшәү көсөмдө.
Йырлайым уға
Йөрәк хисемде.

*Ҡушымта:* Ватаным, Ватаным!
Атайҙарға атай,
Әсәйҙәргә әсәй
Ватаным, Ватаным!

Халҡым ынтыла
Тормош күркенә.
Киләсәк матур,
Йөрәк елкенә!

*Ҡушымта:* Ватаным, Ватаным!
Изге төйәгем һин,
Ҡайнар йөрәгем һин,
Ватаным, Ватаным!

## АҠ ҠАЙЫНДАР

Аҡ ҡайындар, зифа аҡ ҡайындар,
Һеҙҙең менән бергә ут янам.
Һеҙ тағы ла япраҡ ҡояһығыҙ,
Һеҙ тағы ла япраҡ ҡояһығыҙ,
Туйҙығыҙмы матур донъянан?

Аҡ ҡайындар, зифа аҡ ҡайындар,
Йәмле йәйҙәр ҡалды йыраҡта.
Астым һеҙгә йөрәк серҙәремде,
Астым һеҙгә йөрәк серҙәремде,
Һағыштарым һеҙҙе һарғайта.

Аҡ ҡайындар, зифа аҡ ҡайындар,
Һарғайыуҙан юҡ шул, юҡ сара!
Япраҡтарҙы ҡаплап, ҡарҙар яуа,
Япраҡтарҙы ҡаплап, ҡарҙар яуа,
Һағыштарҙан юҡ шул, юҡ дауа.

## ТАШЛЫКҮЛ

Ташлыкүлдең ташын алдым
Алтын йөҙөк ҡашына.
Ташлыкүле кибеп бөткәс,
Ҡайғы һалдың башыма.

*Ҡушымта:* Яҙын күл була,
Көҙөн юҡ була.
Ташлыкүлдең ҡар һыуҙары
Ҡайҙа юл ала?
Ташлыкүле убаларға
Төшөп юғала.

Ташлыкүле әллә беҙҙең
Серле мөхәббәт микән?
Йәй гөлдәре сәскә атҡас,
Ҡайҙа юғала икән?

*Ҡушымта.*

Ташлыкүле йота микән
Һағышлы ҡар һыуҙарын?
Күңеләңә йыйылһасы
Һағынып ярһыуҙарым?

*Ҡушымта.*

# Рамаҙан Шәғәлиев

## (1935–2010)



Рамаҙан Нурғәли улы Шәғәлиев 1935 йылдың 1 февралендә Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Мөслим ауылында тыуа.

1952 йылда Мөслим ете йыллыҡ мәктәбен тамамлай. Силәбегә килеп ФЗО мәктәбендә уҡый. 1954 йылда Силәбе металлургия заводында эшләй башлай. Эшсе йәштәрҙең киске мәктәбендә белем ала. Совет Армияһы сафында хеҙмәт итә. 1960–2000 йылдарҙа Силәбе металлургтар мәҙәниәт һарайында «Айгөл» халыҡ ансамбленең етәксеһе була.

Уның шиғырҙары матбуғатта алтмышынсы йылдарҙан даими баҫыла. «Асыҡтан-асыҡ һөйләшеү» исемле тәүге шиғырҙар китабы 1973 йылда, рус теленә тәржемә ителеп, Силәбелә сыға. Ул хәҙер тиҫтәнән ашыу китап авторы.

1962 йылда Силәбе ҡалаһының Шәйехзада Бабич исемендәге милли китапханала ойошторолған әҙәби берекмәнең етәксеһе була.

1986 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар берлеге ағзаһы. Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Мифтахетдин Аҡмулла (2002) һәм Ҡадир Даян (2005) исемендәге премиялар лауреаты.

* * *

Сабый иткән дә һин беҙҙе,
Сағыу иткән дә һин беҙҙе,
Аңлы иткән дә һин беҙҙе,
Данлы иткән дә һин беҙҙе,
Йырлы иткән дә һин беҙҙе,
Ерле иткән дә һин беҙҙе,

Көслө иткән дә һин беҙҙе,
Кеше иткән дә һин беҙҙе,
Туған телем.

## ӨЙӘЛГЕКҮЛ

Өйәлге лә күлкәй, әй, ҡамышың
Уйнар микән, ҡырҡһам ҡурайға?
Ҡыр ҡаҙҙарың, ояларын ташлап,
Осмаҫтармы башҡа туғайға?

Өйәлге лә күлкәй, әй, ҡамышың
Сал тулҡындар менән ҡойона.
Һиҙәһеңме, бөтә ҡыяҡтарҙан
Һыуҙарыңа ынйы ҡойола?

Өйәлге лә күлкәй, әй, ҡамышың
Һайрар ҡоштарыңа тал икән.
Урал ғына тауым күкрәгендә
Һиндәй күлдәр тағы бар микән?

## ҺИН УЛТЫРТҠАН МУЙЫЛ

Һин ултыртҡан муйыл
Сәскә атты быйыл,
Аҡ яулығын һалып иңенә.
Сәскәләрен өҙмәйем,
Тик наҙлап мин еҫкәйем,
Юҡ наҙларға бергә һин генә.

Һин ултыртҡан муйыл
Бөҙрәләрен быйыл
Күтәрә алмаҫ кеүек тойола.
Һағыныуҙарым көслө,
Һинһеҙ ул һулыр төҫлө,
Ҡайтмай ҡалһаң әгәр быйыл да.

Һин ултыртҡан муйыл
Емеш бирер быйыл.
Кем менән һуң ауыҙ итермен?

Яттар менән йәм тапмам,
Һинән башҡа йәр тапмам,
Ғүмер буйы һине көтәрмөн.

## БАЛА САҠТЫ ҺАҒЫНЫУ

Өй алдында ике малай уйнай,
Икеһе лә уттай йылғырҙар.
Эх, мин әйтәм, ҡайҙа китте икән
Малай булып йөрөгән шул йылдар.

Салбар балаҡтарын теҙҙән төрөп,
Урам буйлап сабып ат уйнау.
«Себеш» сыҡҡан аяҡтарҙы тотоп,
Тупһаларҙа ултырып бер илау.

Илау түгел, йөҙ ҙә һытмаҫ инем,
Йөрөмәҫ инем төрөнөп, бәйләнеп.
Түҙер инем хәҙер мең «себеш»кә,
Малай сағым килһә әйләнеп.

* * *

Юлға сығырға уйлаһаң һин, егет,
Иң беренсе өйрән башта ат егеп.

Баш бирмәһә, ауыҙлыҡла һин уны,
Шәп ат ауыҙлыҡһыҙ булмай, бел шуны.

Самалай бел ҡамытты үҙ атыңа,
Оят килтермәйем тиһәң затыңа.

Айыра бел дуғаның алдын-артын
Көтмәйенсә әйтеүен атай ҡарттың.

Түбән булһа, күтәрә бел һыртлығын,
Ямай ҙа бел ябыуының йыртығын.

Дағалай бел артҡы, алғы тояғын,
Һәм бел аттың иң яратҡан төйәген.

Шиғыр яҙырға уйлаһаң һин, егет,
Иң беренсе өйрән башта ат егеп.

## СӘРБИ ӘБЕЙ

Кемдер уйнай өҙҙөрөп гармунда,
Динес буйын тултырып моңдарға.
Сәрби әбей таяҡ таянған да
Буҫағаға сыҡҡан тыңларға.

Хәлһеҙ ҡулын маңлайына ҡуйып,
Күҙен алмай йылға яғынан.
Ул ғынамы — аҫыл яулығын да
Һандығынан алып ябынған.

Бына-бына йүгереп китер төҫлө,
Таяҡ менән мәңге хушлашып.
Тик ҡыҙғаныс: таяҡ менән ҡартлыҡ
Өлгөргән шул күптән дуҫлашып.

Ейәнсәре бөтөрөлөп өйҙә
Әҙерләнә егет янына.
Гармун моңо, гүйә, үс иткәндәй,
Өҙөлә лә, тағы ағыла.

Йөрәк бит ул үҙе ҡартаймаған,
Аңламай шул уны-быны ла.
Кем белә бит, бәлки, ҡыҙ сағында
Саҡырғандыр шул моң уны ла...

## Дамир Вәлиев

## (1940–2002)

Дамир Жәүәт улы Вәлиев 1940 йылдың 2 ғинуарында Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Итбай ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуа.

1959 йылда Силәбе энергетика техникумын тамамлай. 1959–1960 йылдарҙа Совет Армияһында хеҙмәт итә. 1960–1963 йылдарҙа Силәбелә һөнәре буйынса эшләй. 1965 йылда Свердловский юридик институтын тамамлай.



1966–1967 йылдарҙа Башҡортостан комсомолының обкомында инструктор булып эшләй. 1970 йылда Урал дәүләт университетында философия фәндәре кандидатлығына диссертация яҡлай. 1972–1985 йылдарҙа Башҡорт дәүләт университетында өлкән уҡытыусы, философия фәндәре кандидаты, теория, дәүләт тарихы һәм хоҡуҡ кафедраһының мөдире була. 1986 йылдан алып ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем Башҡорт дәүләт университетының этика һәм эстетика кафедраһына етәкселек итә. 1991 йылдан Башҡортостан Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты.

Уның ғилми-тикшеренеү өлкәһе – әхлаҡ тарихы, этностың рухи мәҙәниәте, хоҡуҡ генезесы, башҡорт эпосы, дәүләттең үҙаллылығы проблемаһы. «Әхлаҡтың барлыҡҡа килеүе», «Башҡорт халҡының әхлаҡ мәҙәниәте: үткәне һәм киләсәге», «Милли үҙаллылыҡ һәм милләтте тергеҙеү», «Башҡортостан йәмғиәт фекере үҫеше буйынса очерктар» кеүек киң билдәле хеҙмәттәрҙең авторы.

Силәбе башҡорттарының рухи мираҫын йыйыуға өлөш индерә. Арғаяш башҡорттары араһында һаҡланған халыҡ йырҙарын, легендаларҙы, мәҡәл-әйтемдәрҙе яҙып ала. «Арғаяш башҡорттарының рухи мираҫы» исемле фольклор йыйынтығы 2001 йылда донъя күрә.

Дамир Вәлиев – ғалим-философ, педагог һәм фольклорсы. Ул уҡытыусылар үҫтереүҙә, йәш ғалимдар әҙерләүҙә һәм халыҡ араһында мәғрифәт таратыуҙа күңелен биреп эшләне. Фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн уға Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре тигән маҡтаулы исем бирелде.

# Динә Талхина
## (1952–2007)



Динә Азат ҡыҙы Талхина 1952 йылдың 27 июлендә Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Мәтәл ауылында тыуа.

Мәтәл һигеҙ йыллыҡ мәктәбенән һуң Өфөләге 1-се һанлы мәктәп-интернатта уҡый. Башҡорт дәүләт университетын тамамлай, Учалы районы Миндәк урта мәктәбендә уҡытыусы, Учалы район газетаһында хаттар бүлеге мөдире була. Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә балалар әҙәбиәте бүлеге мөдире булып эшләй.

Балалар һәм өлкәндәр өсөн «Тылсымлы күлдәктәр», «Бармаҡтарым арыны», «Зәңгәргүҙ әкиәттәре», «Весёлая азбука», «Йөрәгемдә йырҙар йөрөтәм», «Йөрәгем – юнысҡы» тигән китаптары донъя күрҙе.

1992 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар берлеге ағзаһы ине.

### ТЫУҒАН ЕР

Илемдә минең таңдар
Илаһи, хозур ата.
Арыған ал ҡояш та
Офоҡҡа ғорур бата.
Тәкәббер беҙҙә ҡыштар,
Йәйҙәр үҙ көйөн көйләй,
Хатта йонсоу ямғыр ҙа
Хәбәрен матур һөйләй.
Күҙҙөң йәме һушты ала –
Тын алыуҙан тыйылам,
Ал ямғырға әйләнәм дә
Ер өҫтөнә ҡойолам.

Ерем миңә йәннәт төҫлө,
Һәр биҙәк миңә матур.
Тыуған ерҙәй ниндәй ер
Йөрәккә шулай ятыр?!

## АРҒАЯШ КҮЛДӘРЕ

Зәңгәр күлдәр беҙҙең яҡта
Ал ҡояшҡа тартыла.
Ҡыр ҡаҙҙары беҙгә ҡайта
Шул таңдарҙың артынан.

Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ, шатлыҡтары
Күл өҫтөнә һибелә.
Һағыштары, аҫыл таштай,
Сума күлдең төбөнә.

Зәңгәр күлдәр беҙҙең яҡта
Аҡ ҡайынға һыйына.
Ҡыр ҡаҙҙары, һыуһылыуҙай,
Күл буйында ҡойона.

Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ, ҡанаттарын
Зәңгәр һыуҙа йыуалар.
Ҡыр ҡаҙҙары моңдарынан
Сыңлап тора һауалар.

Зәңгәр күлдәр беҙҙең яҡта
Алтын ҡомға уйыла.
Шул күлдәргә ҡаҙҙар ҡайта
Үҙҙәренең туйына.

Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ, шатлыҡтары
Күл өҫтөнә һибелә.
Һағыштары, аҫыл таштай,
Сума күлдең төбөнә.

## ҮҘ ТЕЛЕМДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ!

Үҙ телемдә һөйләшәм —
Миңә ҡоштар көнләшә.
Үҙ телемдә һөйләшәм —
Мин ҡояшҡа тиңләшәм.
Үҙ телемдә һөйләшәм —
Бар булмышым нур ғына.
Үҙ телемдә һөйләшәм —
Күңелкәйем йыр ғына.
Һәр һүҙ миңә сәскә төҫлө,
Һәр һүҙ йәйғор киҫәге.
Шатлығымдың юҡ сиге,
Юҡ шатлығым иҫәбе.
Үҙ телемдә һөйләшәм,
Үҙ илемдә көн күрәм,
Күңелемә шатлыҡтан,
Кинәнестән нур һүрәм.

## СИЛӘБЕМ

Силәбем, минең Силәбем,
Минең яратҡан ҡалам,
Урамдарыңдан йөрөп,
Йөрәккә илһам алам.

Силәбемдең тәү таштары
Уралыма уйылған.
Һөйөүем ҡорос төҫлө
Йөрәгемә ҡойолған.

Силәбемдә йорттар бейек,
Мейәстән күҙен алмай.
Домналағы ялҡындай,
Йөрәкте һөйөү ялмай.

Силәбемдә халыҡ алсаҡ,
Аралашыу бер ғүмер.
Шағир, йырсы яҡташын
Алҡышҡа йомарт күмер.

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Йәшен булып ялтлар тел.
Дары булып шартлар тел.

Ҡоштар булып һайрар тел.
Бүре тешен ҡайрар тел.

Елдәр булып иҫер тел.
Бауырҙарҙы киҫер тел.

Ҡояш булып балҡыр тел.
Ҡая булып ҡалҡыр тел.

Йөрәктәргә үтер тел.
Ваҡыттарҙы тетер тел.

Аҡтамырҙай йәйелеп,
Йөрәктәргә үрелер,
Башҡорт тигән йәндәрҙә
Ҡабат-ҡабат терелер!

# Силәбелә хәҙерге осорҙа әҙәби тормош



Булат Фәсхетдин улы Батталов 1928 йылдың 1 апрелендә Башҡортостандың Әбйәлил районы Асҡар ауылында тыуа.

Асҡар урта мәктәбен тамамлай. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында колхозда эшләй. Әбйәлил район газетаһы редакцияһында әҙәби хеҙмәткәр була. 1952 йылда Магнитогорск тау-металлургия институтын тамамлай. Түбәнге Тагил һәм Силәбе металлургия комбинаттарында эшләп, хаҡлы ялға сыға. Зәйнулла ишан Рәсүлевтең бүләһе.

Силәбеләгә әҙәби берекмәнең тәүге ағзаларының береһе. Тәүге шиғырҙары Силәбелә рус телендә «Солнце на ладони» (1970) исемле әҙәби йыйынтыкта донъя күрә. «Тау юлдары» («Көҙгө ташҡын» коллектив йыйынтыҡ) исемле тәүге шиғырҙар китабы 1997 йылда сыға. Уның шиғырҙары «Силәбе шишмәләре» (2002), «Төрки халыҡтарының донъя антологияһы» (2005), «Аҫылташтар йыйыр саҡ» (2006) йыйынтыҡтарына ингән. «Һағыныу» исемле икенсе китабы 2008 йылда Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә баҫыла.

## ТЫУҒАН ЯҒЫМ

Ватанымдың осо-ҡырыйы юҡ,
Миңә яҡын һәр бер өлөшө.
Ә Тыуған ил тигән изге хисте
Тыуҙыра бер кескәй мөйөшө.

Кавказда ла булдым, Ҡырымда ла,
Мин ҡойондом йылы диңгеҙҙә.
Ҡара диңгеҙ түгел, ә Таңатар[1]
Иркәләне кеүек үҙендә.

Таш һарайҙар күрҙем, гөл-баҡсалар —
Ожмахта тип тойҙом үҙемде.
Тик ирсәнеп бында, бик һағындым
Тыуып үҫкән ерем — илемде.

Күҙ алдымда торҙо аҡ ҡайындар,
Тулҡынланған иркен далалар.
Ҡайтам инде, Диңгеҙ, үҙ яғыма:
Тыуып үҫкән ерем — Урал бар.

## УН ҺИГЕҘ ЙӘШ

Ун һигеҙ йәш бөгөн һиңә тула...
Һин бит инде хәҙер ир-егет.
Ил бурысы төшә муйыныңа,
Йөрөмәҫһең ғәмһеҙ, ирегеп.

Һалдат юлы көтә һине алда,
Һин әҙерме алыҫ юлдарға?
Сик һағына — оло посҡа ҡуйып,
Ил ышана һиндәй улдарға.

Үҙең менән бергә һин алып кит
Әсәйеңдең изге теләген.
Өй алдынан бер ус тупрағын ал,
Ҡайтыуыңды көтөр төйәгең.

---

[1] Таңатар — Асҡар ауылының кескәй йылғаһы.

Ҡыйын саҡта, улым, иҫеңдә тот
Ололарҙан килгән аҡылды:
Йөҙгә-йөҙ тор яуҙа дошманыңа,
Ул күрмәһен арҡаң-артыңды.

Бөгөн һиңә уттай ун һигеҙ йәш,
Сафҡа баҫаң һин дә — йәш һалдат.
Йәшел погон итеп иңдәреңә
Өмөт ҡулын Тыуған ил һала.

## ӘСӘЙЕМДЕҢ ФАТИХАҺЫ

Фатихамды бирәм, балам, һиңә,
Тик илама: һин бит — ир бала.
Мин яраттым һине бәхет өсөн —
Һине көтә алда киң дала.

Һуңғы һөттәремде бирҙем һиңә,
Һуңғы көстө түктем кинйәмә.
Васыятым, балам, ошо ғына:
Бәндәләрҙән бер ни йәлләмә.

## ЕР ШАРЫНЫҢ УРТАҺЫНДА

Ике-өс саҡрым ине бала саҡта
Уратып алған донъя — Ер шары.
Тыуған өйөм — үҙәк, ҡалған ерҙәр
Уның сите ине ни бары.

Йылдар уҙған һайын Ер киңәйҙе,
Осо-ҡырыйы ла юҡ икән.
Тик элекке һымаҡ Ер шарының
Уртаһында тыуған өй икән.

## ЕРЕК

Ерек яғып йылытырмын
Тип ышанма өйөңдө.
Бауыры туң кешегә һин
Бәйләмә өмөтөңдө.

Шартлап яна, сатҡы ата —
Күрҙегеҙме еректе!
Тик ул күпме шартламаһын,
Мейес барыбер һүренке...

Һин дә, дуҫым, йылытам тип,
Терәлдеңме ереккә?
Үкенерһең, ай, һуң булыр:
Буй етмәй ул терһәккә.

## ЭШ КЕЙЕМЕ

Һинең менән үтәм ғүмер юлын,
Иң ауырын йөкмәп елкәгә.
Һин — түҙемле, әрһеҙ — эш кейеме,
Тейгәнең юҡ әле теңкәгә.

Кейгәнемдән бирле һин бер көйө:
Баш эймәйһең мода алдында,
Ялтыр таштар менән биҙәнмәйһең,
Хәжәт түгел һиңә алтындар.

Ҡаҙамайҙар һиңә орденды ла,
Ә бит уға хаҡлы һин генә!
Һиңә ҡала иҫке шинелдәге
Яу эҙҙәре кеүек эҙ генә.

Наҙлы ла түгел һин. Һиңә тейә
Селләләрҙең әҫе-һалҡыны.
Берсә менәһең һин вышкаларға,
Берсә өтә домна ялҡыны.

Бирешмәйһең боҙло дауылға ла,
Юҡҡа түгел ғорур исемең...
Хаҡ әйтәләр: «Илде йылыта, — тип, —
Эшселәрҙең һырма кейеме».

## Алевтина Вәлиева
## (1931)



Алевтина Нурулла ҡыҙы Вәлиева 1931 йылдың 1 майында Башҡортостандың Салауат районы Ҡаратаулы ауылында тыуа.

Ҡаратаулы урта мәктәбендә уҡый. Силәбе өлкәһенең Һатҡы ҡалаһында мәҙәни-ағартыу училищеһын, Мәскәүҙә сит ил телдәре бүлеген тамамлай. Салауат районында һәм Силәбелә уҡытыусы булып эшләп хаҡлы ялға сыға.

Силәбеләге Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәнең әүҙем ағзаһы. Уның шиғырҙары «Силәбе шишмәләре» (2002), «Һөйөнсө» (2003), «Область вдохновения» (2003), «Аҫылташтар йыйыр саҡ» (2006), «Чиләбе моңнары» (2007) исемле әҙәби йыйынтыҡтарға ингән.

«Көҙгө моңдар» исемле тәүге шиғырҙар китабы Силәбелә 2006 йылда баҫыла.

### АҠ ТОЛПАРЫМ – ЙӨРӘККЕНӘМ

Ҡайырылған ҡанаттарым
Уңалмай һынды.
Бәхет ҡошом талпынды ла,
Һайрамай тынды.

Өмөт атым бәйгеләрҙә
Сабалмай тайҙы,
Таңдарым алһыу нурҙарға
Ҡойонмай тыуҙы.

Яраланған күңелемде
Йырҙарым йыуҙы,
Һау-сәләмәт ихтыярым
Дәрт, илһам йыйҙы.

Аҡ толпарым — йөрәккенәм
Ярһынып торҙо,
Таштар ярып мин — тәүәккәл,
Яңынан тыуҙым.

* * *

Егет булһа — ут булһын,
Әйткән һүҙе уҡ булһын;
Уйы таҙа, пак булһын,
Эше ғәҙел, хаҡ булһын;
Башын бирмәҫ ат булһын,
Үткер, изге зат булһын;
Тәкәбберлек ят булһын,
Егет булһа — ут булһын!
Илкәйенә ҡот булһын!

## ХАТ

Яҙам килер быуынға хат,
Һүҙем һеҙгә вәғәз-васыят.
Алда үрҙәр булмаҫ анһат,
Һүҙеңдә тор, бел вәғәҙә-ант.

Эш ҡыл яйлап, уйлап ҡат-ҡат,
Ялған, яуызлыҡтан баш тарт.
Дуҫ-иш ҡанат, үҙ ит, ярат,
Нур сәсеп кил, йәш азамат!

## ҮҘЕМ БАШҠОРТ

Үҙем башҡорт — Салауат тоҡомонан,
Үҙем ярһыу — Үҙәнһыу тулҡынынан,
Үҙем ҡыҙыу — Янғантау ялҡынынан,
Үҙем сабыр — Ҡаратау ҡултығынан.
Сабырлыҡ мираҫ — ата-бабам булмышы,
Рух һүнмәҫ —йөрәгемдә ерем һулышы.

## РУХИ ОЯМ

Тыуған ерем — йырлы бишеккәйем,
Тәүге аҙым, тәүге һуҡмағым.
Мәңге йырлы, мөғжизәле ерем —
Рухи оям, һыйыныр тупрағым.

Тыуған ерем — йырлы бишеккәйем,
Тынмаҫ көйҙәреңде яраттым.
Салауатын данлай ергенәйем,
Йөрәк йырым — талмаҫ ҡанатым.

## Урал Сафиуллин

## (1933)



Урал Ҡафый улы Сафиуллин 1933 йылдың 23 февралендә Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Аҡбаш ауылында тыуа.

Арғаяш урта мәктәбендә белем ала. 1948–1952 йылдарҙа Троицк педагогия училищеһында уҡый. Совет Армияһында хеҙмәт итә. Силәбе дәүләт педагогия институтын тамамлай. Силәбелә мәктәптә оҙаҡ йылдар уҡытыусы булып эшләп хаҡлы ялға сыға.

Ул тыуған яҡты өйрәнеүсе, журналист һәм йәмғиәт эшмәкәре булып танылa. 1988 йылда Башҡорт халыҡ үҙәген ойоштора. «Тыуған яҡ», «Дуслык» газеталары редакцияһында яуаплы секретарь була. 2000–2009 йылдарҙа «Уралым» газетаһының мөхәррире була.

Силәбеләге әҙәби берекмәнең тәүге ағзаларының береһе. Уның шиғырҙары «Йәш көстәр» йыйынтығында донъя күрә.

Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.

## ИНӘЙЕМ ӘЙТТЕ МИҢӘ

Йәшем еткәс ун һигеҙгә
Инәйем әйтте миңә:
«Егет булып үҫеп киттең, —
Кәләш алмайһың ниңә?»

«Ҡыҙҙар заты ҡасмаҫ, — тинем,
Буйҙаҡтар хәҙер һирәк...
Военкомат мине көтә —
Хеҙмәт итергә кәрәк!»

Утыҙ ике йәшем тулғас,
Инәйем әйтте миңә:
«Аҙашҡан торналай йөрөмә,
Ҡәртнәй булаһым килә!..»

«Бала бағып өлгөрөрһөң, —
Булһын малайың ғына...
Биш бүлмәле бер яҡшы йорт
Тәүҙә һалайым ғына».

Ҡырҡ алты йәшем тулғанда
Инәйем әйтте миңә:
«Һине бағып ғүмерем уҙҙы...
Бисә алмайһың ниңә?»

«Түҙгән — түш ашаған», — тинем. —
Күп ҡалмаған көтөргә,
Гараж һалам, «Волга» алам
Киленде йөрөтөргә».

Бер һылыуға күҙем төштө
Йәшем еткәс иллегә.
Уңай килтереп
Әйтә һалдым:
«Килен булып кил миңә!..»
Йылмайҙы:
«Килен булырға
Мин ҡаршы түгел, бабай,
Бәлки, миңә улың оҡшар, —
Егетте күрһәт давай!»

## МАШИНА БӘЛӘҺЕ

Йәйәү йөрөп тамам ялҡкас,
Бер уй керҙе башыма:
«Нисегерәк булыр икән
Алып ҡуйһам... машина?..»

Аҡса йыйҙым, етмәгәнен
Торҙом бурысҡа алып.
Тиҙҙән «Жигули» килтерҙем
Тольятти яҡка барып.

Килде рәхәт!
Юл буйында
Ҡул күтәреп тормайһың,
Кәрәк ереңә бараһың,
Бар донъяны урайһың!..

Бер мәле
Килде иптәшем:
«Бар, — тине, — һиңә йомош:
Кәләшем роддомдан сыға,
Алып килергә булыш!»

Тиҙҙән бажам йүгереп килде:
«Хеҙмәттән ҡайта улым,
Бына хаты: «Шул сәғәттә
Вокзал янында булың!..»

Бер саҡ һеңлем хәбәр итте:
«Айырылдым, ағай, ирҙән,
Ауылыма ҡайтам инде —
Килеп ет, зинһар, тиҙҙән!..»

Бисәм һөйләнә башланы:
«Таксист булдың бит, малай!»
Әйткән булам:
«Таныштар бит,
Туғандар бит, —
Тыңламаһаң — ярамай...»

Байтаҡ йөрөнөм.
Һуңынан ни
Түҙер хәлем ҡалманы:
Йәл булһа ла, һаттым тәки
Дүрт тәгәрмәс арбаны...

Йөрөйөм хәҙер
Йәйәү генә...
Аяҡтарым талғанда
Уйлап ҡуям: «Нисек булыр
Велосипед алғанда?»

## Жанфиҙә Ваһапова
## (1935)



Жанфиҙә Абдулла ҡыҙы Ваһапова 1935 йылда Силәбе өлкәһенең Кәсле районы Оло Ҡыҙыл ауылында тыуа.

1954 йылда Ҡоншаҡ районының Бүре район газетаһы редакцияһында хеҙмәт юлын әҙәби хеҙмәткәр булып башлай. Хәлит ауыл советында секретарь була. 1966 йылда Троицк педагогия училищеһын тамамлай. Силәбе дәүләт университетында ситтән тороп уҡый. 1962–1995 йылдарҙа Тәхәлем урта мәктәбендә тәрбиәсе, туған тел уҡытыусыһы булып эшләп хаҡлы ялға сыға.

Ҡоншаҡ районында йәмғиәт эшмәкәре булып танылa. Төбәк фольклорын йыя. Әҙәби берекмә ойоштороуҙа ҡатнаша.

Уның мәҡәләләре, шиғырҙары, хикәйәләре республика һәм Силәбе матбуғатында даими баҫыла. Ҡоншаҡ районында таралған «Ғәззәли мәҙәктәре»н яҙып ала. «Йәнем фиҙа булһын» исемле тәүге китабы 2008 йылда Силәбелә донъя күрә. «Замечательные люди края голубых озер» (2009) исемле коллектив йыйынтыҡҡа очерктары ингән.

Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы, Ҡоншаҡ район хакимиәтенең Ҡадир Даян исемендәге премия лауреаты.

## ҒӘЗЗӘЛИ МӘҘӘКТӘРЕ

Хужа Насретдин кеүек шаян, хәйләкәр кешеләр беҙҙең яҡта әле лә бар. Ҡоншаҡ районының Зәбир ауылынан Ғәззәли ағай шуларҙың береһе. Тормоштоң ҡысҡырып иларлыҡ сағында ла ул күңелле нәмә табып, халыҡтың күңелен асып йәшәй. Уның күҙе үткер, аҡылы осҡор, теле тапҡыр. Кешенең бәләкәй генә кире сифатын күрә һалып, шундай мәҙәк хәлдәр сығара. Ғәззәли ағайҙың шаяртыуҙары халыҡ араһында һаман телдән телгә күсеп йөрөй.

## «СВЕЖИЙ» УТЫН

Ғәззәли ағай менән Ғәззә апай йәшәгән саҡта тормош бөгөнгө көндән ныҡ айырмалы ине әле: бөгөнгө кеүек утынды йәйҙән үк киҫеп-ярып, киптереп ҡуйыу юҡ ине. Ат йәки үгеҙ егеп, йәйен-ҡышын бер аҙналыҡ утын килтерәләр, уны ярып өйөп ҡуялар. Бөтә башлаһа, тағы барып килтерәләр. Кипкән утын тиҙ, яҡшы яна. Хужабикәләр рәхәтләнә кипкән утын яғып.

Ғәззә апай ағайҙың әҙерләп ҡуйған утынын йәлләмәй яға. «Әһә, — ти Ғәззәли ағай, — былай булһа, мин һине өйрәтәйем әле».

Килтергән утынын ул хәҙер алдан ярып киптерергә өймәй, бер яғырын ғына ярып ҡуя башлай.

— Атаһы, ниңә шул утынды элекке кеүек ярып өйөп ҡуймайһың. Сей утындан йылы ла юҡ, быҫҡып тик ята бит, — ти Ғәззә апай.

— Теге утындың еҫе юҡ. Ә сей утындың еҫе лә тәмле, свежий, — ти хужа, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып.

— Улай булһа, һин дә «свежий» икмәк аша. Ҡыҙмаған мейестә икмәк сей ҡамыр көйөнә ята бит, — ти Ғәззә апай.

*(Дарвин Хәйретдинов, 1935 йыլғы, Ҡоншаҡ районы, Дружный ҡасабаһы)*

## «ФАТИХА»

Үткән йылға тиклем Ғәззәли ағай менән күрше булып Хәким йәшәне. Икенсе ҡатын менән бәйләнеп китеп, балаһы менән үҙ ҡатынын ташлап, йәшбикә менән ҡалаға сығып китте Хәким.

Бер көн һарығын һуйып, Ғәззәли ағай ҡалаға алып китте. Ит алырға килгән ҡала халҡы араһында Хәким дә күренде. Күршеләр йылы иҫәнләштеләр. Хәким ауыл хәлдәрен, күрше-күләнен белеште.

— Ғәззәли ағай, үҙең ни хәлдә йәшәйһең?

— Нисауа, һинең фатихала.

Был һүҙҙәрҙе ишеткән Хәким күҙ алдында үҙгәрҙе — ағарынды, күгәренде.

— Хәким, һиңә ни булды? — тип һораны Ғәззәли ағай, күршеһенең үҙгәреп киткән йөҙөн күреп. Борсолоп китте.

— Һин, ағай, минең Фатиха менән йәшәйһеңме? Ҡартлас, ул бит һинең балаң рәтендә! — тип асыуланды Хәким.

— Һе. Ҡатыныңды, балаңды ташлап киткән саҡта һин бер ҙә борсолмаған инең бит, Хәким. Бөгөн көнләшеп торған булаһыңмы? Ҡалала бер йыл йәшәгән кеше, имеш, үҙ телен дә онотҡан. Мин һинең ҡатыныңдың исеме Фатиха икәнлеген яҡшы беләм. Матур, уңған бала ул. Ә бына уларҙың хәлен һорашманың да әле һин.

Халыҡ «хәлдәр нисек?» тигән һорауға «һинең фатихала» тип яуап ҡайтара. Тимәк, һинең изге теләгеңдә, «һинең фатихала» тигән мәғәнәлә.

*(Менәүәрә Камалиева, 1930 йылғы, Кәҫле районы Ҡыҙыл ауылы)*

## «ТӨЙӨҪӨНӘ – ҠАПҠАСЫ»

Пар килгән ир менән ҡатынға «төйөҫөнә — ҡапҡасы» тип әйткән халыҡ элек-электән. Был һүҙ, әлбиттә, мыҫҡыллы әйтем.

Ғәззәли ағайҙың ҡатыны Ғәззә. Улар бер-береһенә исем менән генә түгел, бөтә тәбиғәттәре менән дә тап килгәндәр. Бер һаҡау бала уларҙың исемен әйт алмай «кәзә бабай», «кәзә әбей» тип әйтә. Шул һүҙ ҡушаматҡа әйләнеп китә. Ҡушаматҡа улар асыуланмай, көлөп кенә ҡуялар.

Мутлана, шаярта белеүҙәре, дөйөм ҡушамат уларҙы, ысынлап та, «төйөҫөнә — ҡапҡасы»на әйләндерә. Хужа Насретдиндың ҡатыны кеүек, Ғәззә апай ҙа ире ни ҡыланһа — шуға күнеп йәшәне. Иренең шаяртыуына «келт-келт» көлгән булып, «иртәгеһен ишәк уйлар» тигәндәй, «юҡ, етешмәй» тип торманы. Булғаны менән — байрам, юғы менән — туй яһап йәшәнеләр улар.

— Ғәззәли ағай! Еңгәй шул тиклем уҫал, һин уның менән нисек йәшәйһеңдер? — тине бер көн күршеһе Абзал.

— Уның һүгенеүе, мыжыуы — минең өсөн музыка ғына. Ә бына йырлай башлаһа — өйҙән сығып кит. Тауышы йәшелле-күкле, тимер бысҡандағы кеүек нервыны өйкәй.

— Бына тағы бер һорау, Ғәззәли ағай, — ти икенсеһе, Азат исемле йәш ир. — Ғәззә еңгәйгә юлбарыҫ ташланһа, һин ни эшләр инең?

— Һуң, ни эшләйем, бер ни ҙә эшләмәҫ инем. Юлбарыҫ үҙе башлаған икән, үҙе табыр.

*(Минәүәрә Камалиева, 1930 йылғы,*
*Кәҫле районы Ҡыҙыл ауылы)*

# Рамаҙан Вафин

## (1957)



Рамаҙан Александр улы Вафин 1957 йылдың 1 августында Силәбе ҡалаһында тыуа.

Бала сағы Ҡаштаҡ ҡасабаһында уҙа. Силәбе ҡалаһының 66-сы һанлы урта мәктәбендә уҡый. Совет Армияһында хеҙмәт иткәндә ҡаты ауырып китә һәм инвалид булып ҡайта.

1978 йылда, һауыҡҡандан һуң, Мәскәүгә юллана һәм «Мосфильм» киностудияһына эшкә килә. «Емельян Пугачев» фильмы эпизодында, «Маэстро с ниточкой» исемле фильмында киноға төшә. 1982–1991 йылдарҙа Силәбелә Эске эштәр министрлығында эшләй.

Уның әҫәрҙәре «Человек и закон», «Советская милиция» журналдарында баҫыла. «Чужаки» (1994), «Обрести брата» (2000) исемле китаптары донъя күрә. 1995 йылда «Чужаки» китабы баҫылып сыҡҡандан һуң, Эске эштәр министрлығының «Иң яҡшы китабы» тип табылып, махсус премияға лайыҡ була.

Әҫәрҙәрен рус телендә яҙа.

## ЮҒАЛҒАН БАЛАЛАР

*хикәйә*

Бәлә, бигерәк тә балалар бәләһе, күңелемде йәрәхәтләй, тыныслығымды юғалта. Бына был хәлде лә мин һаман онота алмайым.

Балалар йортона сабыйҙы алып китеп барам.

— Нисә йәш һеҙҙекенә? — тип һораны купелағы күрше ҡатын.

Өҫкө һикегә баланы йоҡларға һала-һала, мин:

— Нимә? — тип һораным.

— Улығыҙға нисә йәш, тим.

— Биш. Тик ул минеке түгел, дәүләттеке.

— Нисек инде дәүләттеке? Нимә, уның ата-әсәһе юҡмы ни? — тип ғәжәпләнде ҡатын.

— Ҡасандыр булған. Хәҙер юҡ.

Олежканың бәхетһеҙ тормошо тураһында ҡатынға һөйләргә тура килде. Атаһы бер берәҙәк булған. Әсәһенә иһә бала тик бәлә генә: эшләмәгән, күңелле йәшәргә тырышҡан. Һуңғы «кейәүе» сығып китергә ниәтләнгәс, әсә фатирына баланы бикләгән дә шул ир артынан сапҡан. Олежка көн буйына ас ултырған. Күршеләре ишекте асып керһәләр, иҫтәре китә: бала бысраҡ кейемдә, иҫке пальто ябынып карауатта ята. Бөтә ерҙә хәшәрәт, өҫтәлдә буш шешәләр, күгәргән икмәк, балыҡ һөйәктәре. Йыуындырып, ашатҡас, бала күңелләнеп китә, ниҙер әйтергә маташа. Тыңлап ҡараһалар, ул һүгенә икән! Был һөнәргә уны, «ҡыҙыҡ өсөн», оло ағайҙар өйрәткән. Бер нисә көндән әсә ҡайтып төшә лә тауыш күтәрә: «Минең бала, ни теләйем — шуны эшләйем. Мине өйрәтмәгеҙ...»

Бала менән бер аҙна самаһы йәшәй әсә. Тик тағы ла эске, тағы ла һүгенеүҙәр башлана. Был юлы әсә үҙенең сираттағы «һөйәркәһе» артынан баланы бикләмәйенсә саба. Унда бала ҡайғыһы юҡ. Сабый бысраҡ, ас көйө урам буйлап әсәһен эҙләп, саҡырып йөрөй.

Олежканы ташландыҡ өйҙә табалар, ә урамда — ноябрь. Баланы дауаханаға һалалар. Аҙғын ҡатынды әсәлек хоҡуғынан мәхрүм итәләр.

Шулай итеп, Олежка беҙҙең приемникка килеп эләкте. Беренсе көндәрҙә кешеләрҙән ситләште, ҡурҡып йөрөнө. Төндә, бына әсәйем килер, мине алып китер, тип уянды. Уныңса, әсәһе эшләп йөрөй. Ышанмаҫһығыҙ: ашағанда бутҡа ла, аш та ашамай, икмәк кенә һорай! Тимәк, өйҙә аш, бутҡа бешерелмәгән, туйынған бар ризығы икмәк кенә булған! Һәм һыуҙыр. Йылмайған саҡтары булды, шунан шаяра башланы, уйын бүлмәһенән уның сағыу көлөүе ишетелде. Ә нисек йырлай торғайны ул! Бигерәк тә айсберг тураһында... Бер һүҙ менән әйткәндә, Олежка беҙҙә

теремекләнде, бер кемдән дә ҡурҡмай башланы. Мине күреү менән йүгереп килә лә ҡулдары менән муйыныма һырыла, сикәһен минең биткә терәй, үҙенең шат күҙҙәре менән миңә ҡарай:

— Ә бөгөн беҙгә моряк килде. Ҙурайғас, мин дә моряк булам!

Өҫтәге һикенән илаған тауыш ишетелде. Мин бошоноп, һикереп торҙом. Олежка тороп ултырған да күҙҙәрен йоҙроҡтары менән ыуа.

— Ни булды, бәләкәс, насар төш күрҙеңме әллә?

Олежка мине ҡосаҡлап алды.

— Һинең яныңа киләһем килә, — тип ҡолағыма шыбырланы.

Мин уны ҡосаҡлаған килеш урыныма ултырҙым, сәстәренән һыйпаным. Янып торған зәңгәр күҙҙәре менән миңә ҡарап йылмайҙы ул. Мин уға көйләнем:

*Ҡояш океан артына*
*Китте йоҡларға.*
*Тик һин генә йоҡламайһың*
*Бер үҙең генә...*

*Диңгеҙҙә уттар яна,*
*Тулҡындар бәүелә.*
*Маяктар һүнерҙәр инде –*
*Тыныслыҡ килә.*

Олежка күҙҙәрен йомдо ла яңынан йоҡоға талды. Баланы әкрен генә үҙ яныма һалдым.

— Күҙенә ҡояш төшмәһен, простыня менән ҡаплағыҙ, — тип кәңәш бирҙе күршем.

Мин Олежканың йөҙөн ҡояш нурынан ҡапланым.

— Ниндәй матур малай, — тине юлдашым. Уның һүҙҙәре наҙ һәм мәрхәмәтлек менән балҡыны. — Һеҙ уға ниндәй йыр йырланығыҙ?

— Моряктарҙың бишек йыры. Уны минең дуҫым яҙған, — тинем мин ғорурланып. — Олежкаға ул бик оҡшай. Ул моряк булырға хыяллана. Булырмы-юҡмы, белмәйем, тик уның бәхетле булыуын, шат көлөүен, иламауын теләйем.

— Ундай әсәләрҙе бөтә халыҡ алдында хөкөм итергә кәрәк, — тине ҡатын ауыр һулап. — Балаларына ун һигеҙ йәше тулғансы мәжбүри эшләтергә, түләтергә кәрәк.

Мин сәстәре ағарған ҡатынға ҡараным: уның күҙҙәрендә Олежка өсөн ҙур һыҙланыу бар ине.

— Хөкөм итеүен иттеләр ҙә бит, ни файҙа? — тинем мин. — Ул әле лә кәйеф-сафа ҡороп йәшәй. Шуныһы ҡурҡыныс, ул тағы бала табасаҡ, уныһын да ташлап китәсәк...

— Кәкүк ул, — тине ҡатын, ярһып. — Ул үҙ балаһын ташлап киткән, ә мин нисәмә йыл Сашенькамды эҙләйем.

— Ә ул ҡайҙа?

— Белһәң ине... Ике йәшлек сағында һуғыш айырҙы. Һуғыш башланғанда беҙ Белоруссияла йәшәй инек. Партизандарға ярҙам иттек. Арабыҙҙа хыянатсы табылды, беҙҙе һатты. Фашистар килеп, беҙҙе, улым менән мине, машиналарға ултырттылар, башҡаларҙы келәт эргәһенә килтереп аттылар. Улар араһында әсәйем, ҡустым да бар ине. Нисәмә йыл үтһә лә, күҙ алдымда — өйҙәр яныуы, ҡан эсендә ятҡан минең ғәзиздәрем. Йөрәгемдә һаман да ҡуҙ ятҡан кеүек. Кисен беҙҙе мал вагондарына тейәп Польшаға алып киттеләр. Унда лагерға тултырҙылар. Улым менән бер генә төн бергә булдым. Иртә менән беҙҙе теҙеп ҡуйҙылар, фашистар эттәр менән уратып алды. Балаларҙы әсәләренән талап алғандарын күргәс, йөрәгем тетрәнде. Баламды күкрәгемә ҡыҫам, яуыз ҡулдар уны тарта, һөйрәй. Мин тағы ла ныҡ итеп ҡыҫам, бала мине ҡосаҡлап илай. Мин бирмәҫкә тырышам, мине таяҡ менән туҡмайҙар. Һалдаттар барыбер тартып алды — ҡаршы торорлоҡмо ни? Ярһып, уларға ташланам. Улар мине ергә йыҡтылар ҙа типкеләнеләр... Баракта ғына иҫемә килдем. Шул кистә үҙемә ҡул һалырға иттем, ләкин эргәмдәге бер мәрхәмәтле йән: «Түҙ, беҙ ҙә һинең хәлеңдә. Йәшәргә кәрәк!» — тип шыбырланы.

Ҡатын ауыр көрһөндө. Мин уның, үткәндәрҙе иҫкә төшөрөп, йөрәгенең нисек әрнеүен тойҙом. Барыһын

да онотаһы ине лә, тик ундайҙарҙы нисек онотаһың? Көндәр үтә торҙо. Һикегә килеп ятһам, Сашенькам күҙ алдыма килә: мине саҡыра, ҡулдарын һуҙа. Әгәр был йыртҡыстар, йыртҡыстар ҙа түгел, унан да яманлар — баламды берәй нәмә эшләтмәһәләр, үҙем иҫән ҡалһам, бөтәһенә лә түҙәсәкмен, улымды табасаҡмын, тип ант иттем.

Һуғыш бөттө. Мин улымды эҙләргә тотондом. Юлланым, төрлө яҡҡа хаттар яҙҙым. Тик бушҡа ғына. Сашенькам һаман минең күңелемдә, шомло төштәремдә йәшәй...

Ҡатын тынып ҡалды. Мин уның асыҡ, мөләйем йөҙөнә ҡарап, фажиғәле тормошонан тетрәндем. Күпме һыҡраныуҙар, күпме ҡайғы күргән бит: был ҡайғыларға түҙерлек ниндәй йөрәк кәрәк!

Иртәнсәк ишекте асып сыҡһам, теге ҡатын тәҙрә эргәһендә тора. Мине күргәс, ул яғымлы йылмайҙы ла:

— Хәйерле иртә. Нимә, уяндығыҙмы? Яҡшы, хәҙер сәй эсеп алырбыҙ, — тине.

Йыуынып, купеға индем. Күршебеҙ өҫтәлгә кәнфит-печеньелар ҡуйған, иртәнге сәй әҙерләй.

— Эй, юнга, тор, диңгеҙ көтә! — Мин Олежканы уяттым. Малай күҙҙәрен асып ҡараны ла арты менән әйләнеп ятты.

— Эй, туған, былай бармай. Әйҙә, тор! Оҙаҡ йоҡлай торған булһаң, матрос булыу юҡ һиңә.

Олежка һикереп тороп минең муйынымдан ҡосаҡланы, елкәмә менеп ултырҙы, шарҡылдап көлөп:

— Һин минең атым, алып кит мине! — тине. «Һыбайлым» менән купенан сыҡтым, атҡа оҡшатып, туалетҡа тиклем йүгерҙем.

Һуңынан беҙ сәй эстек. Олежка дүртенсе кәнфитте ашай һәм миңә күҙ ҡыҫа.

— Һин, убыр, етте, — тип шыбырлайым уға.

— Ашаһын, — тине ҡатын, сумкаһынан ике ҙур алма сығарҙы.

— Рәхмәт! — Олежка алманың икеһен дә эләктерҙе.

— Аша, балам, иҫәнлеккә булһын, — тине ҡатын. Үҙенең тауышы ҡалтыранды, күҙҙәренә йәш тығылды.

Сәйҙән һуң, күршем йыйына башланы. Тиҙҙән уның төшәһе туктальшы икән. Беҙ уның менән бик йылы хушлаштыҡ. Ул оялып киткән Олежканы күтәреп үпте. Поезд ҡуҙғалып китте. Оло ҡайғылы, ләкин киң күңелле ҡатын ҡул болғап ҡалды.

...Төшкөлөккә беҙ балалар йортонда инек. Документтарҙы әҙерләп бөтөп, мин Олежка менән хушлаштым да ишеккә йүнәлдем.

— Атай! — Сабый тауышы йөрәгемде телде. Олежка йүгереп килеп аяғымды ҡосаҡланы. Күҙҙәре тулы йәш. Мин сүгеп, уның ябыҡ ҡына иңдәренән ҡосоп, тынысландырырға тырыштым.

— Һин нимә, бәләкәс? Мин һиңә килермен, тиҙҙән килермен. — Директор саҡырып алған тәрбиәселәр баланы диванға ултыртып, йыуата башланылар.

— Тиҙерәк китегеҙ, — тип шыбырланы береһе. Мин ишеккә ташландым. Арттан йәнә:

— Атай, китмә! — тигән тауыш яңғыраны. Мин коридор буйлап барам, ҡолағымда Олежканың тауышы. Йөрәк ҡыҫыла, тын ҡыҫыла. Йорттан нисек сыҡҡанымды хәтерләмәйем. Донъяла бөтәһе тарафынан да онотолған малай өсөн үҙемде ғәйепле һанап, күңелһеҙ уйҙар менән урам буйлап барам...

## Урал Ҡолошов

## (1965)

Урал Фәләх улы Ҡолошов 1965 йылдың 1 майында Силәбе өлкәһенең Сосновка районы Тәгеш ауылында тыуа.

1982 йылда Мөслим урта мәктәбен тамамлай. Силәбелә һөнәрселек училищеһында рәссамлыҡҡа уҡый. 1984–1986 йылдарҙа Совет Армияһы сафында хеҙмәт итә. Силәбе дәүләт сәнғәт академияһында белем ала. Сосновка районының Долгодеревеское ҡасабаһында сәнғәт мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй.

Ул әүҙем йәмғиәт эшмәкәре булараҡ Силәбе өлкәһендә милли әҙәбиәтте үҫтереүҙә ҙур эш башҡара. 1998 йылда Сосновка районында «У камина» исемле

әҙәби берекмә ойошторып, етәкселек итә.

Уның тәүге әҫәрҙәре студент газетаһында баҫыла. Шиғырҙары һәм хикәйәләре «У камина», «От Урала до Невы», «Силәбе шишмәләре», «Һөйөнсө», «Аҫылташтар йыйыр саҡ», «Чиләбе моңнары», «Берез Уральских шум» исемле әҙәби йыйынтыҡтарға ингән. 2006 йылда «Рәхмәт көсө» (Өфө), «Мыслью доброю о вечном» (Силәбе) исемле китаптары донъя күрә.



## КҮҢЕЛ ЙЫЛЫҺЫ

Бер заман ике ҡошсоҡ осрашҡан: береһе төньяҡтан көньяҡҡа осоп барған булған, икенсеһе — көньяҡтан төньяҡҡа. Быларҙың икеһе лә тәүлектәр буйы юлда булғанлыҡтан, бик ныҡ арығандар икән, шуға күрә лә, ял итергә тип, икеһе лә бер үк ағастың бер үк ботағына ҡунғандар. Күпмелер тын алғас, төньяҡтан көньяҡҡа осоп барған ҡошсоҡ һорай ҡуйған:

— Йә, унда, көньяҡта тормош нисек? Йылымы әллә беҙҙең яҡтағы кеүек үк һыуыҡмы? Ем бармы? Күршетирә һәйбәтме?

Көньяҡтан төньяҡҡа осоп барғаны былай тигән:

— Көньяҡ — көньяҡ инде ул, унда бөтәһе лә бар: ем дә етерлек, йылы ла, күршеләр ҙә ҡәҙимге күршеләр кеүек, ғөмүмән, барыһы ла бына тигән!

Беренсе ҡошсоҡ аптырашта ҡалып:

— Улай булғас, һин ни эшләп төньяҡҡа китеп бараһың һуң? — тигән. — Унда бит һыуыҡ, ем табыуы ла ауыр, күрше-тирә лә уҫал, аралар ҙа һалҡын көн кеүек — улар менән бергә йәшәүҙәре бик ҡыйын. Бәлки, һуң булмаҫ борон һиңә кире боролорға кәрәктер?

Ләкин көньяҡтан осоп килгәне:

— Юҡ инде, дуҫ, — тип яуап биргән, ти. — Һин мине йәлләгәнһең икән, тимәк, һинең йөрәгең мәрхәмәтле, күңелең дә саф, игелекле. Бына шундай күңел йылыһы эҙләй инем мин...

Ҡошсоҡ күккә күтәрелгән дә ҡотопҡа ҡарай осҡан, ти.

## БӘХЕТ ТУРАҺЫНДА ӘКИӘТ

Бәхетте һәр кем үҙенсә аңлай. Уны эҙләп табып булмай, тормоштоң һәр мәлендә тоя, күрә белергә генә кәрәк.

Шулай бер ваҡыт урманда өс ат осраша. Баҡһаң, өсөһө лә бәхет эҙләп сыҡҡан икән. Ҡояш байыған ерҙә мәңгелек бәхет бар, тип һөйләр булған, ти, әсәләре. Тик уның ҡайҙа икәнен бер кем дә белмәгән. Был аттар һөйләшеп, бәхетте бергәләшеп эҙләп ҡарарға булған.

Эйелеп үлән утламай саба ла саба былар. Шулай саба торғас, юлдың бөткәнен һиҙмәй ҙә ҡалалар. Айырылырға ваҡыт етәлер, тип уйлай улар, һәм өсөһө өс яҡҡа китә. Тирә-яҡ шул көйөнсә кеүек, шул уҡ йылға, шул уҡ урман, баҫыуҙар, тик холоҡтары ғына өсөһөнөң өс төрлө булып сыға. Беренсеһе юлға сығыу менән, алдында бер нәмә лә күрмәй саба ла саба. Бәхетте иң тәүҙә барып табырға тигән маҡсат менән саба ул.

Икенсеһе һеләүһен кеүек һаҡ ҡына, тирә-яҡҡа ҡаранып ҡына саба, ә өсөнсөһө яйлап атлауын дауам иткән. Кәрәк булһа, хайуандарға ярҙам иткән. Шулай итеп, көн буйына арып, бәхеткә барып етә алмай, тәмле итеп төш күреп йоҡлап китә. Төшөндә ул бер ғәжәп матур урманға барып сыҡҡан, имеш. Унда бәләнән ҡотолған бөтә йәнлектәр йыйылған, ти. Тик тәмле төш оҙаҡҡа һуҙылмай. Таң ата, күҙҙәр үҙҙәренән-үҙҙәре асыла. Зәңгәр күктә ҡояш үҙенең яҡты нурҙарын ергә һибеп тирә-яҡты йылыта, ти.

— Ниндәй рәхәт, мин бәхетле! — тип ҡысҡырғыһы килә аттың.

Ә теге аттарҙың ҡурҡағын бүреләр ашаған, алдан сапҡаны һаман да үҙ хыялдарының артынан саба, ти.

# «ҠАЛДЫ»* КҮЛЕ

Борон-борон заманда, әле бер ерҙә лә күл булмағанда, күл буйында ауылдар ҙа юҡ саҡта, шау килеп торған урманда йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Уларҙың өс улдары булған. Бабай шул тиклем изге күңелле, сихри кеше була, хайуандар телен дә аңлаған, ҡоштар ҙа уның өсөн генә баш осонда һайраған, хатта, ул атлап үткәндә, сәскәләр ҙә уға һонолоп үҫеп киткән. Әммә ваҡыт үтеп торған, бабайға ла Алла янына «юл алырға» көндәр һанаулы ғына ҡалған. Уландарын янына саҡырып алып, тәбиғәткә күрһәтеп былай ти бабай: «Васыят итеп һеҙгә ошо матурлыҡты ҡалдырам. Иң ҡәҙерле, иң ҡиммәтле ҡомартҡы ул — тәбиғәт, ошо мәңгелек серле донъя менән гармонияла ғына ысын бәхет табырһығыҙ. Ә ҡалғанын һеҙ аҡыл, йөрәк һәм нәфсегеҙ ҡушҡанса эшләгеҙ. Һеҙгә юлды артабан үҙегеҙгә һайларға. Ошо мәңгелек матурлыҡты һаҡлағыҙ, быуындан быуынға ҡалдырығыҙ», — тигән дә, теге донъяға китеп барған.

Ә улдары инде атаһының ошо һүҙҙәренең төп мәғәнәһенә төшөнөп бөтмәйенсә, васыятҡа ҡолаҡ һалмай, артабан үҙҙәренсә тормош иткәндәр.

Тәбиғәт аталарына алтынды ла, көмөштө лә йәлләмәй биреп торғанлыҡтан, уландар был байлыҡтың «тәмен» белеп алған булғандар. Бына улар зиннәтлек эҙләп ер ҡаҙый башлағандар. Бер-береһенән уҙышып, бөтә көстәрен ер ҡаҙыуға бирең, бик тәрән ҡаҙып та тапмағандар, хәлдән тайып йоҡлап киткәндәр. Иртәгеһен ҡояш күренеү менән уяныи, соҡорға табан атлағандар. Унда йымылдап, ниҙер күҙҙәрҙе сағылдырып торған. Ҙур ағалары ҡояш нурҙарына сағылып, емелдәп ятҡан һыуҙы алтын-көмөш сағыуы тип һоҡланып йүгергән. Сағыу нурҙарҙан һуҡырланған ағаларын ҡустылары туҡтата ла алмаған. Байлыҡ

---

* Ҡалды — Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Тәгеш ауылы янындағы ғәжәйеп матур күл.

артынан сапҡан беренсе уланға ни булғандыр, бер кем белмәй. Бәлки, бөгөнгө көндә байлыҡ тип изгелекте, матурлыҡты күрмәй йүгереүселәр ошо кешенең тоҡомолор?.. Уны Алла ғына белә.

Һыу туҡтамай, ҡалҡҡандан-ҡалҡҡан, бик ҙур ерҙе биләп алған. Үтә күренмәле, бөтә тереклекте үҙенә йәлеп иткән һыуға йәнлектәр, ҡоштар ылыҡҡан. Һыу йәнлектәре барлыҡҡа килгән. Ағалы-ҡустылы ошо ожмахта артабан тормош иткәндәр. Уртансы улан хайуандарға һунар иткән, балыҡ тотҡан, ҡоштар атҡан, ағастарҙы ҡырҡып өйҙәр һалған. Тик һыу ҡалҡҡандан-ҡалҡҡан, һалған өйҙәрен йотоп, йыйған байлыҡтарын һыу төбөнә алып торған. Уртансы улан тәбиғәткә асыуланып, емерек өйҙәр урынына тағы һалған, хайуандарҙы күберәк ҡырған, әммә байый алмаған. Берҙән-бер көндө ҡомһоҙ ағаһы бөтөнләй юғалған. Ҡайҙа булған ул, бары тик Алла ғына белә. Бәлки, нәфсеһен тыя алмай, тәбиғәтте бысратыусы, бейек-бейек йорттар һалдырыусы кешеләр ошо уртансы улан тоҡомолор? Ағалары юғалып бөткәс, иң кесе ҡустылары үҙ уйҙарына бирелеп, йыраҡҡа барып ултырған. Уның тәбиғәткә һоҡланып, һәр бер бөжәктә ниндәйҙер мөғжизә күреүенә ағалары көлөп ҡараған булған. Иң һуңғы улан бер үҙе ҡалғас, һыуҙың йыйылып күл яһауына һоҡланып бөтә алмаған, ҡоштар һайрауына таң ҡалып яр ситендә ултырған. Ҡояштың ярҙың икенсе ситенә барып ятыуы уны ҡыҙыҡһындырған. Тәбиғәт уға көн дә ниндәйҙер серен асҡан. Араларынан ҡасып бөткән хайуандар кире килгән, унан бөтөнләй ҡурҡмай янында йөрөй башлағандар. Ағалары юҡҡа сығарған матурлыҡты кесе улы ҡайтарған, тәбиғәт менән гармония табып йәшәгән. Һәр таңды ул яҡтылыҡҡа саҡырып тыуған ҡояшты шатланып ҡаршы алған. Ҡояш үҙ ҡосағына алған бөтә тереклекте яратҡан. Һәр көн һайын шулай уйланып, матурлыҡты күреп, атаһы ҡасандыр әйтеп ҡалдырған васыятты иҫләп, йөрәк түрендә ҙур изге тойғолар уянған. Ҡырҡ йыл үтеп киткәс, ошолай тәбиғәт менән килешеп, бәхет тигән оло хисте тойған. Ә тәбиғәт

уның изге йөрәге, саф уйҙары өсөн бүләк итеп сихри көс менән һыуҙы туҡтатҡан. Әммә, кешелеккә иҫкәртеп микән, һәр ҡырҡ йыл һайын ошо күл ташып, кире ҡайта икән. Кесе ул, атаһының васыятын иҫләп, ҙур сауап алған, тағы ла ныҡыраҡ шатлыҡтар күреп, ер ситендә баҡса үҫтереп, өй төҙөп йәшәп киткән. Әлеге көндә лә ошо хозур, матур урында төрлө емеш ағастары үҫә. Халыҡ ошо күлде «Ҡалды» тип йөрөтә. Ысынлап та, был урын беҙгә Алла бүләге булып тороп ҡалған бит. Әгәр кесе улы ла ағалары кеүек ҡомһоҙ булһа, һыу баҫыр, кешелек, матурлыҡ булмаҫ ине. Кесе ул ошо легенданы үҙенең улдарына, улар ейәндәренә һөйләп ҡалдырып, беҙҙең көнгә килеп еткән. Бәлки, бөгөн беҙҙең арала тәбиғәтте аңлап, уның менән гармонияла йәшәгән талантлы, изге кешеләр ошо кесе уландың нәҫелелер?

Уны Алла үҙе генә белә...

## Файза Мәғәсүмова

## (1966)



Файза Зәбир ҡыҙы Мәғәсүмова 1966 йылдың 5 майында Башҡортостандың Әбйәлил районы Моораҡай ауылында тыуа.

Байым урта мәктәбендә уҡый. Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһында педагогия техникумын тамамлай. Магнитогорск металлургия комбинатында лаборант булып эшләй.

Уның тәүге шиғырҙары район газетаһында баҫыла. Шиғырҙары «Һөйөнсө», «Аҫылташтар йыйыр саҡ», «Силәбе моңнары» исемле әҙәби йыйынтыҡтарға ингән. «Ынйыҡай сәскәһе» исемле балалар өсөн шиғырҙар китабы 2006 йылда донъя күрҙе.

Силәбеләге Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәһенең ағзаһы.

## ҠУЯНҠАЙ

— Эй, ҡуян, ҡуян...
Йоҡоңдан уян.
Өңөңә төлкө
Килә, — ти Өкө.

— Рәхмәт, Өкө дуҫ,
Ҡолаҡ минең һаҡ,
Яуыз дошмандан
Юлым, — ти, — йыраҡ.

## ЗӘҢГӘР ТАҪМА

Зәңгәр таҫма һатып алды
Әсәйем миңә:
— Күҙҙәрең дә зәңгәр, ҡыҙым,
Килешер һиңә.

Әсәкәйем үрҙе сәсем
Таҫмалар менән.
Тышҡа сыҡҡас, көнләштеләр
Дуҫтарым минән.

## МЫЯУ ҘА МЫЯУ

Мыяу ҙа мыяу...
Йырлай бесәйем,
Сөнки башҡа йыр
Белмәй кескәйем.

## БЫҘАУҠАЙ

Беҙҙең быҙау мөгөҙһөҙ,
Үҙе матур бер һүҙһеҙ,
Шәкәйҙәре аҡ ҡына,
Маңлайында аҡ тамға.

Ауыҙында тештәре —
Ҡауындың емештәре.

Күргең килһә, кил беҙгә,
Уйнарбыҙ өсәү бергә.

## ИКЕЛЕ БИЛДӘҺЕ

Ике алды Байрас бөгөн
Өйгә эшен эшләмәй.
Нисек хәҙер ҡайта өйгә,
Ҡурҡа малай шелтәнән...

Икене өскә төҙәтә,
Тирә-яғын күҙәтә.
— Дуҫтар күрә ҡалһа
Оят, — ти, — күрәләтә.

## Ҡамса Мортазин
## (1966)



Ҡамса Дәүләтбай улы Мортазин Башҡортостандың Учалы районы Мулдаш ауылында 1966 йылдың 1 июнендә тыуа.

1983 йылда Мулдаҡай урта мәктәбен тамамлай. Ил сиге ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итә. Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡый, 1989 йылдан уҡытыусы булып эшләй. 1995 йылдан Силәбе дәүләт университетында башҡорт әҙәбиәтен уҡыта. 1997 йылдан Силәбе өлкәһенең Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәһенең яуаплы сәркәтибе, 2003 йылдан уның етәксеһе.

«Һаумы, Ҡояшҡай!», «Мейәс буйы» исемле китаптар авторы, «Силәбе шишмәләре», «Һөйөнсө», «Арғаяш башҡорттарының рухи донъяһы» исемле китаптарҙың төҙөүсеһе. Филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.

## МЕЙӘС БУЙЫ

Мейәс кенә буйы, һай, матур ҙа,
Биг(е)рәк күркәм сыуаҡ көндәрҙә.
Яҙҙар етһә, ҡоштар төйәк итә,
Тынмай һайрай айлы төндәрҙә.

Мейәс кенә буйы аҡ ҡайынлыҡ,
Ҡайындарҙы һөйә күңелем.
Сит яҡтарҙа күптер гүзәллектәр,
Тик ошонда ҡатты һеңерем.

Ниндәй генә һыуҙар кисмәнем дә,
Хәтфә болондарҙан үтмәнем.
Аңланым мин, Мейәс, һиндәй көләс
Йылға берәү генә икәнен.

## ТОРМОШ

Тормош бары оло бер яу һымаҡ,
Ә мин — яугир тиңһеҙ алышта.
Сапҡын йылдар йәнде яраланы,
Тамғаларын һалды яҙмышҡа.

Аһ иткәндәй саҡтарым да булды,
Ләкин һуңғы уҡты һаҡланым.
Тоғро һаҡсы булып йәшәү утын
Намыҫ ҡушҡанынса яҡланым.

Тормош, тормош!
                    Хаҡлыҡ яулағанда
Тыныс ҡалыу миңә ят булыр.
Ҡайһы ғына һаҡҡа ҡуйһаң да һин,
Ҡуйынымда ятҡан ат булыр.

## УЙҘАРЫМ

Уйың әгәр миңә ҡайтһа, Рәми,
Кешелек тип яныр инем,
Илһөйәргә аҫыл йырҙарымдан
Тере һәйкәл ҡойор инем.

Аҡмуллабыҙ рухы ҡайтһа әгәр,
Ерҙә илсе булыр инем,
Диңгеҙ кеүек шаулы илкәйемдә
Иман нурын сәсер инем.

Мостай йәне ҡайтһа әгәр миңә,
Утты, һыуҙы кисер инем,
Ватан өсөн дуҫлыҡ күперҙәрен
Таштан, уйҙан төҙөр инем.

Тик ҡайтмаһын инде еребеҙгә
Ел-дауылдың ҡотһоҙ туйҙары.
Ташламаһын, әйҙәп торһон ине
Ирәмәлгә мине уйҙарым.

## МӘҢГЕ ИҪЕМДӘ

Ай күрҙе лә ҡояш алды
Яҡты һыныңды.
Тарих ҡояш итеп тойҙо
Ҡайнар тыныңды.

Шиғырҙарың доға кеүек
Беҙҙең күңелдә.
Илгә ҡалҡан изгелегең
Халыҡ телендә.

Табынабыҙ, Салауат батыр,
Һинең исемгә.
Матурлыҡ тип яу сабыуың
Мәңге иҫемдә.

## КИТАПХАНА

*Силәбенең Шәйехзада Бабич*
*исемендәге милли*
*китапханаһына – 100 йыл*

Алтын һүҙҙәр һайлап шиғырыма,
Йөрәк үҙе ҡушты яҙырға,
Китапхана, бөгөн күкрәгеңә
Миҙал итеп маҡтау ҡаҙарға.

Ағиҙелдәй йырлы ғүмереңә,
Тауҙай эштәреңә шатланам.
Ватаным тип ишек асаһың һин,
Илгә юлдар һинән башлана.

Китап йорто — илкәйемдең ҡото,
Дуҫым булып бағаң күҙемә.
Ил ҡанаты — шағирҙарҙы сөйҙөң,
Ҡеүәт бирҙең халыҡ һүҙенә.

Мәғрифәтле илдең киләсәге,
Китапхана, һинең ҡулыңда.
Аҡмуллалай, Бабичтарса йәшәп,
Һынауҙарҙы үттең юлыңда.

Алтын һүҙҙәр генә һайлай-һайлай,
Йөрәккенәм ҡушты яҙырға,
Китапхана, бөгөн күкрәгеңә
Миҙал итеп маҡтау ҡаҙарға.

## Зимфера Ширванова

## (1970)



Зимфера Ғәфүр ҡыҙы Ширванова Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Ҡаҙаҡбай ауылында 1970 йылда тыуа.

Тәхәлем урта мәктәбен тамамлай. Бухгалтерҙар курсын тамамлағас, «Тәхәлем» совхозында һөнәре буйынса эшләй. 1993–1999 йылдарҙа Силәбе дәүләт университеты филология факультетының Көнсығыш бүлегендә уҡый. 1999 йылдан Тәхәлем урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. 2007 йылда мәктәптә «Шишмәкәй» исемле әҙәби түңәрәк ойоштора.

Уның шиғырҙары «Ҡоншаҡ моңдары» (2009), «Тәүге ҡарлуғастар» (2009) исемле әҙәби йыйынтыҡтарға ингән.

## ҒӘЗИЗ ӘСӘЙЕМ

Әсәйем ете балаһын
Ете доғанан әйләп,
Йәйғорҙоң ете төҫөнә
Һәр беребеҙҙе биләп,
Йылы ҡосағында беҙҙе
Наҙлап ҡына үҫтергән,
Бәпләп кенә үҫтергән.
Был донъяла йәшәүҙең
Иң изге ҡанундарын,
Халҡыбыҙҙың иң яҡшы
Әхлаҡи сифаттарын,
Иң һәйбәт йолаларын
Күңелемә һеңдергән,
Сабый саҡтан күндергән.

## ҺИНЕҢ ИСЕМ

Уйымда гел һинең исем,
Һинең үткер ҡарашың...
Уйымда тик һин, бергенәм,
Һинең атлап барышың.
Исемеңде әйтеү менән
Ай йылмая төндәрен.
Ә йондоҙҙар бәхет юрап,
Төрләндерә төҫтәрен.
Һинең исемде ишеткәс,
Бар йыһан моңға сума,
Ер шарылай баш әйләнә:
Моғайын, «сошла с ума».

## МӨХӘББӘТ ТҮГЕЛМЕ?

Әгәр һинең күңелеңдә
Хистәр тулыша икән,
Тиктомалға әгәр үҙең
Юғалып ҡалаң икән;
Тынғы тапмай төндәрең дә
Йоҡоһоҙ үтә икән,
Тыңла әле йөрәгеңде —
Һөйөү түгелме икән?

## Лилиә Әхмәҙиева
## (1977)



Лилиә Ишбулды ҡыҙы Әхмәҙиева 1977 йылдың 8 ғинуарында Башҡортостандың Ишембай районы Маҡар ауылында тыуа.

1999 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Силәбе өлкәһенең Арғаяш педагогия училищеһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, бер үк ваҡытта Арғаяш районы мәғариф бүлегендә методист булып эшләй.

Лилиә Әхмәҙиеваның тәүге шиғырҙары Башҡортостан матбуғатында баҫыла. Уның әҫәрҙәре «Һөйөнсө», «Аҫылташтар йыйыр саҡ», «Силәбе моңнары» әҙәби йыйынтыҡтарында донъя күрҙе.

## ЙЫР ҒҮМЕРЕ

Тауҙар йоҡлай әле... Ҡояш апай
Күптән тороп эшкә тотонған.
Тауҙы уятырға баҙмайынса,
Юрған булып томан тартылған.

Йырсы ҡоштар ҡояштан да өлгөр,
Таң һарыһын улар көтәме ни?!
Йыр ғүмере өсөн ҡояш сығып,
Байыу аралары етәме ни?!

* * *

Мин — томбойоҡ
һинең ҡулдарыңда,
Мин — йондоҙмон
һинең күгеңдә,
Мин — ямғыр тамсыһы
тәҙ(е)рәңдә,
Мин бер йәнмен
һинең тәнеңдә.

Аҡ томбойоҡ кеүек
бойоҡһам да,
Йондоҙ булып балҡып
янһам да,
Һине һағынып, йәнем,
йәшәйем мин
Ҡайҙа ғына булһам,
барһам да.

## КҮКТӘРГӘ ОСА ЙӘНЕМ...

Төн булдымы, күккә оса йәнем
Эҙләп һине, һинең йөрәкте.
Барлығыңды тоя бөтә тәнем,
Һин беләһең миңә кәрәкте.

Йондоҙҙарҙан һине һорай-һорай,
Атылам мин бейек күктәргә.
Шәүләң юҡ микән тип ҡарай-ҡарай,
Мөрәжәғәт итәм күптәргә.

Ҡайҙа һуң һин, йәнем, ҡайҙа булдың,
Оҙаҡламай ата алһыу таң?
Йондоҙ булып атылмаһаң да һин,
Ҡулдарыма тамсы булып там.

## ҠАР ЯУА

Һүлпән генә ҡарҙар яуа,
Тышта ниндәй күңелле!
Ниндәй рәхәт! Ҡыш көйөнә
Йырлап тора күңелем.

Йырлай-йырлай тау башынан
Киттем елдереп төшөп.
Тик ҡурҡаҡтар ғына тора
Елдә, буранда өшөп.

# Фидәрит Хафизов

## (1982)



Фидәрит Фәрит улы Хәфизов 1982 йылдың 25 майында Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Көҙәш ауылында тыуа.

1999 йылда Көҙәш урта мәктәбен көмөш миҙалға тамамлай. Силәбе дәүләт университетының филология факультетында башҡорт бүлеген тамамлай. Студент йылдарында театр һәм ҡурай түңәрәктәренә йөрөп сәнғәт серҙәрен үҙләштерә. 2004–2005 йылдарҙа Силәбе дәүләт университетында башҡорт теле уҡытыусыһы. 2005 йылдан МВД органдарында эшләй.

Фидәрит Хафизовтың тәүге әҙәби тәжрибәләре «Һөйөнсө» (2003) йыйынтығында баҫыла.

## БЕР ТИГӘС ТӘ НИ ЯМАН?

*(ҡобайыр)*

Бер тигәс тә ни яман?
Ағай-эне аралаш
Берҙәмлек булмау яман.

Ике тигәс тә ни яман?

Ялан Ҡатай, Юрматы,
Меңле, Тамъян, Үҫәргән,
Ҡаҙаҡ, Әйле, Ҡыпсаҡтар,
Бала Ҡатай — ете ырыу —
Илһеҙ ҡалһа — шул яман.

Өс тигәс тә ни яман?
Иҙел, Нөгөш, Уралды,
Ыҡ, Ҡариҙел, Мейәсте,
Иген, болон, туғайҙы
Ҡором, ағыу ҡаплаһа,
Тимер аяҡ тапаһа,
Баҫып килгән бәләгә
Өнһөҙ булһаҡ — шул яман.

Дүрт тигәс тә ни яман?
Дәртле, көләс балаңа,
Уны баҡҡан ҡатыныңа,
Ҡайның менән ҡәйнәңә
Шатлыҡ менән бәхетте
Айырмаһаң — шул яман.

Биш тигәс тә ни яман?
Билең биреп сырхауға,
Илле түгел, туҡһанға
Етә алмаһаң — шул яман.

Алты тигәс тә ни яман?
Урмандағы йәнлектең
Кәрәклеген аңламай,
Аңһыҙ булған һунарсы,
Аусы булһаҡ — шул яман.

Ете тигәс тә ни яман?
Ерһеҙ, һыуһыҙ, һауаһыҙ,
Противогаз һурғылап,
Ҡомло «дарья» гиҙгеләп,
Киләсәктә имгәкләп
Йөрөр булһаҡ — шул яман.

Һигеҙ тигәс тә ни яман?
Һикһән йәшлек атайың
Әсәйеңде ҡултыҡлап,
Икәү бергә урмандан
Сана менән артмаҡлап
Утын алһа — шул яман.

Туғыҙ тигәс тә ни яман?
Туҡһан туғыҙ ғалимға
Бер аҡыллы булмаһа,
Ғилем алға бармаһа,
Бер кем яҙа белмәһә,
Был осраҡта — шул яман!

Ун тигәс тә ни яман?
Бер тигәс тә, ун тигәс тә,
Йөҙ тигәс тә, мең тигәс тә
Аңһыҙ һанау — шул яман.

# Юлиә Вәлиева

## (1982)



Юлиә Мельс ҡыҙы Вәлиева 1982 йылда Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Баязит ауылында тыуа.

Ҡоншаҡ районының Бүре урта мәктәбендә уҡый. 2006 йылда Силәбе дәүләт университетының филология факультеты Көнсығыш бүлеген ҡыҙыл дипломға тамамлай.

Әҙәби ижад менән студент йылдарында шөғөлләнә башлай. «Ҡарлуғас» әҙәби түңәрәгенең әүҙем ағзаһы була.

Уның шиғырҙары «Һөйөнсө» (2003), «Аҫылташтар йыйыр саҡ» (2006), «Чиләбе моңнары» (2007), «Тәүге ҡарлуғастар» (2009) исемле йыйынтыҡтарҙа донъя күрә.

### ШИҒЫРҘАРЫМ

Шиғырҙарым — юлдаштарым,
Рухи донъям өлгөһө.
Шиғырҙарым — дуҫ-иштәрем,
Күңелемдең көҙгөһө.

Улар минең ҡояшым хәс,
Ә нурҙары — һүҙҙәрем.
Тирә-яғым шундай күркәм:
Ҡамашалар күҙҙәрем.

Шиғыр — ғүмер асылдарым,
Ташта үҫер гөлдәрем.
Шиғыр — тормош фасылдарым,
Һеҙһеҙ йәмһеҙ көндәрем.

Мин йыйырмын бер саҡ яҙҙың
Иң сағыу шәлкемдәрен;
Ана шул саҡ өләшерҙәр
Күңелем йәшлектәрен.

## БӘХӘС

Йөрәк әйтте: «Һөйәм», — тип,
Аҡыл әйтте: «Тыям», — тип.
Йөрәк әйтте: «Ҡыуанам», — тип,
Аҡыл әйтте: «Диуана», — тип.

Йөрәк әйтте: «Осам», — тип,
Аҡыл әйтте: «Тотам», — тип.
Ҡайһы дөрөҫ? Ҡайһы ялған?
Төп ҡағиҙә ҡайҙа ҡалған?

## ҺӘЙКӘЛ

Ағиҙелдең текә ярҙарында
Салауат батыр килеп туҡталған.
Азатлыҡ һәм ирек, тиеп үҙе
Мәңгелеккә, гүйә, уҡталған.

Башҡортомдоң рухи һәләтен һәм
Һәләкәтен тойған үҙендә!
Үҙ халҡының үткән тарихы ла
Сағылғандай уның йөҙөндә.

Ике быуат ваҡыт уҙһа ла бит,
Салауаткай беҙҙең йөрәктә!
Заман елдәренә бирешмәҫтәй
Салауаттай ирҙәр кәрәк тә!

# Альвина Мөхәмәтйәнова

## (1994)



Альвина Харис ҡыҙы Мөхәмәтйәнова 1994 йылда Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Ҡобағош ауылында тыуа.

Ҡоншаҡ районының Тәхәлем урта мәктәбендә 9 класты тамамлай. Музыка мәктәбендә һәм «Шишмәкәй» әҙәби түңәрәгендә шөғөлләнә. Өфөлә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се һанлы Башҡорт республика гимназия-интернатында белем ала.

2006 йылда Урал федераль округының 3-сө Халыҡ-ара география олимпиадаһында баҡыр миҙал яулай. 2007 йылда Силәбе өлкәһендә география буйынса Халыҡ-ара география олимпиадаһының дипломанты була. 2009 йылда Силәбе өлкәһендә туған тел бәйгеһендә еңеүсе.

Уның тәүге хикәйәләре «Аманат» журналы, «Йәншишмә» газетаһында баҫыла. Хикәйәләре «Тамсыҡай» (2006), «Ынйыҡай» (2008) исемле әҙәби йыйынтыҡтарға ингән. «Төймә лә бүләк» исемле тәүге китабы 2009 йылда Силәбелә донъя күрә.

## АЛЛА БИРҺӘ

Бер ауылда әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың биш йәшлек улы булған. Бабай колхозда мал ҡараусы булып эшләгәндә, ҡатнаш мал аҙығы урлаған өсөн байтаҡ ваҡыт милициянан йәшеренеп йөрөгән, тиҙәр.

Бер көндә әбей ҡоймаҡ ҡойорға керешкән. Атаһы менән улы өҫтәл янында көтөп ултырған. Улының түҙемһеҙлеген күреп атаһы:

— Түҙгән – түш итен ашаған. Бына хәҙер ҡоймаҡ ашарбыҙ, — тигән.

— Алла бирһә, тип әйт, картлас! — тигән әбейе.

— Алла бирһә лә, бирмәһә лә барыбер ашарбыҙ, — тигән бабай.

Һүҙ көрәштереп ултырғанда, ишек шаҡығандар. Бабай шул арала өҫтәл аҫтына шыуып төшкән дә ҡуйған.

— Кем унда? — тип һораған хужабикә.

— Ишекте асығыҙ! Милиция! — тигәндәр тыштан.

Өйгә ингәс, тәртип һаҡсылары хужаны һорағандар.

— Белмәйем, әллә ҡайҙа йөрөй. Өйҙә булғаны юҡ, — тигән әбей.

Милиционерҙар өйҙө тентегәндәр, ләкин бабайҙы тапмағандар.

Шул ваҡыт аш-һыу бүлмәһенән малайы йүгереп сыҡҡан. Ул, ҡул болғап, ағайҙарҙы саҡырған. Барыһы ла йыйылғас, ул өҫтәлдәге ашъяулыҡты асып ебәргән дә «һа-айт» тип атаһына ҡысҡырған...

...Бабай тейешле язаһын алған. Ул өс тәүлек хоҡуҡ төҙәтеү урынында ултырып ҡайтҡан. Шунан ишеген әкрен генә шаҡылдатып:

— Ҡарсыҡҡай, Алла бирһә, ишекте ас әле, — тип әйтә икән.

## «НЕ ТРОНЬ!»

Мозафар бабай менән Таҡыя әбейҙең Илһам исемле бер генә улдары бар. Ул бик тәртипле егет икән. Эшкә тотонһа, шартлатып эшләй, уҡыуҙа ла ҡалышмай.

Илһам мәктәпте тамамлағас, ҡалаға барып уҡырға инә лә, ҡала донъяһына сума.

Йылдар үтә. Илһам һайлаған һөнәре буйынса белгес булып ҡалала эшләй. Ул өйләнергә уйлай. Тик уның яратҡан ҡыҙы мәрйә булып сыға. Әбей менән бабай улдарының бәхетенә ҡаршы тормай, үҙ ризалыҡтарын биреп, гөрләтеп туй үткәрәләр.

Йәштәр ҡалала йәшәй. Уларҙың үҙ эштәре, үҙ донъялары, үҙ балалары...

Байтаҡ ваҡыт үткәс, бабай менән әбейҙе балалары ҡунаҡҡа алып ҡайталар. Улы менән килене уларҙы

шатланып, бик ҙур хөрмәт менән ҡунаҡ итә. Ләкин ҡунаҡтарҙың муйнаҡҡа әйләнер ваҡыты ла үҙен оҙаҡ көттөрмәй. Быларға килендәре бер нәмәгә лә тейергә рөхсәт итмәй башлай. Быны тотһалар ҙа: «Не тронь!», тегеһенә тейһәләр ҙә: «Не тронь!» — тип кенә тора. Асыуланып, әбей менән бабай, тоҡсайҙарын алып, ауылға ҡайтып китәләр.

Ҡайтҡас, ауылдаштары уларҙан:

— Ҡайҙан киләһегеҙ һуң? — тип һорайҙар.

— «Не тронь» ҡалаһынан, — тип яуап бирәләр.

— Бәй, ҡайҙа һуң ундай ҡала? — тип аптырашалар ауылдаштары.

Таҡыя әбей менән Мозафар бабай бойоҡ ҡына:

— Йыраҡ, йы-раҡ, — тип шым ғына өйҙәренә йүнәләләр.

## ПОЧЕТ ГРАМОТАҺЫ

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғандан һуң ауылдарҙа тормош йәнләнә. Халыҡ тырышып, өмөтләнеп йәшәй башлай. Ауылда ла, баҫыуҙа ла эштәр ҡыҙа.

Бер көндө эштән һуң ауыл халҡы бер-бер артлы клубҡа йүнәлә. Уларҙың артынан 80 йәштәрҙәге Кәрим бабай ҙа, таяҡҡа таянып, эйәрә. Унда йыйылыш бара ине. Агроном Марья Ивановна сәхнәгә сығып иген эшселәрен ихлас күңелдән маҡтағандан һуң, уларҙы тағы ла тырышып эшләргә өндәй:

— Эшләгеҙ, Почет грамотаһы менән бүләккә лайыҡ булырһығыҙ, — тип өмөтләндерә ул ауылдаштарын.

...Йыйылыш бөткәс, кешеләр өйҙәренә тарала башлай. Кәрим бабай ҙа, таяҡҡа таянып, уларҙан ҡалышмаҫҡа тырышты.

— Нимә икән һуң ул «грамота» тигәндәре? Һимеҙ буламы икән? — тип мығырлай-мығырлай ҡайтыу яғына ыңғайлай.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Силәбенең тынмаҫ моңдары. *Ҡамса Мортазин* .......... 3

**Силәбе башҡорттары фольклоры**

*Эпостар* .......... 8
Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу .......... 8
Маҡтымһылыу .......... 30
Сүкем батыр *(ҡобайыр)* .......... 36
*Халыҡ йырҙары* .......... 37
Урал .......... 37
Арғужа .......... 38
Ҡолой кантон .......... 39
Мейәс буйы .......... 43
Ҡушай .......... 44
Киҙәгәс күл .......... 44
Иҙәкәш .......... 45
Арғаяш .......... 45
Тәхәлемкәй .......... 46
Импаира-тиритур .......... 47
*Сеңләүҙәр* .......... 48
*Мәкәл-әйтемдәр* .......... 50
*Тыйыуҙар* .......... 51

**Балалар фольклоры**

Һөйгөстәр .......... 51
Таҡмаҡтар .......... 52
Үсекләшеүҙәр .......... 52
Көләмәстәр .......... 53

**Силәбе еренән сыҡҡан әҙиптәр һәм ғалимдар**

Нуриәғзәм Таһиров .......... 55
Әбдулҡадир Инан .......... 58
Тайфур Сөләймәнов .......... 61

Ҡадир Даян ........................................ 72
Ғ. Сәләм ........................................ 79
М. Һәй ........................................ 96
Жан Лоҡман ........................................ 101
Кәтибә Кинйәбулатова ........................................ 102
Уран Кинйәбулатов ........................................ 109
Рамаҙан Шәғәлиев ........................................ 115
Дамир Вәлиев ........................................ 118
Динә Талхина ........................................ 120

## Силәбелә хәҙерге осорҙа әҙәби тормош

Булат Батталов ........................................ 124
Алевтина Вәлиева ........................................ 128
Урал Сафиуллин ........................................ 130
Жанфиҙә Вәһапова ........................................ 133
Рамазан Вафин ........................................ 137
Урал Ҡолошов ........................................ 142
Файза Мәғәсүмова ........................................ 147
Ҡамса Мортазин ........................................ 149
Зимфера Ширванова ........................................ 152
Лилиә Әхмәҙиева ........................................ 154
Фидәрит Хафизов ........................................ 156
Юлиә Вәлиева ........................................ 159
Альвина Мөхәмәтйәнова ........................................ 161